ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 октябрь (карасай) 2016

№40 (718)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был исемлек...**

юлбашсыға һәйкәлдән башланһын



4

**Милләтебеҙ кото - Каруанһарай**



5

**Барыһы ла ҡулдан килә!**



6

**Беҙгә килһендәр генә әле -**



Башҡортостандың күпме хазинаһын күреп ҡайтасаҡтар! 8-9

**ТВ-программа** 14

***Почтальондар иғтибарына! Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Был юлы респонденттарға: "Пенсия йәшенә етеү бәхет тә ул..." - тигән һөйләмде уҙҙәренсә дауам итеүен һорап мөрәжәғәт иттек.

***Көнһылыу КОТЛОБАЕВА, хеҙмәт ветераны, Бөрйән районы:*** Пенсия йәшенә етеү, әлбиттә, бәхет! Күптәр пенсияға сығыуҙы ҡартлыҡ менән бутай. Кемдер үҙен тормош арбаһынан төшөп ҡалғандай тоя. Миндә ундай тойғоларҙың береһе лә булманы. Ғүмерҙең һәр миҙгеле хайран! Нәҡ яҙ, йәй, көҙ, ҡыш кеүек! Һәр миҙгел үҙ йәме, үҙ ғәме менән үҙенсә күркәм, үҙенсә ҡәҙерле... Унан һуң, олоғаймайым, тиһәң, өләсәй, олатай булыу бәхетен дә татымайынса, йәшләй үлергә кәрәк тә.

Пенсияға сығыу - тормоштоң сираттағы артылышына нөктә ҡуйып, икенсе, тағы ла бейегерәк, сифатлыраҡ үренә күтәрелеү бит ул. Уҡып йөрөгәндә программа тигән сиктәр эсендә булаһың. Заманында фәнни коммунизм тигән "әкиәт"те, башҡа һыймаҫ, ҡолаҡҡа ятмаҫ нәмәләрҙе уҡып ултырырға тура килде. Ә хәҙер күңелем теләгән бөтә әҙәбиәтте уҡырға, үҙем теләгән өлкәлә белем алырға мөмкинлегем бар.

Эшләп йөрөгәндә ябай хеҙмәткәрһеңме, етәксеһеңме, барыбер, тағы ла ҡатыраҡ кәртәләр ҡыҫымына эләгәһең. Теләйһеңме, юҡмы, файҙаһыҙ сараларҙа, исем өсөн үткәрелгән эштәрҙә ҡатнашырға, юғарынан төшөрөлгән мәғәнәһеҙ фармандарҙы үтәргә тура килә. Ә хәҙер күңел талабыма, зауығыма, инаныуҙарыма тура килгән эштәр эсендә йөҙөп йөрөп эшләйем. Теләгән ерҙәремә бара алам. Әлбиттә, донъя мәшәҡәттәре менән дә иҫәпләшмәйенсә булмай. Баҡса, мал тәрбиә талап итә. Өй эсендә лә эш етәһе. Ихтыяждар менән пенсия эсендә баланс тотоу зарурлығы ла бар. Шулай ҙа элек телефон, интернет аша ғына аралаша алған туғандарым, дуҫтарым менән күрешә алам.

Интернетта ултырғас, күптәр мине ваҡытымды бушҡа әрәм итеп ултырған һымаҡ күрә. Ә компьютер, интернет бары эш ҡоралым ғына. Ул әле уй етһә лә, буй етмәҫ ил киңлектәрендәге туғандарымды табып, шәжәрә төҙөүҙә ярҙам итә. Уның аша үткән быуаттың 80-се йылдарынан алып ошо юҫыҡта иҫ китмәле эштәр атҡарып ятҡан Илдар Алтыншин туғаныма барып сыҡтым. Илдарҙың эшенә әҙме-күпме үҙемдең өлөшөмдө керетә алдым. Быйыл уның етәкселегендә Алтыншиндар йыйыны булып, туғандар күҙмә-күҙ осрашып, таныша алдыҡ. Әлеге көндә ошо өлкәлә бер-беребеҙгә ярҙам итешеүсе хеҙмәттәштәр тупланып киләбеҙ.

Интернет яланында "Башҡорт проекттары" атамаһы аҫтында киң даирәлә эшмәкәрлек алып барған милләттәштәремде таптым. Уларҙың ҡоласы етмәгән бер өлкә лә юҡ. Былтыр башҡорт электрон китапхана эшләү проекттарында ҡатнаштым. Киләсәктә улар аудиокитаптар ҙа эшләйәсәк. Быйыл инде Башҡорт Википедияһына мәҡәләләр яҙам. Әле ундағы "Башҡортостан айлығы"нда ҡатнашам. Википедия аша Башҡортостан буйлап сәйәхәт итеү, яңы ерҙәр күреү мөмкинлегем асылды. Ғәжәйеп кешеләр менән таныштым, яңы дуҫтар таптым.

Башымдағы барлыҡ проекттар ун ғүмергә бүлһәң дә артып ҡалырлыҡ. Ҡыҫҡаһы, Аллаһы Тәғәлә һаулыҡ менән ваҡытын насип итһә, ҡартлығым да үҙе бер мөғжизә генә...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# БҮЛӘК БИТ УЛ ҠАРТЛЫҠ!



*Ни мәрхәмәт беҙгә тәбиғәттән:*
*Олоғаябыҙ яйлап-яйлап ҡына,*
*Тамғаларын һала Хаҡ Тәғәлә*
*Берәмтекләп, һайлап-һайлап ҡына.*

*Толомдарҙың ҡуңыр тулҡынына*
*Уҡа булып сал сәс юлаҡлаған,*
*Һиҙҙермәйсә генә сырайҙарға*
*Ни арала һырҙар ҡунаҡлаған.*

*Күҙ өйрәнеп кенә олоғаябыҙ,*
*Тел әйләнмәй "картлыҡ" тигән һүҙгә,*
*Ә һикерәм тиһәң - билдән ала,*
*Йүгерәйем тиһәң, теҙгә бөгә.*

*Үтмәсләнә бара күҙ ҡоросо,*
*Дәңгелдәккә ҡала былбыл телдәр,*
*Ярай әле кинәт ҡартаймайбыҙ,*
*Ҡотто алыр ине күргән хәлдәр.*

*Ә былайға - һәүетемсә генә*
*һиҙҙермәйсә йылдар һырҙар һала.*
*Бүләк бит ул ҡартлыҡ!*
*Ҡәҙерен бел!*
*Күпмеләргә ҡартлыҡ килмәй ҡала...*

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘ ҺӨНӘРЕНЕҢ ОҪТАҺЫНА...

## һәр ерҙә лә эш бар

*Даян СОЛТАНҒУЖИН, Хәйбулла районы Аҡъяр үҙәк район дауаханаһы онкологы:* Беҙҙең ауылдарҙа мәҙәниәтте, тарихты, телде, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе белгән ҡыҙҙар-егеттәр йәшәй. Нәҡ ошо илһөйәр йәштәр киләсәктә үҙ районында етәксе урындарҙа эшләргә тейеш. Райондарҙа потенциалдары юғары булған йәштәр күп, шуға ауылдар бөтә, тигән фекер менән килешмәйем. Тик уларҙың күбеһе үҙ һәләттәрен үҫтерә, мөмкинлектәрен дөрөҫ ҡуллана ғына белмәй. Ғаиләһенә, ауылдағы башҡа йәштәргә ҡарап өлгө алып үҫкән кеше бөтөн төрлө тормош барлығын белмәҫкә лә мөмкин. Шуға күрә, балаларға мәктәп эскәмйәһендә үк шәхес булараҡ үҫешеү, маҡсат ҡуя белеү, үҙаллы белем алыу тураһында аңлатырға кәрәк. Улар баштан уҡ үҙе үҙләштерергә теләгән һөнәр тыуған төйәгендә талап ителәме, әллә был райондың иҡтисади-социаль хәлен яҡшыртыу өсөн икенсе һөнәрҙе һайлау ҡулайлыраҡмы икәнен белергә тейеш. Ғөмүмән, бала юғары уҡыу йортон һайлағанда, Өфөлә уҡыным килә, Мәскәүҙә ҡалғым килә, БДУ-ла йәки БДМУ-ла уҡығым килә, тип түгел, ә ниндәй һөнәрҙе үҙләштерергә теләүенә ҡарап эш итергә тейеш. Мәҫәлән, мал табибы булырға теләй икән - ауыл ерендә был кешегә эш һәр ваҡыт була, мотлаҡ Өфөгә уҡырға килмәһәң дә, ошо йүнәлеш буйынса белем биргән башҡа ҡалалағы юғары уҡыу йортона инергә мөмкин.

Ситкә уҡырға киткән йәш кадрҙарҙың ауылға эшкә әйләнеп ҡайтмаяу ла беҙҙә борсоуға һалған проблема. Йыш ҡына йәштәр ауыл ерендә уңайлы шарттар, ял итеү үҙәктәре булмауын сәбәп итеп күрһәтә. Ләкин хәҙерге заманда теләге булған, тырыш, маҡсатлы кеше үҙенең шәхси йортонда ҡалалағы бөтә уңайлыҡтарҙы булдыра ала. Аҡъярҙа хатта кинотеатр ҙа асылғайны, ләкин халыҡ йөрөмәгәс, ябылды. Тимәк, уңайлыҡтар булдырылыу менән генә мәсьәлә хәл ителмәй. Йәш белгес үҙе теләп районына кире ҡайтырға тейеш. Быны өсөн тәү сиратта район етәкселегенең уҡырға китеүсе йәштәр менән бәйләнеште өҙмәүе, кәрәкле урында ярҙам, иғтибар бүлеп тороуы талап ителә.

"Ауылда эш юҡ, беҙ унда ҡайтып нимә эшләйек?" - тип фекер йөрөтөүселәргә лә кәңәшем бар. Әгәр ҙә һин үҙ эшеңдең оҫтаһы икән, был өлкәлә белемеңде камиллаштырып, эшләргә тырышып торһаң - һине һәр урында ҡуш ҡуллап эшкә аласаҡтар. Хатта эш урыны табылмаған осраҡта ла бындай тырыш кешеләр бер ҡасан да ҡул ҡаушырып ултырмай һәм һис юғында үҙ эшен асып ебәрә ала. Ә ауылда тейелмәй ятҡан эш күп, ялҡауың ғына килмәһен. Башланғыстары алға китмәгән ҡайһы бер эшҡыуарҙарҙы беләм. Улар үҙләштерелгән, һыналған тармаҡ буйынса, быға тиклем эшләп килгән башҡа берәүҙең тәжрибәһен белеп, шул уҡ эште ойоштороп ебәреүселәр. Шуға күрә, кешегә ҡарап эшләһәң, унан күпкә яҡшыраҡ башҡарырға кәрәк, улай итә алмаһаң, үҙ юлың менән бар. Бөтә уңыштарға маҡсатлы, тормошон планлаштырған, үҙаллы белемен даими рәүештә камиллаштырып, заман менән бергә атлаған кеше генә өлгәшә ала. Буш ваҡытында телевизор ҡарап, компьютерҙа уйнап, йәйгеһен ҡояшта ҡыҙынып ятыусы эш тапмаһа, ғәжәпләнерлек түгел. Ул хыялланған урынға егерле, үҙе теләп эшләгән, ышаныслы, яуаплы һәм буш ваҡытында үҙаллы берәй яңылыҡты өйрәнергә тырышып йөрөгән кешене алып та ҡуйғандар, тимәк. Быны юристар һәм бухгалтерҙар күп тиҙәр, ләкин яҡшы юрист һәм бухгалтер табыуы ауыр. Ниндәй генә өлкәлә эшләһәң дә, үҙ һөнәреңдең оҫтаһы булһаң, бөгөнгө заманда ҡайҙа ла ҡуш ҡуллап эшкә алырҙар.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Был юлы респонденттарға: "Пенсия йәшенә етеү бәхет тә ул..." - тигән һөйләмде үҙҙәренсә дауам итеүен һорап мөрәжәғәт иттек.




**(Башы 1-се биттә).**

*Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:* Пенсия йәшенә етеү бәхет тә ул, әммә... Итәғәтлелектәнме, ихтирамлыҡтанмы, үҙебеҙҙән ололарға: "Яҡшы күренәһең!" - тип әйтергә күнеккәнбеҙ. Хәҙер миңә лә шулай тиҙәр. Был бер ни тиклем унайһыҙлыҡ тыуҙыра, әлбиттә. Ә шулай ҙа кешенең мәртәбәһе йәшлек менән генә үлсәнмәй, тип уйлайым. Әгәр оло йәшкә үҙ-үҙеңде ихтирам итеү һәм бойондороҡһоҙлоҡ тойғоһо биреүсе белем, тәжрибә туплап инһән, оло йәш ижади әүҙемлек, рухи үҫеш мәленә әүерелә. Йәшлектәге ян-яҡҡа бәргеләнеүҙәрҙән арынған мейегә йәшәйеш серҙәренә күҙ һалыу еткән ваҡыт, тиер инем мин оло йәште. Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, барыбер бәхетле осор ул - ҡартлыҡ.

Ҡайһылыр шундай бер гипотеза уҡығайным: уға ярашлы, Аллаһы Тәғәлә кешегә 40 йыл ғүмер биреп яралта инкән. Унан һуңғы йылдар - ул бүләк, йәки бөтөнләй башҡа тормош. Икенсе төрлө әйткәндә, шул йәштән һуң тәбиғәт өсөн беҙҙең кәрәгебеҙ бөтә, тимәк, артабанғы ғүмер - ниндәйҙер бүләк, бонус кеүегерәк булып сыға.

Ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел, тип тә әйтәләр, ә шулай ҙа уның менән дуҫ булыуың хәйерле, үҙ-үҙеңде мин шәп әле, шәп, тип алдаштырыуҙың фәтүәһе юҡ. Беҙгә бер кем дә, бер нәмә лә тейеш түгел икәненә әҙер булырға кәрәк. Әгәр яҡындарығыҙ һеҙгә иғтибарлы түгел икән, был бары тик уларҙың проблемаһы.

Шулай уҡ үҙ йәшеңдән йәшерәк күренергә тырышып, саманы онотоп ебәрергә лә ярамай. Бында көлкөгә лә ҡалыуың мөмкин.

Ҡартлыҡ - йәшлек кеүек үк тәбиғи. Ул йәй һуңының көҙҙөң тәүге ал шәфәғенә күсеүенең тулҡынландырғыс мәле. Был беҙ өсөн саҡта һәр көндөң яңы тормош булып башланыуына бәйле. Шуға, һәр миҙгелдең үҙ матурлығына ҡыуанып, уны ҡабул итеп, һәр көндөң ҡәҙерен белеп йәшәргә кәрәк.

*Земфира ЙӘНТУРИНА, хеҙмәт ветераны:* Пенсия йәшенә етеүҙе бәхеткә һанап, көтөп алдым. 55 йәшем тулыу менән хаҡлы ялға киттем һәм һис тә үкенмәйем. Ҡатын-ҡыҙҙың былай ҙа эше тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел, ауыл ерендә бигерәк тә. Эштән киткәнгә тиклем, артабан нимә эшләрмен, нимә менән шөғөлләнермен, тип уйлай инем, ғүмер буйы көн дә иртән эшкә барып өйрәнгәс, ҡыйын булып торор инде, тигәйнем. Баҡтиһән, беҙ үҙебеҙҙе шулай тип алдайбыҙ ғына икән, тормош пенсияға сыҡҡас та шулай уҡ дауам итә. Әлбиттә, ҡулы бер эш белмәгәндәр ваҡытын нисек уҙғарырға, көнөн нисек үткәрергә белмәй аптырайҙыр, ә инде үҙенә-үҙең эш табып, яратҡан шөғөлдәреңде башҡарһаң, йән, күңел рәхәтләге табаһың.

Бәлки, ҡала кешеләре өсөн пенсияға сығыу йәмғиәттән айырылыу кеүек ауыр ҡабул ителәлер, ә ауыл кешеһе өсөн ул мөһим ваҡиға. Элегерәк, мәҫәлән, производство гөрләп торған замандарҙа фермаларҙа эшләүселәр пенсияға сығыуҙарын түҙемһеҙләнеп көтөп алдылар. Шуға тиклем бөтөн сәләмәтлектәрен бөтөрөп өлгөрә ине улар. Ғөмүмән, ауылда йәшәүселәр, физик хеҙмәт башҡарыусылар өсөн пенсия йәшенә етеү ысын бәхет булды. Хәҙер, кирећенсә, пенсияға сығыуҙы нисек тә булһа кисектерергә тырышалар. Быны мин кешенең Аллаһы Тәғәлә биргән бәхеттән баш тартырға тырышыуы, уның ихтыярына ҡаршы барыуы тип ҡарайым. Тәбиғәттә һәр нәмә уйланылған, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты бар икәнен дә иҫтән сығармайыҡ.

Бөгөн күп нәмә аҡса менән баһалана, ләкин ғүмерең, ашар ризығың, эсәр һыуың бөтһә, уларҙы аҡсаға ла һатып ала алмайһың икәнде онотorға ярамай. Быға миҫал итеп, үҙем шаһит булған бер ваҡиғаны һөйләмәксемен: күрше ауылда ике йәштәш пенсияға сыҡты. Береһенә пенсия күләме 40 һум (элекке пенсиялар хәҙер көлкө генә тыуҙыра инде), икенсеһенә күберәк тәғәйенләнгән. Күберәк алырға тейешлеһе, тәкәбберләнеп: "Пенсияң 40 һум ғына сыҡтымы?" - тип һорағас, был ҡатын: "Шөкөр итһән, уныһы ла етер, шуны 40 йыл иҫән-һау ашарға яҙһын!" - тип яуаплаған. Ысынлап та, күберәк пенсия алғаны йүнләп пенсияһын да ала алмайынса вафат булды, икенсеһе иһә 40 һум пенсияһын 40 йылдан да ашыу файҙаланды. Шуға, һәр нәмәгә шөкөр итеп, ҡартлыҡтан да шатлыҡ табып йәшәйек, тимәксемен.

*Самат МОСТАФИН, пенсия алдында тороусы хеҙмәткәр:* Пенсия йәшенә етеү бәхет тә ул, тик бөгөнгө пенсия реформаһы, йәғни пенсия йәшен оҙайтыу киләсәктә күптәр өсөн был бәхеттән мәхрүм итеүгә бер аҙым кеүек күренә. Һәм был хәүеф, минеңсә, нигеҙҙә, тап ир-атҡа янай, сөнки уларҙың ғүмер оҙайлығы былай ҙа ҡатын-ҡыҙҙар менән сағыштырғанда ҡыҫҡараҡ, ир-ат кисерештәрен гүзәл зат кеүек тышҡа сығарып бармай, йөрәгенә йыя - был да үҙенең йоғонтоһон яһамай ҡалмай, әлбиттә, һәм, һәҙәмтәлә, көслө зат ҡайһы берҙә хатта пенсия аҡсаһын да ала алмай үлеп китә. Икенсе яҡтан ҡарағанда, хатта ил етәкселәренең сығыштарын анализлағанда ла, киләсәктә дәүләт пенсияһына өмөт итмәгәҙ, тигән фекерҙе күрергә мөмкин. Ярай, беҙҙең быуын хаҡлы ялға сығып өлгөрөр ҙә ул, ләкин пенсия "саҙаҡаһы" хәйерселеккә еткерер кеүек. Әгәр сәләмәтлегең яҡшы булһа, әлбиттә, ул тиклем проблема булмаясаҡ, әммә һаулыҡ яғы ҡаҡшаһа, бөттөң, тигән һүҙ - аҡсаңды нимәгә тотоноп, нисек еткерергә белмәйәсәкһең.

Ыңғай яғына килгәндә инде, яратҡан, күңел тартҡан хобби менән шөғөлләнергә, ғаиләнә, яҡындарыңа иғтибар бүлергә күберәк ваҡыт буласаҡ, тип уйлайым. Ҡулыңдан эш килә, ялҡау түгелһең икән, өй-йорт тирәһендә лә һәр ваҡыт эш табылып тора. Шулай ҙа, бәлки, өҫтәмә килем сығанағы - эш эҙләргә лә тура килер, моғайын...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ырымбур өлкәһе губернаторы Юрий Берг менән осрашты. Осрашыу барышында төбәк-ара бәйләнештәрҙе нығытыу, сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек мәсьәләләре ҡаралды. Шулай уҡ сәнәғәтте үҫтереүгә һәм энергетика хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу мөмкинлектәре тикшерелде.

✓Республика Хөкүмәте йортонда Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Фән буйынса совет ултырышын үткәрҙе. Ул төбәктең хәҙерге торошона һәм үҫемселеккә ресурстарҙы һаҡлаусы технологиялар индереү мөмкинлектәренә арналды. Июль айында РФ Президенты ауыл хужалығын үҫтереү маҡсатында дәүләт ғилми-техник сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса саралар тураһындағы Указға ҡул ҡуйғайны. Уға ярашлы 2025 йылға тиклем тармаҡты үҫтереү буйынса һәр төбәк программа ҡабул итергә тейеш. "2020 йылға ауыл хужалығы продукцияһы етештереүҙең дөйөм күләмен 230 млрд һумға арттырырға кәрәк. Аграр өлкәгә инновация технологияларын индермәйенсә был мөмкин түгел", - тине республика Башлығы.

✓Ауыл тематикаһы буйынса Бөтөн Рәсәй мәғлүмәт проекттары конкурсы - "Минең ерем - Рәсәй" милли премияһына йомғаҡ яһалды. Конкурсҡа 77 төбәктән 3000-гә яҡын ғариза килгән. Төрлө номинацияларҙа "РБК-Өфө" сайтының баш мөхәррире Рушана Ибраева - беренсе, Иглин районынан публицист, фермер хужалығы етәксеһе Хәсән Иҙиәтуллин - икенсе, "Туймазы хәбәрҙәре" гәзите мөхәррире Радмир Ҡолоев өсөнсө премия яуланы. Бәйгене Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы ойоштorҙо.

✓Бөтөн Рәсәй кадастр инженерҙары съезы сиктәрендә Өфөлә геодезистарға һәйкәл асылды. Ул Крупская урамында, Башҡортостандың Росреестр идаралығы бинаһы янында ҡуйылды. Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, скульптураның макетын Хәлит Ғәлиуллин әҙерләгән. Бер тоннаға яҡын бронза һәйкәл Свердловск өлкәһенең Красноуфимск ҡалаһы оҫтаханаһында ҡойолған.

✓Башҡортостандың Мәғариф өлкәһендәге контроль һәм күҙәтеү идаралығы етәксеһе вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп Илдар Мәүлитбирҙин тәғәйенләнде. Әлегә тиклем ул ведомтсво начальнигы урынбаҫары вазифаһын биләне. 2010 йылдан Башҡортостандың Мәғариф өлкәһендәге контроль һәм күҙәтеү идаралығын етәкләгән Альмира Ғәниева үҙ теләге менән хаҡлы ялға сыҡты, тиелә республика Башлығы бойороғонда.

*БЫЛ АЙҘА...*

# БУЛҒАН БОЛДОҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛӘЙЕК




**Йылы көндәр, әбейҙәр сыуағы котә торғас, әбейҙәр көнө килеп еткәнен дә һиҙмәй ҡалынған. Өлкәндәр көнө тураһында әйтеүем. Көҙҙөң һуңғы сыуағына шат булдыҡ, күңел сыуағы ла китмәһен ине йөҙҙәребеҙҙән, шулай бит? Өлкәндәр көнөндә (1 октябрь) генә түгел, көн һайын, сәғәт-минут һайын йөрәк йылыбыҙҙы бүлеп, иғтибар-хәстәрҙәребеҙ менән ҡурсалап йәшәйек оло быуынды: уларҙың көнө беҙгә лә килеп етерен онотмайыҡ, бирһен Хоҙай…**

Ошо уҡ мәлдә Халыҡ-ара музыка көнө лә билдәләнә икән, шуны ла белеп ҡуйһын йырмоң һөйөүселәр. Әйткәндәй, музыканы һынландырыусы тағы бер дата бар октябрь баштарында - Бөтөн донъя архитектура (**3**) көнө. Ә музыканың бында ни ҡыҫылышы, тиһегеҙме? Шундай ҡанатлы һүҙҙәрҙе ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын: "Архитектура - ул "ҡатып ҡалған" музыка", - тигәндәрен. Был, әлбиттә, сәнғәттең ошо төрөнә, боронғо архитектура ҡомартҡыларының ҡабатланмаҫ гүзәллегенә, мөһабәтлегенә һоҡланыуҙан тыуған аналогия. Ошо уҡ көндө (**3**) Халыҡ-ара табиптар, ә унның иртәгәһенә (**4**) Бөтөн донъя йәнлектәр көнө билдәләнә.

Тағы бер һөнәри байрам - Уҡытыусылар көнө (**5**) бөтөн халыҡ байрамына әүерелгән, тип әйтергә лә булалыр. Артабан иғтибарҙы ауыл хужалығы өлкәһенә туплайыҡ, сөнки был айҙа бер-береһе менән тығыҙ бәйле өс көн бар. **9 октябрь** календарҙа бөтөн илде туйындырып тороусы Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте эшсәндәре көнө тип билдәләнһә, **15 октябрҙә** - ауыл тормошона йәм биреүсе, йән өрөүсе Ауыл ҡатындары көнө. Ул бөтөн донъя күләмендә киң билдәләнә, тик беҙҙә генә был көндө әллә ни һанлап бармайҙар һымаҡ. Ә бит тап егәрле, өлгөр ауыл ҡатындарының ҡулдары һәм тырышлығы менән табыныбыҙҙан аҡ өҙөлгәне юҡ: һөтө, майы, ҡаймағы, эремсеге... Ул ғына ла түгел, ите лә, ҡабарып бешкән икмәге лә, йәшелсә һәм емешеләге лә уларһыҙ көн дә табыныбыҙҙан урын ала алмаҫ ине. Бөтөн донъя кимәлендә икмәк һәм аҙыҡ-түлек көнө (**16**) билдәләнә икән, тимәк, бында иргеттәр менән бер ҡатарҙан көс түгеүсе, балалар үҫтереүсе, ауылдарыбыҙҙы йәшәтеүсе ҡатындар хеҙмәте лайыҡлы баһаһын алырға тейештәр.

Октябрҙә бар бер көн - Республика көнө (**11**). 1990 йылдың тап ошо көнөндә Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителеүен, халҡыбыҙҙың күңел торошондағы бығаса булмаған рухи күтәрелеш ваҡиғаларын, тиңһеҙ илһөйәрлек, сикһеҙ ғорурлыҡ хистәрен шул көндәр шаһиты булған һәр кемебеҙ яҡшы хәтерләйҙер. Үҙаллылыҡ емештәрен бер аҙға ғына тәмләп ҡала алдыҡ, буғай: йәштәргә торлаҡ төҙөлдө, асфальт юлдар һалынды, ауылдарға зәңгәр яғыулыҡ килде... Әсә телебеҙ, ниһайәт, дәүләт теле статусы алды. Һәм шуның менән яйлап барыһы ла элекке "ярыҡ ялғаш" янына әйләнеп ҡайта башланы.

**Беҙ, күрәһең, бер кем дә әҙерҙе килтереп ҡулға тоттормаҫын уйлап бирмәнек, теҙгенде бушатҡандан-бушата барҙыҡ, күршебеҙҙәге йән дуҫтарҙан өлгө ала белмәнек. Тап шуға ла улар күп позицияла беҙҙән алға сыҡты. Уҙған быуат башындағы киҫкен көрәш һөҙөмтәһендә тыуған автономия идеяһының дауамы булған үҙаллылыҡ статусын, хатта уны нарыҡлаусы арбағыс махсус терминды ла ҡурҡа-өркә генә телгә ала торғас, тамам онотоуыбыҙҙы тарих ғәфү итерме икән? Ә бит ил етәкселеге Башҡорт автономияһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын билдәләү хаҡында махсус Указ ҡабул итеп, илдең фәҡәт төбәктәр ҡеүәте менән көслө һәм берҙәм булыуын таный.**

Суверенитет төшөнсәһе телдән төшөп ҡалды, ләкин эш терминда ла түгел. Бер быуатлыҡ тарихы булған үҙаллылыҡ статусы үҙ милли рухыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе, ҡомартҡыларыбыҙҙы, ер-һыуыбыҙҙы һәм, иң мөһиме, туған телебеҙҙе һаҡлап, ҡәҙер һәм хөрмәт итеп, башҡаларҙан да шуны талап итеп, Рәсәй менән бергә-бергә көн күреүгә ҡайтып ҡала түгелме ни? Шуныһы күңелгә ҡыуаныс: дәүләт символдарыбыҙ беҙҙең өсөн изге билдәләргә әүерелде, беҙ уларҙы ҡәҙерләйбеҙ, ололайбыҙ, яуаплы сараларҙа, спорт ярыштарында улар һәр саҡ беҙҙең менән.

**12 октябрь** республикабыҙҙың Дәүләт гимны һәм Дәүләт гербы тураһында махсус Закондар ҡабул ителеүе менән дә тарихта ҡалыр иҫтәлекле, тантаналы көн. Республикабыҙ хаҡында һүҙҙе унның уникаль тәбиғи ҡомартҡыларын һаҡлау мәсьәләһенә йүнәлтәйек, сөнки Башҡортостанды Башҡортостан иткән, беҙгә Хоҙай үҙе бүләк иткән ер-һыуыбыҙҙы, урмандарыбыҙҙы ҡырып-ҡоротоп бөтөрөүгә юл ҡуймаҫҡа бурыслыбыҙ. Беҙгә бит һуң ата-бабаларҙан яланғас, пеләш diләнкәләр, ашалып-аҡтарылған тауҙар, тауыҡ кисеп сығырлыҡ йылғалар тороп ҡалмағайны, уларға әлеге яңы быуын ҡулы менән зыян килтерелде. Ә тәбиғи ҡомартҡыларыбыҙ, донъяла тиңе булмаған мәмерйәләребеҙ? Уларҙы күҙ ҡараһылай һаҡлау фарыз. Бының өсөн мөмкинлектәр юҡ түгел, уны аҡыллы итеп файҙалана белеү генә кәрәк. Мәҫәлән, Бөтөн донъя кеше йәшәгән урындарҙы һаҡлау (**6**), йәнә лә Ҡурсаулыҡтар һәм милли парктар эшсәндәре (**14**) көндәре исем өсөн генә булдырылмағандыр бит, моғайын? Халыҡ-ара Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы көнө (**24**) беҙгә бәғзе мәсьәләләрҙе ошо абруйлы орган аша хәл итеү мөмкинлеген дә иҫкәртеп торғандай.

Календарҙы тәфсирләп ҡарап ултырһаң, телгә алырлыҡ та, алмаҫтай ҙа ваҡиғалар күп был айҙа. Уларҙың барыһы хаҡында ла әйтеп бөтөү мөмкин дә түгел, ә шулай ҙа ай ахырындағы тағы бер датаға ҡағылып китәйек, булмаһа, сөнки тарихыбыҙҙа ҡанлы-йәшле, рәнйеүле эҙҙәр ҡалдырған золом афәтен кешелектең оноторға хаҡы юҡ! Сәйәси репрессия ҡорбандарын иҫкә алыу (**30**) көнөндә нахаҡҡа рәнйетелгән, үлтерелгән миллионлаған ватандаштарыбыҙ рухына аяттар бағышланһын ине...

**Шулай итеп, ҡарасай айында донъяға килгән күренекле шәхестәребеҙ:**

**9** - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, БашЦИК рәйесе, РКП(б)-ның Башҡортостан буйынса сәйәси секретары, халыҡ комиссарҙары Советы рәйесе урынбаҫары, башҡорт телен ҡулланыуҙы бойомға ашырыу буйынса комиссия рәйесе, Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры **Шәһит Хоҙайбирҙиндың** тыуыуына - 120 йыл (1896-1924).

**15** - педагог-методист, педагогика фәндәре кандидаты, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, К.Д. Ушинский миҙалы кавалеры, "Әлифба" дәреслеге авторы **Абдрахман Ғәлләмовтың** тыуыуына - 90 йыл (1926-1989).

**25** - атаҡлы ғалим- тюрколог, филология фәндәре докторы, профессор, яҙыусы, Ленин һәм "Почет билдәһе"ордендары кавалеры **Жәлил Кейекбаевтың** тыуыуына - 105 йыл (1911-1968).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ИҒТИБАР!*

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Октябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 1 кеше **"Башкирские исторические предания и легенды"**, 1 кеше **"Әхмәтзәки Вәлиди"**, 10 кеше 2017 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.




**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Өфөнән тарих, йәмғиәтте өйрәнеү һәм экология уҡытыусыһы Сергей Переверзев Һамарҙа "Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы - 2016" конкурсында Башҡортостан исеменән сығыш яһай. Педагогик оҫталыҡ бәйгеһе алдағы йылдағы еңеүсенең тыуған төбәгендә уҙғарыла. Сергей Переверзев 159-сы мәктәптә уҡыта. Ул "Йыл уҡытыусыһы - 2016" ҡала һәм республика конкурстары еңеүсеһе. Федераль этаптың тәүге турында 85 төбәктән уҡытыусы ҡатнаша. Финалға сығыусылар Мәскәүгә икенсе турға барасаҡ.

✓ Башҡортостанда йылытыу миҙгеле башланды. Ҡайһы бер муниципаль берәмектәр йорттарға һәм социаль объекттарға йылы биргән дә инде. Республика Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, барлыҡ ҡалалар һәм райондар йылытыу миҙгеленә әҙерлек паспорттарын тапшырған. Торлаҡ фонды, ҡаҙанлыҡтар һәм йылылыҡ селтәрҙәре ҡышҡа әҙер.

✓ Мостай Кәрим исемендәге фонд менән берлектә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институты октябрь-декабрь айҙарында тәржемәселәр араһында бәйге уҙғара. Әлеге ваҡытта Әҙәбиәт институтында милли телдәрҙән тәржемә итеү йүнәлешен тергеҙергә ниәтләйҙәр. Башҡорт теленән тәржемәселәр конкурсы 2019 йылда халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 тулыу айҡанлы ойошторола. Тулыраҡ мәғлүмәт Мостай Кәрим исемендәге фондтың сайтында бирелгән.

✓ Башҡортостан йыйылма командаһы билбаулы көрәш буйынса Рәсәй чемпионатынан 11 награда менән ҡайтты. Рөстәм Арыҫланов - алтын, Артур Зөлҡәрнәйев, Илфаҡ Ибәтуллин, Евгений Бикташев, Наталья Туҡтағолова - көмөш, Динар Калеев, Айнур Һыртаев, Роксана Зямалеева, Ләйлә Сибәғәтуллина, Дмитрий Агапитов, Наил Мөхәмәтйәров бронза миҙалға лайыҡ булды. Владикавказда үткән ярыштарҙа 29 төбәктән 300 спортсы ҡатнашты.

✓ 1 октябрҙән "Голос РБ" порталында 2016 йылда халыҡҡа хеҙмәттәр күрһәтеү менән шөғөлләнгән дәүләт һәм муниципаль ойошмаларҙың эше буйынса һорау алыу башлана. Унда теркәлеү үткән һәр кем ҡатнаша ала, бының өсөн компьютер йәки интернетҡа сығыу мөмкинлеге булған мобиль ҡоролма ла етә. Һорау алыу урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһен күтәреү маҡсатында уҙғарыла.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА...

# ДЕПУТАТТАР ЭШ БАШЛАНЫ

✓ Дүртенсе саҡырылыш Өфө ҡала Советын Валерий Трофимов етәкләне. Советтың тәүге ултырышында депутаттар бер тауыштан уны һайланы. Валерий Трофимовтың кандидатураһын ҡала Советында күпселекте тәшкил иткән "Берҙәм Рәсәй" партияһының фракцияһы тәҡдим итте. Яңы рәйестең депутат булып эшләү тәжрибәһе бар, ул 2008-2012 йылдарҙа икенсе саҡырылыш составында булғайны. Әлеге мәлдә Валерий Трофимов "Энергоинжиниринг" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры.

✓ Өфө ҡала Советында рәйес урынбаҫарҙары өсәү буласаҡ. Был вазифаларға Кирилл Бадиков, Анатолий Горячев һәм Руслан Солтанов һайланды. Ҡала Советы структураһын дүртенсе саҡырылыш депутаттары беренсе ултырышта раҫланы. Шулай уҡ даими комиссиялар һаны ла 10-ға тиклем артты. Структураға торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм экология; бюджет, финанс һәм һалым; фән, мәғариф, йәштәр сәйәсәте һәм спорт; йәмәғәтселек менән бәйләнеш, тышҡы һәм төбәк-ара бәйләнеш; сәнәғәт һәм иҡтисади үсеш; социаль сәйәсәт һәм гуманитар мәсьәләләр; хоҡуҡи мәсьәләләр, граждандарҙың хоҡуғын һәм иркен яҡлау; архитектура һәм төҙөлөш; ер һәм милек мөнәсәбәттәре; инвестициялар, эшҡыуарлыҡ һәм ҡулланыусылар баҙары буйынса даими эшләйәсәк комиссиялар инде. Даими эшләмәһә лә, Совет регламентын, депутат статусын һәм этикаһын күҙәтеү комиссияһы ла һайланды.

✓ 2017 йылдың ғинуар айында киҙеүҙең эпидемик характер алыуы ихтимал, тип хәбәр итә Роспотребнадзор етәксеһе, Рәсәйҙең баш дәүләт табибы Анна Попова. "АН3N2 киҙеүенең штаммы үҙгәреүе беҙҙә хәүефкә һала. Былтыр ул 2013 йылдағы "Швейцария" булһа, быйыл иһә "Гонконг" варианты. Сир ауыр үтә һәм уның быйыл Рәсәйгә килеүе күҙаллана", - тип аңлатма бирҙе Анна Попова. Уның әйтеүенсә, киҙеүҙең был штаммы бәләкәй балалар, иммунитеты ҡаҡшаған кешеләр һәмололар өсөн хәүефле. Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, республикала киҙеүҙе иҫкәртеү өсөн халыҡты иммунизациялау әүҙем бара. Ведомство мәғлүмәттәренә ярашлы, 715 меңдән ашыу кешегә прививка яһалған, уларҙың өс меңдән ашыуына - предприятиелар аҡсаһы иҫәбенә. Уҙған йылдың ошо уҡ осоронда федераль ҡаҙна иҫәбенә 64,5 мең кеше прививка яһатҡан.

✓ 18-21 октябрҙә Өфөлә XVI Рәсәй энергетика форумы, "Урал энергетикаһы" халыҡ-ара күргәҙмәһе һәм "Йылылыҡ менән тәьмин итеү. Электр техникаһы. Кабель" тип аталған XXII махсус күргәҙмә ойошторола. Форумдың һәм күргәҙмәнең маҡсаты - энергетика өлкәһендә төбәк-ара һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү, илдәге энергия системаһы эшенең һөҙөмтәлелеген арттырыу. Форумда Рәсәй яғыулыҡ-энергика комплексы эксперттары, федераль һәм төбәк министрлыҡтары, ҙур тармаҡ предприятиелары етәкселәре ҡатнашасаҡ. Башҡортостанда Рәсәй энергетика форумы 2000 йылдан башлап уҙғарыла һәм ошо ваҡыт эсендә үҙенең һөҙөмтәлелеген раҫланы.

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ

# БЫЛ ИСЕМЛЕК...

## юлбашсыға һәйкәлдән башланһын



**"Йөҙ йыллыҡҡа - йөҙ объект" акцияһы, әлбиттә, ҡолаҡ теләп ҡабул итерлек яңылыҡ. Бигерәк тә нисек ишетә, шулай мейеһенә һеңдереп, йөрәк төбөнә һалып өйрәнгән хәйләһеҙ беҙҙең халыҡ өсөн.**

Рәсәй Президенты Башҡортостан автономияһының 100 йыллығын таныпп, уны ил кимәлендәге әһәмиәткә эйә байрам итеп уҙғарыу тураһында Указ сығарған икән, быға шатланырға, был документты республикабыҙҙы, халҡыбыҙҙы таныу билдәһе итеп ҡабул итергә кәрәк. Ике йылдан артыҡҡа һуҙылып булһа ла Башҡортостан автономияһының Рәсәй Хөкүмәте тарафынан танылыуы баһырбер мөһим, тип уйлайым.

Башҡортостан буш ерҙә барлыҡҡа килмәгән. Кемдер уны бармаҡ менән күккә төртөп күрһәтеп тә тыуҙырмаған. Башҡортостандың дәүләтселеген булдырыуҙың башында аныҡ кешеләр, шәхестәр торған. Улар төҙөп ҡалдырған дәүләттең юлбашсыһы ла булған. Йөҙ йыллыҡ уңайынан улар тураһында ла иҫкә алырға тейеш. Донъялағы иң бөйөк илдәрҙең береһе Рәсәй яҙмышында мөһим роль уйнаусы кешеләрҙең береһе, уны федерализм (демократик дәүләт) юлына сығарыусы шәхес - Зәки Вәлидигә Өфөлә (Стәрлетамаҡта ла) һәйкәл ҡуйыу - был акцияла беренсе һанлы объект булырға тейеш, тип иҫәпләйем.

Мин тыуған илемдең, республикамдың патриоты булыу өҫтөнә, тыуып үҫкән төйәген һөйөүсе лә. Шуға күрә, Белорет тураһында ниндәй һүҙ булһа ла, минең ҡолаҡты урап үтмәй. Бер нисә йыл элек кенә ҡалабыҙҙың ике йөҙ илле йыллыҡ юбилейын байрам иткәйнек. Ашығып, шул сараға ҡарата яңы мәҙәниәт һарайы төҙөп бирергә вәғәҙә иттеләр. Төҙөлмәне. Мин уның сәбәптәренә туҡталып тормайым. Уйламай әйтелгән һүҙ - керешенән ысҡынған уҡ кеүек, тип әйтергә теләйем. Уны тотоп та, туҡтатып та булмай. Әле лә шулай булып ҡуймаһын, тип борсолам. Белорет ҡалаһында вәғәҙә ителеп тә, әлегәсә халыҡ күреп ҡыуанмаған аманат та йөҙ объекттың береһе булыр, тип ышанам. Белорет халҡы тыуған иленә бер ҡасан да рәхмәтһеҙ булмаған. Изгелеккә улар хеҙмәт менән яуап бирә белә.

**Мансур ҺИҘИӘТОВ,**
**пенсионер.**
**Белорет ҡалаһы.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛАЛАР...

## иғтибар үҙәгендә



**Өфөлә "Мегаполис. Бала саҡ территорияһы" Бөтөн Рәсәй форумына йомғаҡ яһалды. Форумда белгестәр етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлау мәсьәләләре буйынса ике көн фекер алышты. Сарала Волга буйы федераль округы субъекттарының бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәре, министрҙар, Новосибирск һәм Силәбе өлкәһенең опека һәм бағыусылыҡ мәсьәләренә яуаплы вәкилдәр, миллионлы ҡалаларҙың мәғариф һәм халыҡты социаль яҡлау департаменттары етәкселәре ҡатнашты.**

Форумда төрлө темалар ҡаралды. Төбәктәр социаль етемлекте булдырмау, ғаиләләрҙә балаларға ҡаныҡҙ мөнәсәбәт, етем балаларҙы, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалғандарҙы ғаиләләргә урынлаштырыу, был мәсьәләләргә дәүләттең генә түгел, төрлө ойошмаларҙың иғтибарын йәлеп итеү буйынса тәжрибә уртаҡлашты. Был йүнәлештә Өфөнөң миҫалы өлгө булырлыҡ, тип иҫәпләй Социаль етемлекте профилактикалау хәйриә фонды директоры Александра Марова. "Кыҫҡа ваҡыт эсендә баш ҡалала етем балалар һаны ике тапҡырға кәмене. Профилактик эштәр менән 428 вәкәләтле хеҙмәт шөғөлләнә. Баланы ғаиләлә ҡалдырыу йәһәтенән эшмәкәрлек яҡшы алып барыла. Яңы тыуған сабыйҙарҙан баш тартыусылар ҙа кәмене", - тип билдәләй Александра Марова.

Форумда ҡатнашыусылар фекеренсә, Өфөлә бала саҡты яҡлау өлкәһендәге ҙур уңыштар айырым орган - Опека һәм попечителлек буйынса идаралыҡ булдырылыуға, шулай уҡ ҡала хакимиәтенең көслө сәйәси ихтыярына бәйле. "Беҙҙә, Ижевскиҙа, бындай орган юҡ. Тап ошо Идаралыҡ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә опека һәм попечителлек системаһы үҫешкән, ҡала етәкселәре ғаилә сәйәсәтен өҫтөнлөклө һанай. Психологик хеҙмәт үҫешкән, улар ғаиләләр менән даими эшләй һәм шуға ла етемлекте иртә стадияһында туҡтата алалар, - ти Ижевскиҙың Устиновск районы хакимиәтенең ғаилә эштәре һәм бала саҡ хоҡуҡтарын һаҡлау буйынса бүлек етәксеһе Елена Ленцова. - Быйыл Удмуртияла дүрт балалар йортон ҡыҫҡартыуға өлгәштек, сөнки балалар ғаиләләргә китә, беҙ балаларҙың уллыҡҡа һәм ҡыҙ итеп алған ғаиләләр менән дә тығыҙ эшләйбеҙ, ни тиһәң дә, балалар йорттары тәрбиәләнеүселәренең төп өлөшө - ауыр сирле, психик тайпылыштары булған балалар".

Балалар йортонда балалар һаны кәмеү күренеше Дондағы Ростов ҡалаһында ла күҙәтелә. Әммә бындай динамика киләсәктә туҡтап ҡалыуы ихтимал, тип иҫәпләй форумда ҡатнашыусы Степан Аваков. 1160 етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың 33 проценты инвалидтар, шулай уҡ тәрбиәләнеүселәрҙең күпселеге үҫмер балалар. Был категорияға ҡараған балаларҙы ғаиләгә алырға тырышмайҙар. С. Аваков етәкләгән ойошма тап ошо балаларҙы ғаиләләргә ваҡытлыса - ялдарға, байрамдарға йөрөтә. "Ғаиләләр ҙә бындай бала тәрбиәләй алыу йәһәтенән үҙҙәренең мөмкинлектәрен барлай, балалар ҙа ысын ғаиләне эстән күрә ала. Был проектты һынап ҡараныҡ, хәҙер уның менән төрлө өлкәләр ҡыҙыҡһына, Өфө лә уларҙың иҫәбендә", - ти Степан Аваков.

**Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ҡала Советы ултырышында баш ҡала хакимиәте вазифаһына конкурс иғлан ителде. Уның һөҙөмтәләре 19 октябрҙә билдәле буласаҡ. Кандидаттарҙы Өфөнөң почетлы гражданы Рауил Бикбаев, ҡала Советы депутаты Филүс Ишбулатов, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының Торлаҡ сәйәсәте һәм инфраструктура үҫеше буйынса Комитет рәйесе Елена Родина һайлаясаҡ. Ошо кандидаттар араһынан депутаттар хакимиәт башлығын билдәләйәсәк.

✓Уҙған шәмбелә Өфөлә ойоштролған өмәгә 70 меңдән ашыу кеше сыҡты. Баш ҡала хакимиәте хәбәр итеүенсә, өмәлә ҡала торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәре, предприятие һәм ойошма хеҙмәткәрҙәре, әүҙем кешеләр, мәктәп уҡыусылары, студенттар ҡатнашҡан. Яҡынса 800 берәмек техника йәлеп ителгән. Урамдар, парктар, йорт яны биләмәләре сүптән таҙартылған, 200-ҙән ашыу ҡыуаҡлыҡ ултыртылған, 3700 кубометрҙан ашыу сүп сығарып түгелгән. Экологик айлыҡ 20 октябргә тиклем дауам итә.

✓"Өфө" аэропортынан Бангкокка, Камранға һәм Пхукетҡа тура рейстар асыла. Аэропорттың матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 3 ноябрҙән 12 көн һайын Бангкокка осорға мөмкин. Самолет Өфөнән киске 10 тула 10 минутта осып, иртәнге 8 тула 10 минутҡа барып етә. Шул уҡ көндө Вьетнамға рейс көтөлә, ул төнгө 1-ҙә оса. Маршрутты 12-13 көн һайын ойошторорыу күҙаллана. 2 ноябрҙән Пхукетҡа осорға мөмкин, ул баш ҡаланан киске 10 тула 10 минутта.

✓Баш ҡалала иҡтисади әүҙем халыҡ һаны 593 мең самаһы кеше тәшкил итә. Шулай уҡ Өфөлә бөгөн 12,5 меңдән ашыу вакансия һәм 6,5 мең эшһеҙ иҫәпләнә. Көсөргәнешлек коэффициенты, йәғни эшһеҙҙәрҙең буш вакансиялар һанына нисбәте - 0,59 процентҡа тиң. "Рәсми" эшһеҙлек кимәле 1,09 процент тәшкил итә, тип хәбәр итә Өфөнөң Халыҡ мәшғүлеге үҙәге.

✓Ф. Шаляпин исемендәге I Халыҡ-ара вокалсылар конкурсының тамашасылар һөйөүе призы Өфөлә ҡалды. Уға конкурстың иң йәш ҡатнашыусыһы, Өфө сәнғәт училищеһын тамамлаған Айгөл Әхмәтшина лайыҡ булды. Айгөл шулай уҡ "Өмөт" призын яуланы. Конкурстың Гран-прийы бер кемгә лә бирелмәне. Киләһе бәйге ике йылдан уҙасаҡ.

*✓ Был архитектура ҡомартҡыһын төҙөү өсөн 808 мең аҡса йыйыла ул ваҡыттағы иҫәп буйынса, шуның 806 меңен башҡорттар, ҡалғанын мишәрҙәр һәм бер ҡаҙаҡ ханы бирә. Һандар үҙҙәре үк кемдәр күп көс түккәнен әйтеп тора.*



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Беҙ ул ваҡытта студенттар инек. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары. Башҡорт улдары Ырымбурға барып, Каруанһарайҙы кире милләтенә ҡайтарып биреү маҡсатынан митингтар ойоштороп йөрөнө. Бәлки, ныҡышмалылыҡ етмәгәндер, бәлки, талаптарҙы ишетергә теләгәндәр табылмағандыр, әммә 1837 - 1846 йылдарҙа Ырымбурҙың хәрби губернаторы В. Перовскийҙың ҡарары менән башҡорттар һәм мишәрҙәр өсөн белем алыу, туҡталыу урыны өсөн милли йорт булараҡ һалынған Каруанһарай, ситтә ҡалды. Ырымбурға барһаҡ, Каруанһарайҙы күреп эс бошоп ҡайтып китә торғайныҡ. Был юлы беҙҙе ул асыҡ сырай менән ҡаршыланы. Яңыраҡ Ырымбур ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуға - 100, Каруанһарай төҙөлөүгә 170 йыл тулыу уңайынан Башҡортостан Хөкүмәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Ырымбур өлкәһе хакимиәте тарафынан ойошторолған сарала йәнә лә халҡыбыҙ күңелендә милли тойғо, ҡуҙ аҫтындағы көл һымаҡ, дөрләп тоҡанырға ғына әҙер тороуын тойоп ҡайттыҡ.**

# МИЛЛӘТЕБЕҘ ҠОТО - КАРУАНҺАРАЙ

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов "Каруанһарай" тарихи-архитектура комплексы бинаһында "Каруанһарай" - Башҡортостан дәүләтселегенең бишеге" темаһына арналған түңәрәк өҫтәлде асып, тотош Башҡортостан халҡын олуғ байрам менән тәбрикләне. "Белеүегеҙсә, Рәсәй Президенты В. Путин "Башҡортостандың 100 йыллығын байрам итеү тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы бына бөгөн беҙ, тап Башҡорт автономияһы ойошторолған төбәктә, Ырымбур ерендә ошо тантаналарҙы башлайбыҙ, тиһәк тә була. Беҙҙең Башҡортостаныбыҙ РСФСР составында тәүгеләрҙән булып ойошторолған автономиялы республика ғына түгел, ә килешеү нигеҙендә төҙөлгән берҙән-бер субъект", - тине ул. Байрам тантанаһында Башҡортостан Хөкүмәте Аппараты социаль сәйәсәт департаментының мәҙәниәт һәм архив эштәре мөдире Илһам Фәтҡуллин, Ырымбур өлкәһе Губернаторы һәм Хөкүмәтенең эске сәйәсәт аппараты идаралығының консультанты Фәрит Абдразаҡов ҡатнашты.

Сарала тарихсыларҙың ҡатнашыуы тарихи ысынбарлыҡты яңынан күҙ алдына баҫтырырға ла ярҙам итте. Ғалим Марат Ҡолшәриповтың сығышы һәр кемдә ҡыҙыҡһыныу уятты. "Башҡортостан автономияһы 1919 йылдың 23 мартында түгел, ә 1917 йылдың ноябрендә үк иғлан ителгән була. Шул уҡ йылдың июлендә тап ошо йортта тәүге Башҡорт ҡоролтайы уҙғарыла. Делегаттар кантондарҙа тауыш биреү юлы менән һайланыла. Был да ҡоролтайҙың законлы йыйын ойоштороуы тураһында һөйләй. Ул съездарҙа иң тәүҙә территориаль автономия хаҡында һүҙ алып барыла. Петроград та Башҡорт автономияһы иғлан ителеүгә тыныс ҡарай, сөнки ул совет власының 1917 йылдың 2 ноябрендә ҡабул ителгән "Рәсәй халыҡтары хоҡуҡтары декларацияһы"на ҡаршы килмәй. Республика көнө тип иғлан ителгән датаға ҡарата түбәндәге факттарҙы әтйеп китеү мөһим. "Үҙәк Совет власы менән Башкирияның Совет автономияһы араһында килешеү"гә 1919 йылдың 20 мартында ҡул ҡуйыла. "Килешеү" тексы 23 мартта "Известия ВЦИК" гәзитендә баҫылып сыҡҡан".

Китап палатаһы директоры, тарихсы Азат Ярмуллин "Каруанһарай"ға бәйле ваҡиғалар бәйәнен дауам итеп, түбәндәгеләрҙе өҫтәне: "16 ноябрь көнө Каруанһарайҙы Башҡорт мәркәз шураһы үҙ ҡулына ала һәм бинаны һаҡлауҙы Мосолман полкына ҡуша. Шул уҡ көндө Ырымбурҙың распределительный комитетына хәбәр итә: "С 16 ноября Башкирский Областной Совет с согласия губернского комиссара, вступил в фактическое владение Караван-Сараем и охрану его поручил Мусульманскому военному комитету. Поэтому Совет просит Губернское присутствие Караван-Сарай исключить из списка казенных имуществ и считать собственностью башкир". Шулай итеп, көтмәгәндә башҡорт халҡы ике изге маҡсатына ирешә: Башҡортостан тупраҡлы мөхтәриәте иғлан ителә һәм Каруанһарай башҡорттар ҡулына күсә. Милли хәрәкәттең уртаһында ҡайнап йөрөгән мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич бөтөн хистәрен һалып ошо ике ҡыуанысл ваҡиғаға бағышлап "Олуғ шатлыҡ" исемле шиғырын яҙа. 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайы 1917 йылдың декабрендә Каруанһарай бинаһында тантаналы рәүештә үтә. Бында Башҡорт мәркәз шураһы тарафынан иғлан ителгән Башҡортостан мөхтәриәте раҫлана, беренсе милли хөкүмәт ойошторола. Шулай итеп, Каруанһарайҙа Башҡортостан дәүләтселеге тыуа. Бина Башҡортостан хөкүмәтенең резиденцияһына әүерелә. Әммә башҡорт халҡының Бабич яҙғанса "Олуғ шатлыҡ" дәүере бик ҡыҫҡа була. Шағир уйлағанса милли мөхтәриәт яулау эше еңел генә булмай, үкенескә ҡаршы. 1918 йылдың ғинуарында Ырымбур ҡалаһы большевиктар ҡулына күсә... Шулай ҙа заманалар үҙгәрә тора, бына бөгөн беҙ Башҡортостан Хөкүмәте менән берлектә данлыҡлы Каруанһарайҙа уның 170 йыллығын билдәләйбеҙ".

Ырымбурҙың тыуған яҡ тарихын өйрәнеүселәр Фәнил Ишбулатов та, Фәрит Нәҙершин да ҡаланың барлыҡҡа килеүе, Каруанһарайҙың башҡорттар тормошонда тотҡан урынын билдәләне. Түңәрәк өҫтәлде алып барыусы, сығышы менән Ырымбур егете Нурислам Ҡалмантаев та ҡыйыу фекерҙәре менән ҡыуандырҙы: "Был архитектура ҡомартҡыһын төҙөү өсөн 808 мең аҡса йыйыла ул ваҡыттағы иҫәп буйынса, шуның 806 меңен башҡорттар, ҡалғанын мишәрҙәр һәм бер ҡаҙаҡ ханы бирә. Һандар үҙҙәре үк кемдәр күп көс түккәнен әйтеп тора. Етмәһә, ҡом, таш ташып, төҙөлөштә ҡатнашып, һуңғы малын һуйып, шуның менән ризыҡ алып килеп һәм башҡа төрлө ярҙам итеүселәр ҙә күп булған. Ғөмүмән, Каруанһарай төҙөү хаҡында указ сығыу менән башҡорттар был эшкә бик ихлас тотона, сөнки беләләр, В. Перовский был эште уларға булған хөрмәт йөҙөнән башҡара. Шуға күрә Өфөнөң берәй паркына, аллеяһына уның исемен биргәндә, һис насар булмаҫ ине".

Бөгөн "Каруанһарай"ҙа башҡорт йәмәғәтселегенең эшен ойоштороусылар - урындағы "Каруанһарай" мосолман дини ойошмаһы етәксеһе Гөлимә Сәлихйән ҡыҙы Жангабилова һәм "Каруанһарай" мәсете имам-хатибы Хөрмәтулла хәҙрәт Буранбаев. Гөлимә Сәлихйән ҡыҙы үҙ сығышында иң тәү сиратта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовҡа, Башҡортостан Хөкүмәтенә "Каруанһарай"ҙа реконструкция уҙғарыу өсөн 10 миллион аҡса бүлгәндәре өсөн олуғ рәхмәтен еткерҙе: "Бинаның бер ерен дә үҙгәртмәнек, ул төҙөлгән дәүерендә нисек булған, шул килеш тергеҙелде. Архивтарҙа ултырып, беҙ Каруанһарайҙың архитектура проектын эшләнек. Бына ошо тарихи документты һеҙҙең ҡулға бирәбеҙ. Башҡорттар йәшәгән телә һә ҡайһы ерҙә кем теләй, әйҙә, шунда тергеҙһен яңынан Каруанһарайҙы! - тине ул, Әмир Ишемғоловҡа тарихи документты тапшырып. Күҙгә йәштәр эркелде, Каруанһарай Башҡортостанға ҡайта! Ә Каруанһарайҙы реконструкциялауҙа ҙур ярҙам күрһәткән "Нефтегазсервис" йәмғиәте директоры Әнүәр Бикмырҙинға Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Рәхмәт хаты тапшырылды.

Ошонда уҡ түңәрәк өҫтәлдең резолюцияһы ҡабул ителде. Уға ярашлы, яҡын киләсәктә Каруанһарай тарихи-архитектура комплексында башҡорт ойошмаларына, китапханаһына урын бүлеү, ошо төбәктә тыуған шәхестәрҙең исемен мәңгеләштереү һәм башҡа милли проекттар хаҡында әйтелә.

**Лариса АБДУЛЛИНА.**



## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Үлән сәйе

❖ Көҙ етте, миҙгел алышынғанда ауырыуҙар ҙа барлыҡҡа килә. Ошо мәлдә ҡурай еләге япрағынан сәй яһап эсегеҙ, һалҡындан һаҡлай.

❖ Алма сәскәһе сәйе тын юлдарын йомшарта, тын алыуҙы еңеләйтә.

### Арыған саҡта

❖ Көҙ эштең күп сағы - ҡышҡа әҙерләнеп, кешеләр көнө буйы аяҡ өҫтө йөрөй. Ошо арыған саҡта тубыҡҡа тиклем эҫе ванна алығыҙ. Тик бындай ванна һеҙгә яраймы, юҡмы икәнен белегеҙ тәүҙә, табип менән кәңәшләшегеҙ. Ванна ярамаһа, аяҡтарҙы 20 минутҡа өҫкә күтәреп ултырығыҙ.

❖ 2 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ йөҙөм һуты эсеү ҙә файҙалы.

❖ Аҡыл эшендә арығандарға сельдь балығын ашау - ҙур дауа.

❖ Дөйөм алғанда, арыған-талсыҡҡан саҡта еләк-емеш, бешерелмәгән йәшелсә, һөт, эремсек, йомортҡаның һарыһын ашау көс бирә.

### Аяҡтар арыһа...

❖ Һары мәтрүшкә, юл япрағы, дегәнәкте ҙур тасҡа һалып, артыҡ ҡайнар булмаған һыу ҡойорға, ярты көн тирәһе төнәтергә. Кисен ҡайнар һыу өҫтәп, аяҡтарҙы 20-30 минут тығып ултырырға.

### Үҙәк көйгәндә

❖ Ҡайһы берәүҙәрҙең төрлө емеш, йәшелсә ашаһа, үҙәге көйә. Ул саҡта бармаҡ битенә әләктереп тоҙ йотоу ҙа файҙалы. Ашағандан һуң бер семтем тоҙ йотоп йәки бәләкәй генә киҫәк тоҙло сельдь балығы ашап ҡуйыу ҙа ярай. Шулай уҡ 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ алма һеркәһе ҡушып эсергә була.

### Катаракта

❖ 1 балғалаҡ балға 1 стакан һалҡын һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, ҡайнау хәленә еткерергә, һыуытырға һәм көнөнә 2 тапҡыр 10 минутҡа күҙ ҡабаҡтарына сылатҡыс һалырға.

### Һимеҙлек

❖ Көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яңы ғына һығылған 1 балғалаҡ алоэ һутын эсһәң, һимереүҙән ҡотолоп була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Башҡорт халыҡ медицинаһында тәбиғәт-климат факторҙары менән дауалау борондан билдәле. Тәбиғәт ҡосағында булыу үҙе генә лә ифрат файҙалы. Йәйләүгә сығыу бөтә халыҡ өсөн - йәшенә лә, ҡартына ла ысын байрам булған. Билдәле булыуынса, Башҡортостан шифалы дауалау урындарына бай, хәҙер уларҙың һаны 50-гә яҡын. Шуныһы ҡыҙыҡ: шифалы ерҙең байтағы - Асҡын, Ассы минераль һыуҙары, Асылыгүл, Мулдаҡ күле, данлыҡлы Янғантау һ.б. фәнни медицина уларҙы өйрәнгәнгә тиклем үк халыҡ тарафынан үҙенсә (эмпирик рәүештә) өйрәнелгән һәм дауаланыу маҡсатында файҙаланылып килгән.

Быларҙан тыш, башҡорт халҡында түбәндәге көнкүреш физиотерапияһы ла билдәле. Үҫемлек, минераль матдәләр, хайуандарҙан алынған дауалар ҡушып төрлө дауаланыу саралары - йылытыу һәм ыуыныу процедуралары ҡулланылған, улар ярҙамында һөйәк-быуын шешеүен, мускулдарҙың һыҙлап тартышыуын, тын алыу юлдары ауырыуҙарын һ.б. дауалағандар. Көнкүреш физиотерапия ярҙамында ауыртыу-һыҙланыуҙы баҫырға, сирҙе зарарһыҙландырырға, ҡан ойоуын таратырға, быуындар ҡатыуын бөтөрөргә, ҡан йөрөшөн шәбәйтергә мөмкин, тип уйлағандар. Дауалауҙың төп сығанағы итеп йылытыуҙы иҫәпләгәндәр. Әйткәндәй, хәерге заман фәнни медицинаһы ла физиотерапияның күп төрҙәрендә төп дауа көсөн йылытыуҙа күрә. Халыҡ физиотерапияһында ҡулланылған үлән-япраҡтың шифаһы ла тейгән.

Көнкүреш физиотерапияһын үткәргәндә тирләү үҙенсәлекле барометр ролен уйнаған, сөнки тир менән ауырыу сыға, тип уйлағандар. Дауалау процедураһының дауамлылығы кешенең сыҙамлылығына бәйләнгән. Тирләп, тәне ҡыҙған кеше һыуыҡ тейеүгә бирешеүсән була. Шуға күрә бындай дауа йәйге йылы миҙгелдә үткәрелгән. Кеше бер нисә көн йылы кейенеп йөрөргә тейеш булған. Был тәртип иғтибарға лайыҡ. Бәлки, нәҡ ошо кәңәште тотмау арҡаһында йылытыу процедураларына нигеҙләнгән санаторий-курорт дауалауы (йылы ванна, шифалы батҡаҡ) ҡайһы ваҡыт уңышһыҙ булып сыға.

Тимерәү, ҡысынма, тәндең эренләп шешеүенән, бәшмәк ауырыуҙарынан арыныу өсөн тоҙло күлдәрҙә һыу ингәндәр. Ошо күлдәрҙең шифалы ләмен тәнгә һылап, аяҡ-ҡул, бил һыҙлауын, шешенеүҙе дауалағандар.

Башҡортостандағы шифалы күлдәрҙән Әбйәлил районындағы Мулдаҡ күле айырыуса дан тотҡан. Уны хәҙер Тоҙло күл тип йөрөтәләр. Янғантау итәгенән сыҡҡан йылы һауа һәм быу менән тирәяҡ ауылдарҙағы халыҡ борондан аяҡ-ҡул, быуындар, мускулдар һыҙлауын дауалаған. Бының өсөн тау итәгендә кеше оҙонлоғонда соҡор ҡаҙып, шунда бөркәнеп ятып йылынғандар. Ҡайһы берәүҙәр ошо соҡор өҫтөнә башын кәҫ менән ябып, ҡыуыш та яһаған.

Ғәҙәттә, майҙың икенсе яртыһында һәм июнь айында йылы, ҡояшлы көндәрҙә йылға һәм күл буйҙарында үҙенсәлекле физиотерапия үткәрелгән. Кеше ятҡан килеш һыйырлыҡ итеп соҡор ҡаҙып, унда усаҡ яҡҡандар. Янып бөткәс, күмер, көл һыпырып алынған һәм соҡор эсенә төрлө хуш еҫле үлән түшәгәндәр, шифаны арттырыу өсөн уҫаҡ япрағын йәки мәтрүшкә, кейәү үләнен, артыш ылыҫын өҫтәгәндәр. Ошо йыйылған үҫемлек дауаһына кеше башын ғына асыҡ ҡалдырып, күмелеп ятҡан. Ошолай йылынып, тирләп, кеше түҙә алғансы ятҡан. Был процедуранан һуң сирле йылы итеп кейенгән һәм сәй эсеп, ял иткән. Быға оҡшаш физиотерапияны өй шарттарында үткәреүселәр булған. Төрлө үлән-япраҡтар йыйып, ҡайнар һыуҙа бешекләгәндәр йәки ҡапсыҡҡа тығыҙ итеп тултырып, улар ҡыҙғансы тотҡандар. Ошолай йылытылған үҫемлек дауаһына күмелеп ятҡандар. Бындай дауалауҙы мунсала ла үткәргәндәр.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# БАРЫҺЫ ЛА ҠУЛДАН КИЛӘ!



**Берәй атҡарып сыға алмаҫлыҡ ауыр эш алдында баҙап ҡалғанда һәр ваҡыт "Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй" тигән башҡорт халыҡ мәҡәле иҫкә төшә. Ысынлап та, бары тик йөръәт итеп башлап ебәреү генә шарт, барыһы ла башҡорт йәштәренең ҡулынан килә икән. Һуңғы бер нисә ай эсендә генә беҙҙең йәштәр Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлендә үткәрелгән сараларҙа лайыҡлы сығыш яһап, алдынғы ҡарашлы, маҡсатлы булыуҙарын, заман менән бергә атлауҙарын иҫбатланы. Шундай йәштәребеҙҙең береһе, Башҡорт асыҡ КВН лигаһының йыйылма командаһы капитаны Марсель МӨХӘМӘТЙӘНОВ менән Ҡаҙағстандың баш ҡалаһында үткән Аким кубогы өсөн бәйгелә яулаған еңеүҙәре тураһында әңгәмәләштек.**

**➔ Быға тиклем ҡаҙаҡ уйынсылары үҙҙәре лә беҙҙә булып ҡайтҡайны. Ә һеҙ был бәйгегә саҡырылып барҙығыҙмы?**

- Эйе, быға тиклем Башҡорт асыҡ КВН лигаһының Йәйге кубогы уйындарына Ҡаҙағстандың Жайдарман КВН лигаһының етәксеһе Есен Елеукен бер төркөм уйынсылар менән беҙгә килеп ҡайтҡайны. Был юлы улар беҙҙе үҙҙәренә Аким кубогы өсөн ойошторолған фестивалгә саҡырҙылар. Башҡорт асыҡ КВН лигаһы биш йыл эшләй һәм яйлап фекерҙәш, бер йүнәлештә эшләгән башҡа ойошмалар менән бәйләнештәрҙе нығыта башланы. Ҡаҙағстандың баш ҡалаһында үткәрелгән шаяндар һәм тапҡырҙар уйынында ла ошо маҡсатта ҡатнаштыҡ. Ойошманың рәйесе Урал Кәримов, элекке "Страйк" командаһы уйынсыһы Радик Ғиззәтов, тауыш операторы Ринат Ниғмәтуллин һәм уйынсылар Фидан Ҡолмөхәмәтов, Азамат Мөхәмәтйәнов, Иҙел Баймырҙин, Айҙар Йәнбухтин, Азат Низаметдинов һәм мин делегация составын тәшкил иттек. Беҙгә был сәйәхәткә сығырға ярҙам иткән БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына оло рәхмәтлебеҙ.

**➔ Һеҙ унда ҡаҙаҡ телендә сығыш яһағанһығыҙ икән...**

- Бәйгенең шарты шулай ине. Ҡаҙаҡ телендә сығыш яһарға кәрәк булғас, Астанаға барып төшкәс тә ундағы мөхәррирҙәр менән күрешеп, тексыбыҙҙы тәржемә итеп алдыҡ һәм ятланыҡ. Ҡаҙаҡсаның ҡайһы бер һүҙҙәре башҡортсаға оҡшаш яңғыраһа ла, саҡ ҡына икенсе төрләрәк әйтелә, шуға баш һүҙҙәрҙе телде ватаемерә ҡабатланыҡ. Егеттәр эшенә етди ҡараны һәм беҙҙе тамашасы бик йылы ҡабул итте, фестивалдең махсус призын яуланыҡ. Ғөмүмән, беҙ үҙебеҙҙең сығышыбыҙҙа ҡаҙаҡ халҡы, уларҙың иле, тарихы тураһында мәғлүмәтле булыуыбыҙҙы күрһәтеүҙе һәм үҙебеҙҙең башҡорт халҡының да үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ.

**➔ Ҡаҙаҡ йәштәренең КВН уйындарындағы матур данын Масляков программаһы буйынса ла беләбеҙ. Улар менән аралашыу барыбер ҡыҙыҡ булғандыр?**

- Эйе, Астанаға сәйәхәт сит тамашасы алдында сығыш яһау йәһәтенән генә түгел, КВН лигаһының эшен ойоштороу тәжрибәһе буйынса ла файҙалы булды. Жайдарман лигаһы Ҡаҙағстанда бик популяр, йыл да 250-ләп ғариза ҡабул ителә, командалар төп уйынға эләккәнгә тиклем өлкәләр кимәлендә үткәрелгән ярыштарҙа еңеү яуларға тейеш. Ҡаҙаҡ йәштәре туған телен яҡшы белә, ҡайһылары хатта рус телендә бөтөнләй һөйләшмәй. Жайдарман лигаһының бөтә уйындары ла илдең үҙәк каналында күрһәтелә. Шуға һәр уйынсыны бындағы халыҡ белә, улар популяр, уйын абруйлы. "YouTube" каналында Жайдарман уйынсыларының ябай телефонға төшөрөлгән сифатһыҙ видеоларын 70-80 мең кеше ҡарай, сифатлылары миллиондар иғтибарын йыя. Сағыштырыу өсөн: беҙҙең йәштәр араһында популярлыҡ яулаған йырсы RNT - Ринат Ниғмәтуллиндың сифатлы, матур клибын 16 мең кеше ҡараған.

**➔ Беҙҙең йәштәрҙең КВН уйындарына бик үк етди ҡарамауы күҙәтелә барыбер, шулай түгелме?**

- Башҡорт асыҡ КВН лигаһының төп талабы - сифатҡа ынтылыу. Ләкин ойоштороусыларға ғариза биргән 10-15 команда араһынан иң көслөһөн һайлап алыуы ҡыйын. Бынан тыш, командалар бер-ике сезон уйнай ҙа, еңелһәләр, китә лә баралар. Беҙгә тырыш, үҙ фекерен юмор призмаһы аша еткерә алған, киләсәккә битараф булмаған йәштәр бик кәрәк. КВН уйнарға килгәнһең икән, тамашасы алдында буш һүҙ һөйләп тора алмайһың, һин уны үҙеңдең артыңдан алып барырға тейеш. Ә күптәр "Әһә, теге команда шул темаға шаяртҡас, былар көлдө, мин дә шулай итәйем", - тип уйлай. Беҙҙең командалар халыҡҡа яҡын юмор йәһәтенән эшләй, ә бына актуаль темалар буйынса шаяртыуҙар һирәк. Был тәжрибәһеҙлектән килә.

Башҡорт асыҡ КВН лигаһының географияһын киңәйтергә лә теләк бар, былтыр Мәскәү ҡалаһынан бер команда ҡатнашҡайны, быйыл Санкт-Петербургтан йәштәр ғариза биргән, бәлки, Силәбе өлкәһенән дә башҡорт йәштәре ҡушылыр. Республикала шаян һәм тапҡыр егеттәр-ҡыҙҙар күп, тик әүҙемлек етешмәй.

**➔ Әүҙемлек мәктәп уҡыусылары араһында юғарыраҡ түгелме?**

- Ысынлап та, Башҡорт ЮНИОР лигаһында уҡыусы балалар әүҙемерәк ҡатнаша, унда ғариза биреүселәр ҙә күп. Уҡыусылар мөхәррирҙәр менән сценарий буйынса даими рәүештә кәңәшләшеп тора, бер иш костюмдар тектерә. Өфөнән алыҫ ҡала-районларҙа йәшәгән шаян балаларҙың хәүефһеҙлеген хәстәрләп, Стәрлетамаҡ, Дыуан, Мәсәғүт, Күмертауҙа төбәк ярыштары ойоштorабыҙ. Даими рәүештә үткәрелгән "КВН мәктәбе"ндә балаларға сәхнә оҫталығы, төрлө темаларға көләмәстәр уйлап табырға өйрәтәбеҙ. Башҡорт ЮНИОР лигаһы үткәргән саралар балаларға бәләкәйҙән башҡорт телен яҡшы белеүҙең әһәмиәтен тойоп үҫергә булышлыҡ итә. Юмор аша туған телебеҙҙе лә һаҡлайбыҙ, уны ҡулланыу даирәһен арттырабыҙ. Киләсәктә ЮНИОР лиганан Башҡорт асыҡ КВН лигаһына КВН-дың асылын аңлаған, яуаплы, дисциплиналы, тамашасы өсөн ҡыҙыҡлы булған йәштәр килер, тип өмөт итәм.

**➔ Башҡорт асыҡ КВН лигаһында уйнаған һәр уйынсы был бейеклекте яулағас, артабан нимә эшләргә белмәй юғалып ҡала һымаҡ. Ә ниңә Масляковтың КВН-ына ынтылмаҫҡа беҙгә?**

- Әлбиттә, Рәсәйҙәге иң билдәле был уйынға ла юл ярыу хыялы бар беҙҙә. Унда төрлө милләттәрҙең йыйылма командалары үҙҙәрен күрһәтеп өлгөрҙө, беҙгә лә үҙенсәлекле милли колоритыбыҙҙы сағылдырған йыйылма команда төҙөргә кәрәк. Быйыл Мәскәүҙәге һигеҙ йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашҡан "Стендап" фестивалендә Фидан Ҡолмөхәмәтов менән сығыш яһап ҡайттыҡ. Сығышыбыҙ өс көн дауамында барған сараның һуңғы көнөнә тура килде, "ТНТ" каналында эшләгән, юмористик ток-шоуҙарҙы алып барыусы билдәле кешеләр жюри ағзалары ине. Һайлап алыу турын үтмәһәк тә, төрлө кешеләр менән танышып, аралашып, башҡаларҙың сығыштарын тыңлап, яңғыҙ сығыш яһауҙың нескәлектәренә төшөнөп, тәжрибә тупланыҡ. Был тәжрибәнең "Хәйерле Стендап-кис" сараһын ойоштороуға файҙаһы тейҙе. "Ятып ҡалғансы, һатып ҡал" тигән ток-шоу эшләп, уны БСТ каналынан күрһәттек. Артабан да шундай юмористик тапшырыуҙар, төрлө конкурстар, саралар ойоштороорға дәртебеҙ бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Милләтең өсөн янып-көйөүеңде, халҡыңды ҡайғыртыуыңды, туған телеңә һәм илеңә ҡарата һөйөүеңде үҙең маһир булған эште оҫта башҡарып, әүҙем эшмәкәрлегең менән дәлилләргә кәрәк. Был йәһәттән эштәре менән үрнәк булыр йәштәребеҙ бар. Артабан да улар менән таныштырыуҙы дауам итербеҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

✓ Ҡаҙанды алған саҡта башҡорттарҙың хәрби булдыҡлылығын күргән батша килешеү буйынса уларға Рәсәйҙең көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш сиктәрен нуғай һәм Себер татарҙары һөжүменән ҡурсалау бурысын йөкмәтә.



ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**2004 йылда баш ҡалабыҙ Өфөнөң 430 йыллығы билдәләнеп, байрам тантаналары ойошторолғайны. Эйе, 1574 йылда Иван Грозный әмеренә буйһоноп, Мәскәү баяры Иван Нагой командалығы аҫтында бында килгән батша стрелецтары Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалғанын бер кем дә инҡар итергә йыйынмай. Әммә борон-борондан тап ошо урынды яҡын-тирәлә йәшәгән ҡәүемдәр төйәк иткән, уларҙың торлаҡ, оҫтахана, нығытма урындары әле лә табыла тора. Боронғо риүәйәттәр ҙә, тарихи документтар ҙа ошоға дәлилдер. Академик, тарих фәндәре докторы, билдәле археолог Нияз Мәжитов етәкселегендә асылған "Өфө-2" ҡаласығында табылған ҡомартҡылар ҙа ошо хаҡта һөйләй. Эҙәрмән-тикшеренеүсе Радик ВӘХИТОВтың "Сәмрегош ҡанаты аҫтына" исемле китабында бәйән ителгән, ошо мәсьәләгә арналған аналитик мәғлүмәттәр уҡыусыларыбыҙҙа ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлайбыҙ.**

# ӨФӨНӨҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ -

## миф һәм ысынбарлыҡ



Боронғо ҡаласыҡ ҡалдыҡтары картаға төшөрөлмәй, ә Өфө ҡалаһы 1367, 1377, 1554 йылғы Европа карталарында бар. Өфө ҡалаһын нигеҙләүҙең урыҫ версияһын хөрмәтле тарихсыбыҙҙың ошо ҡулайһыҙ алымы ла ҡотҡара алмай.

Ә башҡорттарҙың ҡала төҙөүгә ҡарата позицияһы тураһында бына нимә әйтергә була. Башҡортостандың Мәскәү дәүләтенә ҡушылып, Рәсәй барлыҡҡа килеүенә ҡарамаҫтан, нуғай һәм себер хандары, башҡорттарҙы үҙҙәренә яһаҡ түләүселәр итеп ҡарап, уларҙы талау маҡсатында яу сабыуҙарын туҡтатмай. Шул сәбәпле беҙҙең тарих фәнендә башҡорттарҙың үҙҙәрен күршеләренән ҡурсалар өсөн урыҫ хөкүмәтенә бында хәрби гарнизонлы ҡәлғәләр төҙөүҙе һорап мөрәжәғәт итеүе тураһында тағы ла бер миф барлыҡҡа килгән. Был ҡараш "оло ағай"ҙың "бәләкәй ҡусты"лар, йәғни урыҫ халҡының бәләкәй халыҡтар өсөн ҡотҡарыусы ролен уйнауы тураһында фекер йөрөтөүгә тап килә. Шуға өҫтәп, был миф башҡорт халҡының күскенселек концепцияһына ярашлы булып, Мәскәү дәүләтенә ҡушылғанға тиклем башҡорттарҙың үҙ ҡала һәм ауылдары булмаған, тигән фекергә ҡулай килеп тора.

Әлбиттә, Өфө ҡалаһының урыҫ стрелецтары тарафынан башҡорттарҙың һорауы буйынса төҙөлөүе тураһындағы тезисты бер Ә. Усманов ҡына яҡламаған.

Билдәле археолог В. Иванов: "...1573 йылда башҡорттар батша Иван Грозныйға үҙ ерҙәрендә ҡала төҙөүҙе һорап мөрәжәғәт итте", тип яҙа. Һәм артабан былай тип өҫтәй: "Башҡорттарҙың теләгенә яуап итеп, батша 1560 йылда дворян Иван Артемьевты Башҡортостанға яңы ҡала өсөн урын ҡарап табырға ебәрә".

Беҙ тағы ла тоҡто тишеп килеп сыҡты түгелме? В. Иванов фекеренсә, батша Иван Артемьевты башҡорттарҙың һорауын үтәргә 1560 йылда ебәрһә, ошо ниәт тик 13 йылдан һуң, 1573 йылда ғына теркәлә!

XVI быуаттың 50-се йылдары аҙағында башҡорттарҙың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуы һөҙөмтәһендә яңы дәүләт - Рәсәй барлыҡҡа килә. Тәбиғи һәм айыҡ фекергә ярашлы, Рәсәй батшаһының тәүге аҙымдары урындарҙа дәүләт органдарын булдырыу, унда үҙе тәғәйенләгән кешеләрҙе ебәреү һәм яһаҡ йыйыуҙы ойоштороу менән бәйле була. Алтын Урҙала ла шулай була, һәм Иван Грозный ҙа шуға ынтыла. Тап шул сәбәпле ул дворян Иван Артемьев алдында "острог", "сторожка", йәғни нығытылған һәм һаҡлаулы административ үҙәк төҙөү урынын билдәләү маҡсатын ҡуя ла инде.

Батша Иван Васильевич башҡорттарҙың болаһыҙ һәм тыныс тормошон һаҡлау өсөн уларҙы үҙ ҡарамағына алмаған. Ҡаҙанды алған саҡта башҡорттарҙың хәрби булдыҡлылығын күргән батша килешеү буйынса уларға Рәсәйҙең көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш сиктәрен нуғай һәм Себер татарҙары һөжүменән ҡурсалау бурысын йөкмәтә. Ливон ордены һәм Польша менән туҡтауһыҙ һуғыш алып барған Рәсәй батшаһының көнбайышта хәл ителмәгән проблемалары ла етерлек була.

Башҡорттарҙы ҡурсалау маҡсатында урыҫ стрелецтарының Өфө ҡалаһын төҙөүе тураһында матур әкиәт һөйләүсе тарихсыларыбыҙ Өфө ҡәлғәһе һәм уның гарнизоны Каманан Тобол һәм Иртышҡа тиклемге киң территорияла йәшәгән башҡорттарҙы нисек итеп яҡлай һәм һаҡлай алыуын иҫбатлап ҡарарға ла баҙнат итә алманы.

Был ҡарашты артабанғы тарих ағышы бөтөнләйгә юҡҡа сығарҙы. Өфө ҡалаһында ҡәлғә төҙөлдө, гарнизон булдырылды, әммә Себер һәм нуғай хандары баҫҡынсыларының, һуңға табан ҡалмыҡ һәм ҡаҙаҡтарҙың башҡорттарға һөжүм итеп тороуына ҡарамаҫтан, урыҫ гарнизоны Башҡортостан тарихында бер генә тапҡыр булһа ла ерле халыҡты яҡлап сыҡманы.

Башҡорттарға ҡәлғә тик бер нәмә - ошондағы дәүләт органдарына туранан-тура яһаҡ түләү өсөн кәрәк ине, сөнки уларҙың яһаҡ йыйыусылары үҙҙәренең вазифаһын һәр саҡта ла халыҡты алдау өсөн файҙаланған.

Яһаҡ түләү өсөн Ҡаҙан алыҫ һәм уңайһыҙ була. Тарҡаулыҡ осоронда яһаҡты башҡорттар үҙҙәре йыйып, Ҡаҙанға алып барырға, ылауҙарҙы һаҡларға, дәүләт ҡаҙнаһына тапшырырға тейеш була. Был улар өсөн бик тә уңайһыҙ булып, төрлө буталсылыҡтарға һәм боҙоҡлоҡтарға килтерә.

Башҡорттар яңы дәүләт алдындағы бурыстарын намыҫ менән үтәргә тырыша, яһаҡ түләгәнлектәре тураһындағы документтарын һаҡлап тота, сөнки был уларға батша хөкүмәтенән килешеү шарттарын үтәүҙе, иң мөһиме, аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлауҙы талап итергә мөмкинлек бирә. Тик шуның арҡаһында ғына улар үҙ ерҙәренең бер өлөшөн ҡәлғә төҙөү һәм уның эргәһендә дәүләт хеҙмәтен башҡарыусыларҙы урынлаштырыу өсөн бирергә риза була.

Өфө ҡалаһындағы ҡәлғә батша хөкүмәтенә кәрәк була. Үҙ тарихының башынан уҡ ул беҙҙең яҡтарҙа Рәсәйҙең колониаль сәйәсәте терәгенә әйләнә. Бындай ҡәлғәләр һәм остроғтар XVI-XVII быуаттарҙа бигерәк тә Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ямғырҙан һуң сыҡҡан бәшмәк кеүек ҡалҡып сыға. Бында сауҙагәр Строгановтар Уралды һәм Себерҙе яулауҙы башлап ебәрә. Башҡорттар ҡаршылашып, ихтилалдар ойоштора. Тап шул саҡта уларҙы баҫтырыу өсөн Өфөнән каратель отрядтары сығарыла башлай. Был - тарихи ысынбарлыҡ.

**(Аҙағы. Башы 37-39-сы һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Страбондың мәғлүмәттәре буйынса, Көньяҡ Уралдың көнсығышындағы урманлы-далалы зонала мәсәғүттәр һәм саҡтар йәшәгән. Уларҙың барыһын бергә скифтар тип атағандар. Уларҙың берәүҙәре тауҙарҙа, икенселәре - тигеҙлектә, өсөнсөләре - һаҙлыҡта, дүртенселәре утрауҙарҙа көн күргән. Мәсәғүттәрҙең йәшәгән урынын билдәләр өсөн Страбон йүнәлеш итеп Төньяҡ Боҙло океанға ҡойған йылғаны һайлаған.

Страбон, үҙенең замандаштары һымаҡ уҡ сиктәрҙе томандар артындағы төньяҡ диңгеҙҙәр рәүешендә күҙаллаған. Беҙҙең эраның тәүге йылдарында римлеләрҙең хәрби караптары Балтик диңгеҙенең дымлы һәм боҙло ярҙарына барып еткәс, үҙҙәрен Төньяҡ Боҙло океанда тип хис иткән. Йылғаның төньяғында йәшәүсе скифтар иле хаҡында ла ишетеп ҡайтҡан улар. Балтик диңгеҙенә ҡойоусы йылғаларҙан улар бары Висланы ғына белгән. Улар Каспий диңгеҙен океандың ҡултығы тип уйлаған, Алыҫ Көнсығыш, Ҡытай хаҡында ла ишетеп кенә белгән, Урта Көнсығыш, Һиндостан, Урта Азия, Урал һәм Себер хаҡында бөтөнләй белмәгән. М.И. Ростовцев яҙыуынса, Каспий диңгеҙенән көнсығышта йәшәүсе мәсәғүттәр хаҡында "тарихсылар үҙҙәренең хеҙмәттәрендә аныҡ һәм теүәл булған бер мәғлүмәт тә килтермәгән..." ( 151, 4-се бит). Бының дәлиле булып Страбон үҙенең хеҙмәтендә Урал (Яйыҡ) йылғаһы менән уның ҡушылдығы Тубылды бер йылға тип билдәләй. Уларҙың башланған урындары яҡын - 5-6 саҡрым ғына. Улар бер урындан баш ала: Урал көньяҡҡа Каспийға, ә Уй Тубылға ҡушылғандан һуң Иртыштан Обҡа ҡушыла, артабан был йылғалар бергә ҡушылып Төньяҡ Боҙло океанға барып етә. Урал һәм Обь йылғалары, күрәһең, борон һаҙлыҡ урындарҙан башланғандыр. Геродот был урындарҙа ҡоро ер булмауы хаҡында әйтә. Ә Р. Вахитов иҫәпләүенсә, Каспийҙан алып Төньяҡ Боҙло океанға тиклем һыу үҙәне боронғо замандарҙа сауҙа юлы булып хеҙмәт иткән. Уралда алтындың һәм зәңгәр таштарҙың үтә күп булыуы сауҙаға киң юл асҡан.

Боронғо Евразияла йәшәүсе ҡәбиләләр хаҡында яҙыусы ҡайһы бер ғалимдар мәсәғүттәрҙе стиссагеттарға тиңләй. Ғилми хеҙмәттәр араһында башҡорттарҙың этногенезында ҡатнашыусы иирктар хаҡында ла яҙмалар осрай: "Был яҡтарҙа улар менән күршеләш иирк атамалы ("ирик" ырыуы бәшәнәктәре) йәшәй. Улар һунарсылар, йәнлектәрҙе түбәндәгесә ысул менән аулай. Һунарсылар табышын ағас баштарында һағалай (уларҙың иле ҡуйы урмандар менән ҡапланған). Һәр һунарсының ятырға өйрәтелгән аты һәм эте бар. Йәнлек ағасҡа яҡынлағас, һунарсы уға уҡтан ата һәм ерҙә көтөп ятҡан атына атланып, йәнлек артынан саба". Геродот тиссагеттарын һәм иирктарын С.И. Руденко башҡорттар тип атай (С.И. Руденко, 2006, 304-се бит). Шулай уҡ Руденко үҙенең "Башҡорттар" (Доватур һәм башҡалар., 1982, 247-252-се биттәр) башҡорттарҙың ата-бабалары тип аргиппейҙарҙы атай. Әммә, Геродот яҙыуынса, "ҡаялы тауҙар итәгендә йәшәүсе" агриппейҙар төрки телле түгел. Геродот уларҙы "яҫы танаулы, ҙур ҡолаҡлы" итеп һүрәтләй, был һынлама уларҙың монгол расаһына ҡарауын дәлилләй.

**(Дауамы бар).**

✓ Йәй Салауат районында "Йорүҙән" конкурсы үтте. Республика Халыҡ ижады үҙәге грант алып, шул ярҙам менән был төркөмдәрҙе сәхнә костюмдары менән тәьмин итеп, сағыу, фәһемле бер сара үткәрҙе.



# БЕҘГӘ КИЛҺЕНДӘР

## Башҡортостандың күпме

**Мексикала үткән Бөтә донъя фольклориадаһында Башҡортостандың Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле һәм "Арғымаҡ" этно-төркөмө ҡатнашты. Улар унда республикабыҙ ғына түгел, ә тотош Рәсәй исеменән сығыш яһаны! 2020 йылда ошондай уҡ Фольклориада Башҡортостан Республикаһында үткәреләсәк. Фольклориада ниндәй юҫыҡта үткәрелә һәм үҙ эсенә фольклорҙың ниндәй төрҙәрен ала? Киләсәктә үҙебеҙҙә буласаҡ сараға беҙ нисек әҙерләнергә тейешбеҙ? Бөтөн был һорауҙарға яуап алыу һәм башҡа ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙе асыҡлау өсөн һөйләшеүгә Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле директоры Филүс ҠАҘАҠБАЕВ менән "Арғымаҡ" этно-төркөмө етәксеһе Ринат РАМАҘАНОВты саҡырҙыҡ.**



**▸ Егеттәр, иң башта был сараның тарихы һәм маҡсаты менән танышып китәйек әле. Ҡасандан үткәрелә был байрам? Байраммы ул, әллә эшлекле аралашыу формаһындағы осрашыуҙмы? Ҡасандан, ҡайҙан башланған һәм ни өсөн тап башҡорттар унда барып юлыҡты?**

**Филүс Ҡаҙаҡбаев:** Бөтә Донъя Фольклориадаһы ул Бөтә Донъя фольклор һәм традицион сәнғәт Советының рәсми сараларының бер өлөшө булып тора. Олимпиада уйындары кеүек, үҙ флагы, гимны, символикаһы булдырылып, дүрт йылға бер үткәрелә килә. Девизы: "Ҡулда - ҡул". Был символ донъя халыҡтарының рухи ҡомартҡылары аша бәйләнештә булыуын аңлата. Беренсе Фольклориада 1996 йылда Нидерландияла ойошторолған булһа, унан Японияла, Венгрияла, Көньяҡ Кореяла һәм әле һуңғыһы Мексикала булды. Сакатекас ҡалаһы ла бушҡа ғына һайланмаған ине. Ҡаланың үҙәге Бөтә Донъя ЮНЕСКО мираҫына индерелгән. Ундағы йорттар, ҡоролмалар, урамдар һәм бер ҡайҙа ла күрелмәгәнсә итеп эшләнгән фонарҙәр үҙҙәре бер музей экспонаттары булып тора. Шул уҡ ваҡытта бында сауҙа менән мәҙәниәт тә ныҡ үҫешкән. Был ҡаланы "Мексиканың төньяғына сығыусы ҡапҡа" тип тә йөрөтәләр.

Ә инде беҙҙең, тап башҡорттарҙың, был байрамға барып юлығыуыбыҙҙың сәбәбе, иң беренсе сиратта, халҡыбыҙҙың үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ фольклоры булһа, икенсеһе - 2020 йылда беҙ был сараны үҙ республикабыҙҙа ойоштороусылар булараҡ, махсус ҡунаҡтар рәүешендә саҡырылдыҡ. Ә инде сараға тап ошо ике коллективтың барыуын республикабыҙҙың Мәҙәниәт министрлығы хәл итте.

**▸ Хәҙер, әйҙәгеҙ, һеҙҙең ишеткән-күргәндәрегеҙ менән бүлешәйек. Нисек ҡабул иттеләр? Ниндәй мөғжизәләргә шаһит булдығыҙ? Киләсәккә фәһем алырлыҡ мәлдәр, күренештәр булдымы? Һәм, ғөмүмән, нисек йәшәп ята Мексика?**

**Ринат Рамаҙанов:** Был сараның дөрөҫ атамаһы - Театрлаштырылған донъя фольклоры байрамы. Сөнки 50-ләп илдән килгән ике меңдән ашыу артист, һәр береһе үҙенең милли кейемендә булып, ниндәй генә кәсепте, йоланы, йыр-бейеүҙе һәм ауыҙ-тел ижадын күрһәтмәне. Сакатекастың 13 мең тамашасыны һыйҙырырлыҡ стадионы шығырым тулы булып, унда инә алмай ҡалыусылар артистарҙы башҡа нөктәләрҙә лә түҙемһеҙләнеп көтөп торҙо.

Беренсе көн, билдәле булыуынса, парад булды. Башҡалар кеүек, беҙ ҙә милли кейемдәребеҙҙә, милли музыка ҡоралдарында уйнай-уйнай, йырлай-бейей, сафтарға теҙелеп үттек һәм, әйтергә кәрәк, башҡаларҙан айырылып торҙоҡ, иғтибарҙы шундуҡ йәлеп иттек, тиһәм дә арттырыу булмаҫ. Ысын. Күптәрҙең күҙе беҙҙә булды.

Бер нисә көн эсендә 450-нән ашыу сара үтте. Беҙ ҙә шулар иҫәбендә планлаштырылған урындарҙа сығыштар яһаныҡ. Башта "Кемдәр икән былар?" тип ҡыҙыҡһыныу менән ҡаршы алһалар, бер-ике сығыштан һуң беҙҙе тамашасыларыбыҙ икенсе нөктәләге концерттарыбыҙға эҙләп килә башланы. Үҙҙәре үк килеп әйтә: "Беҙ һеҙҙе тегендә күрҙек тә, бында тағы ла ҡарарға тип эйәреп килдек", - тиҙәр.

**Филүс Ҡаҙаҡбаев:** Өҫтәп китәйем әле. Донъя кимәлендә беҙ Рәсәй субъекты булараҡ Рәсәйҙе беренсе тапҡыр һынландырҙыҡ һәм ике төркөм дә Мексикаға шулай уҡ тәүге тапҡыр барҙыҡ. Был беҙҙең үҙебеҙ өсөн ҙур мәктәп булды. Ә инде тап Башҡортостандың 2020 йылғы Фольклориада ерлеге итеп һайланыуы республикабыҙҙың Рәсәй күҙлегенән, ил күҙлегенән яҡшы кимәлдә итеп баһаланыуы ул.

"Мәктәп" тип әйттем, сөнки беҙ унда Фольклориаданың ойоштороу үҙенсәлектәрен ҡарап-күҙәтеп йөрөнөк һәм шундай һығымтаға килдек: беҙ был сараны күпкә яҡшыраҡ итеп ойошторасаҡбыҙ, Алла бирһә. Мексика халҡының менталитеты ла, характер үҙенсәлектәре лә башҡамы, әллә тәртип яғы аҡһаймы - уларҙа ойоштороу тигән нәмә бөтөнләй юҡ. Әйткәнемә йәшәү, ашау, концерттарҙы билдәләү һәм хатта гид хеҙмәтләндереүе лә инә. Унда, мәҫәлән, ҡунаҡханала бер карауатҡа икешәр кеше тура килгән, коллективтарыбыҙҙың ҡайҙа туҡланырға тейешлеген белмәгән осраҡтар ҙа булды. Йәки ҡайҙа-ҡасан сығыш яһарыбыҙҙы асыҡлай алмайбыҙ ҙа, кемдер ҡапыл килеп әйтә һәм беҙ йүгерешеп сығып китәбеҙ. Программа һорайбыҙ - юҡ, саралар планын һорайбыҙ - юҡ, нисә сәғәтлек концерт, нисәнсе булып сығыш яһайбыҙ - белгән әҙәм юҡ! Мексикандар күп нәмәгә бик еңел, ғәҙәти итеп кенә ҡарай икән. Инде лә бошмаҫ халыҡ! Улар "Әһә, былар сит илдән килгән ҡунаҡтар!" тип айырып ҡарай белмәй. Хатта беҙҙе йөрөтөүсе автобустың шоферы ла беҙгә ғәҙәти пассажирҙар кеүек кенә итеп ҡараны. Был, бер яҡтан, шул халыҡ араһына тиҙ генә инеп, яғылып китеү яғынан ҡыҙыҡлы ла, икенсе яҡтан, беҙҙең кеүек айырым миссия менән йөрөгәндәргә мәшәҡәтле лә. Беҙ бит, нисек әйткәндә лә, планлаштырылған, яйға һалынған тәртипкә нигеҙләнеп йәшәп һәм эшләп өйрәнгәнбеҙ.

**▸ Һеҙҙең коллективтарҙың сит илдә республикабыҙҙы, халҡыбыҙҙың рухи байлығын һынландырыуы мәртәбәгеҙҙе лә, шул уҡ ваҡытта яуаплылыҡты ла арттырҙы, шулай бит. Ошонан сығып шундай һорау: һеҙ етәкләгән коллективтар, һеҙ башҡарған эштәр, йәғни йыр һәм бейеү сәнғәте милли фольклорыбыҙҙы һаҡлау һәм үҫтереүгә ни ҡәҙәр өлөш индерә, тип уйлайһығыҙ? Ансамбль етәкселәре булараҡ түгел, ә рухи ҡиммәттәребеҙгә битараф булмаған ябай башҡорт булараҡ бирәм мин һеҙгә был һорауҙы.**

**Филүс Ҡаҙаҡбаев:** Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең милли фольклорыбыҙҙы тергеҙеүҙә һәм мәңгеләштереүҙә һалған хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ булыуын яңылыҡ итеп һөйләргә лә түгел, бары тик яуап итеп кенә иҫкә төшөрәм. Белеүегеҙсә, 1939 йылда талантлы бейеүсе, Башҡорт опера һәм балет театры артисы Фәйзи Ғәскәров етәкселегендә төҙөлгән Башҡорт дәүләт бейеү ансамбле ошо һигеҙ тиҫтәгә яҡын ғүмерендә 60-тан ашыу башҡорт бейеүен халыҡ хәтерендә тота ғына түгел, уларҙы йәш быуынға ла тапшыра килә. Шуларҙың "Зарифа", "Гөлнәзирә", "Заһиҙә", "Байыҡ", "Төньяҡ амурҙары", "Ҡороҡсолар", "Фермала", "Бесәнселәр", "Дуҫлыҡ", "Шишмә буйында" кеүек бейеүҙәре иң тәүгеләре була. Быларҙан ары килгәндәре лә барыһы ла халҡыбыҙҙың бай фольклорына, ғөрөф-ғәҙәтенә, йолаларына нигеҙләнгән. Ә инде ансамблдең барлыҡҡа килгәндән алып үҙ ерлегебеҙҙә генә түгел, ә сит өлкәләрҙә, сит илдәрҙә йөрөп, башҡа халыҡтарға милли мәҙәниәтебеҙҙе күрһәтеүе, беҙҙең ошо ерҙә бар булыуыбыҙҙы, ерле, тарихлы булып йәшәп ятыуыбыҙҙы күрһәтеүе үҙе үк бер ҙур хеҙмәт.

Шулай уҡ ансамбль йәш быуынды тәрбиәләүгә, уларға әлеге милли мәҙәниәт хаҡындағы мәғлүмәттәр биреүгә, күңелдәрендә халыҡ традицияларына һөйөү уятыуға ла булышлыҡ итә. Республика һәм яҡын-тирә өлкәләр буйлап мәктәп уҡыусылары өсөн концерт-лекторийҙар ойошторола. Унда тәҡдим ителгән бейеүҙәрҙең дә төп өлөшө милли фольклорға нигеҙләнгән.

**Ринат Рамаҙанов:** Беҙ төркөмөбөҙҙө ойоштороп, эш башлағанда артабан нимә килеп сығырын үҙебеҙ ҙә белмәгәнбеҙҙер әле. Традицион фольклорҙы күрһәтеүселәр булһа ла, уны сәхнәгә заманлаштырып сығарыусылар әлегә юҡ ине. Ә беҙ регги, рок, диско, R’n’B, поп йүнәлештәрен дә индереп, ҡулланып, шул йүнәлештәргә милли мотивтарыбыҙ һалынған көйҙәр сығарырға тырыша башланыҡ. Башта үҙешмәкәрҙәр кимәлендә генә булдыҡ. Сөнки башта музыка ҡоралдарына, яҡшы аранжировкаларға, сифатлы яҙмаларға аҡса булманы. Тәүге музыка ҡоралдарын да кәләш менән Ҡарһылыу-Ҡыш бабай булып эшләүҙән килгән табышҡа алғайныҡ.

Шулай итеп, йәштәрҙе милли фольклорыбыҙға йәлеп итеүгә, уларҙың иғтибарын ошо юҫыҡҡа йүнәлтеүгә аҙ булһа ла өлөш индергәнбеҙҙер, тип уйлайым. Сөнки ошо этно-рок төркөмө килеп сыҡҡас, ул күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятты, башҡорт йәштәре: "Әһә, ошолай ҙа була икән", - тип уйланы. Уйлап ҡына ҡалманы, идеяны эләктереп тә алды. Бөгөнгө көндә үҙебеҙҙәге клавишник егет "Әссәләм" төркөмөн барлыҡҡа килтерҙе, ҡылҡумыҙсыбыҙ "Ятаған"да, барабансы "Splash" барабандар шоуында уйнап йөрөй, Екатерина Ямщикованың да үҙенең коллективы бар. Йәғни, төркөмдәге йәштәребеҙ һәр береһе шәхси үҫеш кисереп, ошо милли фольклор нигеҙендә үҙ ҡыҙыҡһыныуындағы проект булдырҙы. Әгәр киләсәктә үҙебеҙҙә фестивалдәр үткәрергә планлаштырабыҙ икән, беҙгә тамашасыға тәҡдим итер продукт кәрәк. Аллаға шөкөр, бөгөнгө көндә һәр районда этно-төркөмдәр ойошто. "Байембәт", "Тамға", "Ҡатай", "Әйле-Ҡатай", "Елмерҙәк", "Аҡтамыр", "Урал тау", "Юлдаш", "Алпамыша" кеүек ун бишләп уңышлы эшләп килгән коллективтарҙы беләм. Йәй Салауат районында "Йорүҙән" конкурсы үтте. Республика Халыҡ ижады үҙәге грант алып, шул ярҙам менән был төркөмдәрҙе сәхнә костюмдары менән тәьмин итеп, сағыу, фәһемле бер сара үткәрҙе. Ошонда күренде инде һәр коллективтың үҙ стилен булдырырға тырышыуы, һәр кемдең эҙләнеү, ижад юлында икәне.

**▸ Бөгөн тарих, халҡыбыҙҙың үткәне, фольклоры һәм башҡа рухи ҡиммәттәре менән ҡыҙыҡһыныу үҫә бара. Сөнки милли нигеҙҙәге йәки темалағы һәр яңы әҫәр, пьесалар, йыр-бейеүҙәр, кейем-һалым күптәрҙе битараф ҡалдырмай. Фекер уртаҡлашыуҙар, бәхәстәр, ҡайһы саҡта тәнҡит тә ишетелеп кенә тора. Әйткәндәй, ансамблдең "Тархандар" бейеү костюмы тирәләй ҙә хәбәр күп булды. Был нимәнән, һеҙҙеңсә, халыҡтың күп белеүенәнме, әллә белмәүенәнме?**

**Филүс Ҡаҙаҡбаев:** Был халыҡтың ҡыҙыҡһыныусан булыуынандыр. Шул уҡ ваҡытта уларҙың ансамбль ижадына битараф булмауынан, уларҙың белергә һәм аңларға теләүенән. Кем әйтмешләй, ҡыҙыҡлы менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа күп була. Был бейеүҙе иһә беҙҙең данлыҡлы оҫтабыҙ, БР-ҙың халыҡ артисы Риф Ғәбитов ҡуйҙы. Алға китеп, шуны әйтер инем: Риф Фәтих улы бер сәхнә эшен дә, хатта бәләкәй генәһен дә, еңел-елпелек менән башҡармай, ул бик төптән уйлап, эҙләнеп, тарихсылар, этнографтар, архивтар, оло быуын вәкилдәре менән кәңәшләшеп, ҡайта-ҡайта тикшереп кенә башҡара торған кеше.

Ә инде бейеү тарихына килгәндә, милләтебеҙҙә бит бөтөн ҡатламдар ҙа булған, әммә профессиональ бейеү формалашҡан мәлдә эшсе-хеҙмәтсән халыҡ ҡатламына дан йырлау өҫтөн ҡуйылған, ябай халыҡты күтәреү өсөн геройҙар ҙа улар араһынан булырға тейеш булған. Бөтәһе лә йә һунарсы, йә көтөүсе булмаған бит. Араларында йөҙ, йәки мең кешегә бер лидер ҙа осраған. Бәләкәй генә берләшмәлә лә, ауылда ла башҡаларҙы үҙенең артынан эйәртеүсе берәү була. Музейҙарҙа ла ябай халыҡтың кейемдәре һаҡланған, ә бейҙәрҙең, тархандарҙың кейемдәре юҡ, сөнки улар ысынлап та күп булмаған. Тархандар - улар төрки телле халыҡтарҙа йәмғиәттең иң юғары ҡатламы. Күрһәткән батырлығы, дәүләт эшендәге уңыштары өсөн бирелгән уларға был дәрәжә. Бейеүҙә ошо батырлыҡ-

# ГЕНӘ ӘЛЕ -

## хазинаһын күреп ҡайтасаҡтар!

ты, лидерлыҡты күҙ алдына килтерергә хәрәкәттәр ярҙам итә. Үҙ дәрәжәһен белеп, һалмаҡ ҡына бейей улар сәхнәлә. Музыка ла бейеүҙе тулыландырырға ярҙам итә. Халҡыбыҙҙың һәр ырыуының үҙенең дәүләтселек элементтары - тамғаһы, ҡошо, ағасы, ораны булған. Тамғалар - шулай уҡ боронғолоҡ күренеше. Башҡорт тамғалары ябайыраҡ күренһә лә, улар рун яҙмаларына барып тоташа. Ошо ябайлыҡ халҡыбыҙҙың холҡонда әле лә һаҡланып ҡалған бит.

Костюмдар буйынса ла ентекле эш алып барылды. Костюмдар традицион булһа ла, затлы заттан булыуын күрһәтеп тора. Тархандың эргәһендә уның аңына, дәрәжәһенә торошло ҡатын-ҡыҙ булырға тейеш. Санкт-Петербургтың этнографик музейында "башҡорт кәләпүше" тигән баш кейеме һаҡлана, ул бейек итеп тегелә, тотош тәңкә менән биҙәлгән. Руденконың башҡорттар тураһындағы хеҙмәттәрендә был баш кейеме бик яҡшы итеп тасуирлана. Бына ошо "кәләпүш"те ҡуллана ла инде бейеүендә Риф Гәбитов. Был үҙенә күрә бик уникаль күренеш булды. Санкт-Петербург этнографик музейында һаҡланған "кәләпүш"тең ауырлығы - 16 килограмм. Ҡатын-ҡыҙ матур булыу өсөн әллә ниндәй ауырлыҡтарға ла әҙер, быныһына шик юҡ. Әммә был биҙәнеү әйберҙәренең башҡа маҡсаты ла булған. Иң тәүҙә, тәңкәләр яуыҙ көстәрҙән, яман күҙҙәрҙән һаҡлап торорға тейеш булған, күрәһең. Наталья Степанова тигән рәссам фекеренсә, көмөш тәңкәне тишһәң, аҡса берәмеге булараҡ, уның ҡиммәте юғала. Бының менән башҡорт ҡатын-ҡыҙы, ҡарағыҙ, бына мин күпме байлыҡты биҙәнеү әйберенә әүерелдерә алған хәлле заттанмын, тип әйткән кеүек. Йәғни, биҙәнеү әйберенең байлығына ҡарап, ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге дәрәжәһен, затын да белергә була. Рәссамдың тағы бер версияһы буйынса, бына был кәләпүш - яугирҙарҙың шлемына оҡшаған. Алыҫтан ҡарағанда, ул шлем булып күренә. Борон ирҙәре менән бергә ҡатындар ҙа яуға йөрөгән, шул саҡта кәләпүштәр ялтырап күренеп, яугирҙар һаны икеләтә артыҡ күренгән. Был версияларҙың барыһы ла йәшәргә хаҡлы, тип уйлайым. Шунлыҡтан, "Тархандар" бейеүендәге милли кейемдең ҡулланылыуы нигеҙле һәм быны иҫбатлаусы тарихи мәғлүмәттәр етерлек. Заманында сәхнәгә "Еҙ үксә" бейеүе сыҡҡас та уны нисек кенә шелтәләмәнеләр. Әммә бөгөн "Еҙ үксә" - легенда! Ә инде бөгөнгө "тархандар" тирәһендәге бәхәстәргә килгәндә - улар булһын ул, был кемдәрҙендер беҙҙең сәнғәткә ҡарата битараф булмауын күрһәтә.

Ике йыл элек донъя кимәлендәге "Профессиональ дәүләт бейеү ансамблдәре" тигән Союз төҙөлдө, беҙ шул теҙмәгә ингәнбеҙ. Һәм бер-беребеҙ менән хәбәрләшеп, аралашып торабыҙ, шул иҫәптән проблемаларыбыҙҙы ла беләбеҙ. Күп бейеү ансамблдәренең репертуары киңәйә алмай, уларҙың бейеү һалыр темалары (йәғни фольклорҙары), бейеү ҡуйыр балетмейстерҙары юҡ. Элекке билдәле бейеү ҡуйыусылар, үкенескә ҡаршы, теге донъяға күсеп бөттө, уларҙы алмаштырыр оҫталар килмәне. Ә беҙҙең ансамблдә йыл һайын бер яңы милли бейеү яралып тора. Ошоларҙан сығып, шөкөр итә лә беләйек, йәмәғәт.

**▸ Ринат, ә бына һеҙҙең кеүек рок һәм башҡа төркөмдәрҙең ҡобайырҙарҙы, мөнәжәттәрҙе, халыҡ йырҙарын үҙгәртеп, төрлө элементтар индереп башҡарыуы фольклорға зыян итмәйме икән?**

**Ринат Рамаҙанов:** Беҙ төркөм ойошторop, йырлап йөрөй башлағас, фольклорсы апай-ағайҙарыбыҙ "Фольклорҙы боҙаһығыҙ" тип әрләп тә ҡуя ине. Улар дөрөҫ әрләне. Беҙ уны аңланыҡ. Әммә шундай һорау торҙо: йәштәрҙе этно-музыкаға нисек йәлеп итергә һуң? Шул ваҡыт Юлай ағай Гәйнетдинов бик фәһемле кәңәш бирҙе: ҡустылар, был һеҙҙең "гарнир" формаһында ғына булырға тейеш, ә төп өлөштө үҙебеҙең традицион фольклор биләнен, тине. Һәм беҙ яйлап тамашасыны заманса биҙәлештәр менән арбарға һәм тап уртала ысын ҡомартҡыларыбыҙҙы тәҡдим итергә өйрәндек. Быны нимәнән әйтәм - аңлап эшләргә кәрәк. Ә инде фольклорҙы дан һәм аҡса мәнфәғәтендә улай-былай һуҙғылап, боҙғолап тотоноу - енәйәт, минеңсә. Ундай йәштәргә ҡайыш кәрәк.

Беҙҙең милләттең рухи хәтере шәп. Үрҙә һөйләнгән бейеү янындағы бәхәстәр ҙә ана шул рухи хәтерҙең һаҡланып ҡалыуының дәлиле ул. Ололарҙан кемдәрҙер олатай-өләсәйҙәренән рухи хазинабыҙ өлгөләрен төп нөсхәһендә күргән, иҫләп ҡалған. Улар хәрәкәттәрҙәге, кейемһалымдағы, йыр темпындағы саҡ ҡына башҡараҡ тонды ла ғәфү итә алмай, шундуҡ һуҡ бармағын күтәрә. Әммә шул уҡ ваҡытта был ҡомартҡылар элекке заманда ғына тороп ҡалмаһын, юғалмаһын һәм уларҙы бөгөнгө быуын ҡабул итеп алһын өсөн уларға ниндәйҙер төҙәтмәләр индерергә лә тура килә. Әммә бөтөн был ижад милли мәнфәғәттәрҙә ҡайғыртып, үҙһаҡланыш хәстәрҙәрендә башҡарыла.

**▸ Бөтә Донъя Фольклориадаһына кире ҡайтҡанда, "Тамашасы тарафынан беҙгә айырым иғтибар булды", тинегеҙ. Ошо хәбәрҙе асыҡлап китәйек әле. Ни өсөн улай булды? Ни яғығыҙ менән айырылдығыҙ һеҙ башҡаларҙан?**

**Филүс Ҡаҙаҡбаев:** Мексикала егерме көн булдыҡ. Башта беҙҙең сығыштарҙы концерттың иң башында ҡуйҙылар, бер аҙҙан иң аҙаҡҡы номер итеп ҡалдыра башланылар. Ринат сығып ҡурайҙа "Урал"ды һыҙҙырып ебәрһә... бар тирә-яҡ тып-тын була! Унан китә алҡыштар! Шулай уҡ "Еҙ үксә" егеттәре килеп сыҡтымы йәки "Зарифа" тамамландымы - гөүләү-хуплау урамдарҙы осороп алып бара. Был бер ҙә арттырыу түгел. Бына, мәҫәлән, Латин Америкаһы йәки Европа халыҡтары бейеүҙәрен алайыҡ. Бернисә минут шөғөлләнгәндә уны һеҙ ҙә башҡара алаһығыҙ, көй темпын ғына тотоп алыу фарыз. Ә беҙҙең бейеүҙәрҙе уларҙың береһе лә бейей алмай, һәм өҫтәп китәм, беҙҙең бейеүҙәрҙе башҡарған коллективтар ҙа Рәсәйҙә бер-икәү генә, сит илдәрҙә бөтөнләй юҡ. Хәрәкәттәрен ҡабатлап ҡарағанда ла, эстәлеген, кисерештәрен, бейеү моңон төшөнмәй, сағылдыра алмай улар. Ә беҙ үҙебеҙ "һә" тигәнсе уларҙың хәрәкәттәрен, бейеү характеры һыҙаттарын, шул энергетиканы, костюм биҙәлештәрен отоп алып ҡайттыҡ. Киләсәктә репертуарыбыҙға Мексика бейеүе лә өҫтәләр әле.

**Ринат Рамаҙанов:** Мин унда беҙҙекеләй костюмдарҙы күрмәнем. Юҡҡамы ни, урамда ла тотоп ҡарайҙар, бергәләп фотоға төшөргә һорайҙар. Ул тәңкәләр, ул еләндәр, ул баш кейемдәре генә лә ни тора! Беҙҙең кейемдәр шул тиклем халыҡты йәлеп итә. Ә инде ир-егеттәр бейеүендәге ирлек, ғәйрәтлек, ҡеүәтләү ауаздары биреп һындыра баҫыуҙар, һәр ваҡыт вальс формаһындағы һикрәнләп бейеүгә яраҡлашҡан халыҡты үтә лә тетрәндерҙе, ахыры. Беҙҙең егеттәр һикереп килеп баҫҡанда сәхнә алдындағы тамашасы артҡа сигенә биреп ҡуя ине хатта. Беҙ үҙебеҙ шул күренештән көләп йөрөнөк әле. Сығыш яһаған ерҙәребеҙҙә лә егермеләп метрлыҡ сираттар торҙо - ысын! Килеп рәхмәт әйтеләр, беҙҙең арттан эйәреп йөрөнөләр. Хатта ҡайһылары: "Һеҙҙе күргәндән һуң Башҡортостанды барып күреү теләге тыуҙы, билет алырға булдыҡ", тип тә әйттеләр. Былар, әлбиттә, беҙҙе рухландырҙы ғына.



**▸ Ситтә беҙҙең милли мәҙәниәт ысынлап та күтәреп алына, был һеҙҙең һөйләгәндән дә күренеп тора. Ә бына үҙебеҙҙә, ниңәлер, ундай уҡ ҡыҙыҡһыныу юҡ. Был нимәнән, һеҙҙеңсә: ошо байлыҡты, тәрәнлекте төшөнеп етмәгәнлөмө, аңһыҙлыҡтанмы, әллә ҡәҙерләй белмәүҙәнме икән?**

**Филүс Ҡаҙаҡбаев:** Улай уҡ тип әйтмәҫ инем. Мин үҙебеҙҙең ансамбль өсөн генә яуап бирәм: ҡайҙа барһаҡ та залдар туп-тулы була, Аллаға шөкөр. Ә инде дөйөм алғанда, беҙҙә республика мәҙәниәт үҙәктәрендәге концерттар маркетингын төҙөү, планлаштырыу яғы аҡһай. Ситтән килгән концерт бригадаларына "йәшел урам" асыла. Былтырғы миҙгелдәрҙә, мәҫәлән, абруйлы ғына төркөмдәр, филармониялар залға тамашасы йыя алманы. Был уларҙың сығышы ни яғы менәндер башҡаларҙан кәм тигәндә түгел, ә урындарҙа эште ойоштора белмәүҙә генә аңлата. Был мәсьәлә республиканың Мәҙәниәт министрлығы кимәленә күтәрелде һәм яҡын арала ыңғай хәл ителер, тип ышанабыҙ.

Был тәңгәлдә тағы ла бер нәмә бар, ул - тамашасының темпераменты. Улар һәр ерҙә һәр төрлө. Төрлө илдәрҙә сығыш яһарға тура килгәс, ошо күренеште күҙгә элмәй ҙә булмай. Бына әле һөйләп ултырабыҙ, мексикандар тамаша ҡылыуҙа бик ярһыу, күнелсәк халыҡ, тип. Япондар, мәҫәлән, бөтөнләй эмоцияһыҙ, һин уларға оҡшағаныңмы, юҡмы икәнде лә белмәҫкә мөмкинһең. Шуның кеүек, беҙҙең халыҡтың да, тамашасы булараҡ, үҙенсәлеге бар. Улар бик тотанаҡлы, ипле, сабыр. Илаһа, илап ултыра, әммә ҡысҡырмай-һыҙғырмай, йүгереп сығып ҡосаҡлап үпмәй.

**Ринат Рамаҙанов:** Икенсе бер мәсьәлә лә бар: беҙҙең эстрада йәштәре концерттар менән йөрөүҙе аҡса эшләүгә генә ҡайтарып ҡалдыра. Улар гастролдәргә ике кеше, бер микрофон һәм бер колонка менән сыға ла китәләр. Концерттары тотош импровизация менән бара. Бер ниндәй сценарий, шоу-программа, сәхнә биҙәлеше, мәғәнә юҡ. Бөгөн ябай исем менән генә тамашасы йыйып булмай. Улар концерттан ял итеп ҡайтырға, иларға-көлөргә, хисләнергә, уйланырға, фәһем алырға тейеш. Тамаша ошондай ихтыяждарға яуап бирмәй икән, кеше бер килә, ике килә лә, өсөнсөгә ҡул һелтәй.

Сифатлы концерттар биреүгә, тамашасы зауығын ҡайғыртып эшләүгә өйрәнә барабыҙ ғына әле. Бына күптән түгел "Евразия йөрәге" фестивале үтте. Уның сиктәрендә "Этно төнө", "Симфония төнө", "Кино төнө", "Ҡурай-фест" һәм "Урал моно" саралары ойошторолдо. Бына ошондай концерттарҙы башҡа ҡалаларға, райондарға йөрөтөп күрһәтергә ине. Был әлегә тәжрибә өсөн булды. Киләһендә ошондай концерттарҙы мотлаҡ башҡа ҡала-райондар ҙа, башҡорттар йәшәгән сит төбәктәр ҙә күрәсәк. Был миҫалдарҙа беҙ халыҡты ысын, матур, эстәлекле шоу-программалар миҫалында тәрбиәләй аласаҡбыҙ, тип уйлайым.

**▸ Фольклор - ул йыр-бейеү генә түгел, ул шул уҡ милли кәсептәр ҙә, көнкүреш шөғөлдәре, ауыҙтел ижады ла һ.б. Әлеге көндә бына ошо "фольклор" теҙмәһенә ингән ҡиммәттәрҙең ҡайһыныһы иң сетерекле хәлдә, ҡайһыныһы һуңғы сиктә булып, ярҙамға мохтаж?**

**Ринат Рамаҙанов:** Бер яҡтан, айырым-айырым ҡараһаң, һәр береһе ярҙамға мохтаж кеүек. Ә икенсе яҡтан, дөйөм алғанда, улар, киреһенсә, үҫешә, ғәҙәти тормошобоҙға үтеп инә, ҡулайлаша барыу юлында. Яңыраҡ булып үткән "Өфөфорум" мәғариф проектын ғына алайыҡ. Мин үҙем ҡатнаша алған программаларҙы ғына әйтәм: мәҫәлән, милли колоритлы заманса кейемдәр тегеү, ҡортсолоҡ кәсебен тергеҙеү, милли мәҙәниәттә аҡса эшләү юлдары тураһында матур сығыштар тыңланды. Быларҙан башҡа ла ҡыҙыҡлы проекттар күп булды. Йәштәребеҙҙең был проекттар менән ҡыҙыҡһыныуын күреп шатланмау мөмкин түгел ине.

Күп халыҡтарҙан айырмалы рәүештә, беҙҙең әле беҙ данлап һөйләп ултырған байлығыбыҙ - фольклорыбыҙ бар. Беҙ уны кәрәк юҫыҡта яңы-яңы ҡулланып өйрәнә башланыҡ ҡына. Яҡын киләсәктә ошо нигеҙҙә күтәрелеш буласаҡ: социаль, иҡтисади, мәҙәни, сәйәси һ.б. пландарҙа. Ошо тулҡынды дөрөҫ итеп тотоп ала һәм алға алып китә алһаҡ - отасаҡбыҙ. Был осраҡта беҙгә глобалләшеү ҙә ҡурҡыныс булмаясаҡ. Совет заманы сынығыуы алған быуынға, бәлки, былар аңлашылып та бөтмәҫ. Улар: "Юҡ менән булалар, иҫкене соҡоп маташалар", - тиерҙәр, әммә беҙгә, аңыбыҙ бар ниндәй зомбилаштырыуға ла, коллективлаштырыуға ла дусар булмаған быуынға, рухи ҡотобоҙҙо ҡабул итеү, рухи хәтирәләрҙе яңыртыу еңелерәк бирелә. Күҙәтегеҙ, беҙҙең быуын дингә лә күпләп килә, сөнки халыҡ борондан динле булған. Йәштәр милли кәсептәргә ҡыйыу тотона, сөнки был уларҙың таҙа аңында һаҡланған. Шулай уҡ улар атайлыҡ-әсәйлек бурыстарына тәбиғи яуаплылыҡ менән ҡарайҙар, сөнки ҡатын-ҡыҙ өсөн иң беренсе сиратта әсә булыу, бала бағыу, ә ир-атҡа ғаиләне аҫырау фарыз икәнлекте төшөнә улар. Йәғни, йәштәрҙең иманлы, аңлы, рухлы булырға ынтылыуҙан тыш, яһалма тағылған идеологияһы юҡ. Шуның менән беҙ бәхетлерәк тә.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бына ошондай фәһемле күренештәргә шаһит булып, донъялар күреп, уй-ниәттәр төйнәп ҡайтҡан егеттәр сәйәхәттән. Киләсәктә беҙгә лә ошо маҡсат менән киләсәк бит инде донъя халыҡтары. 2020 йылда Рәсәйҙә, атап әйткәндә, Башҡортостанда үтәсәк Фольклориада башҡорт халҡының бар фольклор байлығын теҙеп һалып күрһәтер иҫ киткес сара булыр һымаҡ. Егеттәр әйтмешләй, үҙебеҙҙән бигерәк, килеүселәр өсөн ҡыуанам: күпме мөғжизә күреп ҡайтасаҡтар бит инде Башҡортостанда! Башҡорттарҙа!**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Ихтыярымдан тыш ишек яңағын һыйпағандай иткәс, дөбөр-шатыр түбәнгә атылдым. Кабинаға инер алдынан юғарыға ҡараным: "Тәҙрәләрҙә ут үтә тоноҡ күренә, теге саҡтағы Янаның һүнеп барған ҡарашы һымаҡ..."***



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# САҠЫР МИНЕ ЗӘҢГӘР КИҢЛЕКТӘРГӘ...

(Повестан өҙөк)

– Миңә ҡәҙерҙең бөгөнгөһө, хәҙергеһе ҡәҙерле.

- Әгәр эшеңде, тырышлығыңды күрмәйҙәр икән был бит һинең шәхси баш ҡайғыһы, сержант?

- Старший! Дәғүәм юҡ, дөрөҫ уйҙаһың. Әле әйтелгәндәр хаҡында баш ватып ҡарайым да осо-башына сыға алмайым. Йәшерен-батырын түгел, бәғзе берәүҙәрҙе өлкән офицерҙар яҡын, үҙ күрә, доктор, тип кенә йөрөтә, һәм һуңғы сиктә бөтә яҡшылыҡтар һәм ҡулайлыҡтар ҙа уға.

- Әҙәм балаһы был донъяға үҙенең өлөшө менән тыуа, тиҙәр. Аллаһы Тәғәлә миңә тигәнде нишләптер мулыраҡ бүлгән шул. - Шаяртып ҡотолмаҡсымын.

Диденко ағас игәүҙәй мөжөлдәй генә:

- Ҡайһы яғың менәндер штаб офицерҙарына ярап алдың, байрам һайын бүләкләмәй ҡалмайҙар...

- Ошоларҙы еткерер өсөн килдеңме? Әгәр шулай икән, былар миңә кәрәк тә, ҡыҙыҡ та түгел. Ниндәй айырма - өлкән сержант, старшина? Иң беренсе беҙ фельдшерҙар, шуны онотма, һөнәри эшебеҙ менән ил алдындағы изге бурысыбыҙҙы ҡайтарабыҙ.

- Дөйөм һүҙҙәр артына боҫмаҡсыһыңмы? Төпкә төшөбөрәк хисаплаһаҡ, Диденко отделение командирына тәғәйен аҡсаны ала, ә хөрмәтле Баймөхәмәтовҡа прапорщик ставкаһы! Тағы бер ғәҙелһеҙлек!

- Бына нимә, ғәҙеллек юллаусы, эш көнөнән һуң ял итергә теләйем. Башҡа әйтерең булмаһа, тормош фәлсәфәһен ошо урында туҡтатайыҡ!

- Мин үтә лә етди кеше, йомошһоҙ йөрөмәгәнлегемде беләһең. Үтәй алһаң, әлбиттә... - Диденко шуҡлыҡ ҡылырға йыйынған елғыуарҙай бармаҡ остары менән пилоткаһын бер яҡ ситкә этеп, май бөрә башлаған биленә таянды.

- Ниндәйерәк йомош икәнлеген тыңлап ҡарайыҡ башта.

- Беҙгә хеҙмәт итергә күп ҡалманы. Киләһе йәй башында демобилизация. Әгәр тыуған яҡҡа старшина званиеһында ҡайтып төшһәм, туғандарым, яҡындарым ҡыуанырҙар ине.

- Ҡабатларға мәжбүр итәһең, погондарға таҡҡан таҫмалар шул тиклем дә мөһимме инде?

- Мөһим! Минең өсөн!

- Хохол туғаным, звание һорап рапорт яҙа алмағанымды беләһең.

- Уның ҡарауы, ходатайствоны икенсе кешеләр тултыра ала. Мәҫәлән, Иван Иванович Лыков, йәки Павел Сергеевич Слуквин. Урынлы итеп ҡолаҡтарына киртеп ҡуйыу ҙа етә.

- Иван Иванович үҙ кеше, уның менән көн һайын аралашабыҙ. Яйын тап килтереп ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатырға мөмкин, ә бына был урында нишләп майор Слуквинды әйттең әле, мин бит уны яҡындан белмәйем.

- Һеҙ үтә лә хәйләкәр, аҫтыртын кеше икәнһегеҙ.

- Уратмай, кинәйәләмәй һөйлә әле, Андрей.

- Әйтерендә Слуквинға ышанған, яҡын кешеһе аша еткерергә мөмкин... Ярай, ул хаҡта икенсе ваҡыт әңгәмә ҡорорбоҙ. Шулай итеп Лыков менән минең хаҡта һөйләшеп алыуыңа ышанам! - Көрәктәй устарын һондо.

- Әйҙә, ҡул бирешмәй генә килешәйек. Һөйләшеп ҡарармын, тинем бит.

- Ысынлап та һеҙ үтә лә шылғаяҡ, шамбы ишеһегеҙ, әләктерермен тимә.

- Йә, ярай, һаубуллашайыҡ, әйтәм бит, арыным.

- Йомошомдо йомошлап бөтмәнем бит әле.

- Ҡыҫҡараҡ тот.

- Беҙҙең почтаға Нина исемле ҡатындың ҡаланан килеп эшләп йөрөгәнен беләһең. Сиртһәң ҡаны сығырлыҡ, һутҡа тулышҡан бисә. Беҙ уның менән кинәйәле һүҙҙәр, ымхәрәкәт, ишара менән мөхәббәт уйыны уйнайбыҙ, ә аныҡ, практик эшкә күсергә, ҡаты контроль шарттарында хеҙмәт иткәнлектән, форсат әләкмәй. Увольнение мәлендә лә килеп сыҡмай. Уның ире бар.

- Ғаиләле булғас, башында аҙғын уй йөрөткәнсе, иренә тоғролоҡ һаҡлаһын.

- Ошо ерҙә тап өҫтөнә баҫтың, беҙҙең күҙ алдындағы тағы ла бер ҡатын ире өҫтөнән уйнаш итергә маташа бит! Ишеттеңме шул хәбәрҙе?

- Ишетмәнем!

- Ишетерһең, шул хаҡта иренә лә оҙаҡламай түкмәй-сәсмәй еткерерҙәр.

- Урам ғәйбәтсеһеләй ҡыланыу - ир-егетте йәмләмәгән ҡылыҡ. Ә һеҙҙең сәйер мөнәсәбәттә минең ни ҡыҫылыш?

- Эш былайыраҡ, беҙгә уның менән часть биләмәһенән сыҡмай ғына осрашып алырға кәрәк.

- Тоткарламайым да, ҡыҫылмайым да, осрашығыҙ. Тик шуны иҫкәртәм, был - бәйелһеҙлек.

- Коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексынан сығып фекер йөрөтәһеңме?

- Тап шул принциптарға таянып!

- Һин атаған кодекстың ҡайһы бер пункттары ни сәбәптән беҙҙе осраштырырға теләмәй икән, әйтә алмаҫһығыҙмы?

- Уны кейәүҙә тинең, тимәк, тормошта, бәлки, балалары ла барҙыр. Сит ояны туҙҙырыу, йә туҙҙырырға маташыу - гонаһ.

- Ә нимә һуң ул гонаһ?

- Үҙ-үҙеңде алдау, әйләнәтирәңдәгеләргә хыянат итеү, хаслыҡ ҡылыу.

- Ысынлап та старшина званиеһын нигеҙһеҙ бирмәгәндәр икән, һине сәйәси йәһәттән бик яҡшы тәрбиәләгәндәр! Ысынында, һинең әле әйткәндәрең буш һүҙ, демагогия! - Диденко мыҫҡыллы йылмайҙы. - Почта начальнигының ире бар, тинең. Булһасы! Нина үҙе башлап ҡаш һикертте. Бейә булараҡ ул башлап кешәнәне. Ә айғырға ни ҡылырға был осраҡта? Ошо тәңгәлдә арҡыры ятҡанды ашатлап үтһәм, эшкинмәгәнгә иҫәпләнәсәкмен бит.

- Бына нимә, айғыр, тамам теңкәмә тейҙең, бар сығып кит. Был һөйләшеүҙән һуң, моғайын да, бөгөн төн һаташтырыр.

- Ҡыумай тор. Әйтеп бөтөрмәнем бит әле.

- Йә...

- Иртәгә төш мәлендә аулаҡта ҡалырға теләйбеҙ, француздар әйтмешләй тет-а-тет.

- Кәрәк икән, ҡалығыҙ әйҙә, тик мине ҡыҫылдырмағыҙ!

- Аулаҡ, тик ҡайҙа, бына мәсьәлә нисек ҡуйылған! Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, беҙгә һинең бүлмәң кәрәк. Оҙаҡҡа түгел. Бер сәғәткә генә. Үҙебеҙҙән һуң тулы тәртип ҡалдырабыҙ. Уныһын тулы гарантиялай алам. Һәм яҫтығың аҫтында әҙерәк аҡса. Аренда һәм ирекһеҙҙән бимазалаған өсөн. Тәм тойоп ҡалһаң, үҙең саҡырып торорһоң әле.

- Мин фәхиш, ә бүлмәм фәхешхана түгел!

- Килешә алманыҡ улайһа?

- Сыҡ, тим!

- Аҡ һәм пак булырға маташаһың, ә бит һин дә таҙанан түгел...

- Нисек? Аңлатыңҡырап һөйлә. - Көтөлмәгән белдереүгә ни тип яуап бирергә белмәй, юғалып ҡалдым.

- Слуквиндың бисәһен әйтәм, һылыу... Әллә ҡасандан һиҙеп йөрөйөм, уны ҡабып йоторҙай кимәлдә күҙәтә инең шул. Ә күптән түгел майор командировкала саҡта, увольнение, ҡала, мәҙәниәт һарайы, кафе һәм йәш ҡатынды үҙеңдең законлы бисәңдәй күреп оҙата барыу, ямғырҙан ышыҡланыу һылтауы менән фатирына кереү... Иҫ китмәле татлылыр, ә, йәш бит, дәртле лә күренә. Дауам итергәме?

- Һин нимә бытылдайһың?

- Нимә ишетәһең, шуны!

- Яна бисә түгел!

- Яҡын итеп Яна тип кенә ебәрәһең!

Диденконы эскә тартып алып, яғаһынан эләктерҙем:

- Янаны, бисә, тип ҡабатла тағы бер тапҡыр, ошо ерҙә быуып үлтерәм!

- Ебәр, тим, ебәр! - Карауат менән стена араһына ҡыҫылған, иҙеүе бөрөлгән Диденко тыбырсынып ҡулдарын болғаны. - Ебәр, ҡырағай мосолман, бел, беҙ ҙә яңғыҙ түгел...

- Ҡәбәхәт! Яна бисә түгел!

- Ҡаҙалып ҡына кит, килешәм, ҡыҙлығы ла алынмаған, ир-ат һәрмәүенән азат ҡыҙ! Ебәр тим, гимнастерканы йыртаһың!

- Ах, һеҙ көҙгө әтәстәр! - Көрмәкләшеүҙе ҡуйып, күҙ асып йомған арала тура ҡаттыҡ, салшайған кителдәрҙе, ҡайыштарҙы тәртипкә килтереп, соңҡа яғына шылған пилоткаларыбыҙҙы төҙәтә һалдыҡ. - Артыбыҙҙа Иван Иванович тора ине. Ул танауы осона шылған күҙлеген төҙәтеп кейеп, уҫал ҡарашын алмаш-тилмәш икебеҙгә йүнәлтте.

- Нимәне бүлешә алмай талашаһығыҙ? Өҫтәүенә дауалау учреждениеһында! Бына һиңә, әбекәйем, Юрьев көнө! - Лыков ғәжәпләнгәнендә ҡыҫтырырға яратҡан, йыш ҡабатлаған әйтемен әйтеп бот сапты.

- Бүлешер нәмәбеҙ юҡ, иптәш өлкән лейтенант, бөтәһе лә ал да гөл, һәйбәт! - Диденко рапорт биргәндәгеләй теҙҙе.

- Ә һин, старшина, ни әйтерһең?

- Андрейға ҡысынма йоҡҡан.

- Ҡысынмаһы ҡайһы тирәлә инде?

- Муйынында, ҡурылдай тапҡырында. Шуны тикшерә инем. Ҡамасауланығыҙ.

- Күренеүенсә, ауырыуҙы бик шәп ҡабул итәһең! Бына нимә, Диденко, хәҙер үк марш взводыңа! - Андрей һә тигәнсе күҙҙән дә юғалды. - Ә һин, Азамат, киске аштан проба алғандан һуң тиҙ ярҙам машинаһында беҙҙең фатирға барырбыҙ. Госпиталь аптекаһынан дүрт йәшник дарыуҙар алып ҡайттым. Грипп эпидемияһына бөгөндән дарыуҙар запаслай башларға кәрәк. Шуларҙы бында килтер ҙә иртәгә опись нигеҙендә Герасимовҡа тапшырырһың.

- Есть, иптәш өлкән лейтенант!

- Бар, шалопай, ҡалғаны хаҡында иртәгә һөйләшербеҙ. Ҡара һин уларҙы, яғаға яға килеп айпалашалар! - Лыков көрмәкләшеүебеҙҙе онота алмай һөйләнде. - Килеп инмәһәм, ары нимә ҡыланырҙар ине икән, ә?

Офицерҙар йорто янына барып туҡтаныҡ. Эңер. Тәҙрәләр ут алған мәл. Тау битләүендәге йорт ҡабырғаһы менән ҡалҡҡан ҡорт кәрәҙен хәтерләтә. Машинанан сыҡтыҡ. Иван Иванович юғарыға ҡараны:

- Слуквиндарҙа ла ут бар... - Бының менән ни әйтергә теләгәнен төшөнөп етмәнем, әммә тауышында хәүеф-хафа ауаздары сағылып ҡалыуын шәйләнем. Йәшниктәрҙе тиҙ арала юғары ҡаттан төшөрөп, машинаның салонында урынлаштырҙыҡ. Водителгә ҡараным:

- Ваня, дарыуҙарҙы бөгөнгә ҡайҙа урынлаштырыу хаҡында Иван Ивановичтан һорарға онотҡанмын. Һин тәмәке көйрәтеп ал, ә мин кире инеп белешеп сығайым.

- Тартмағанымды беләһегеҙ, иптәш старшина.

- Улайһа, саф һауа һула!

- Көнө буйы юлда, Каунастағы госпиталгә барып ҡайтҡансы саф һауа һуланыҡ. Арытты.

Хәлемә инергә теләмәгән һалдатҡа асыуым килә башланы:

- Арыһаң, ултырғысыңа аушайып ял ит. Оҙаҡламам. - Бая Лыков ҡараған тәҙрәне табып алып, яҡынса фатирҙың ҡайҙа икәнен тоҫмалланым да подъезға индем, баҫҡыстарҙы ашатөшә баҫып, юғарыға ынтылдым. "Нимә ҡыланам һуң әле? Күтәрелдем дә икән, ти. Ары нимә?"

Бына ул фатир. Ағас ишеккә һирпелгәс, урынымда тапандым. Ҡыңғырау төймәһенә үрелдем дә ирекһеҙҙән туҡтап ҡалдым. "Хәҙер майор килеп сығыр ҙа аптырап төбәләр: "Ҡараңғы төшкәс, беҙҙең фатирҙа ни ҡалған һиңә, һалдат?" "Янаның хәлен белергә килдем. Үткәндә ҡабул итеүҙә булғандан аҙаҡ ул часта бер тапҡыр ҙа күренмәне..." "Вон! Хәҙер үк күҙемдән юғал! Был ниндәй ояты҅ыҙлыҡ һәм әрһеҙлек, иртәгә таң менән кабинетымда бул! Там и разберемся!" Ошондайыраҡ һөйләшеү буласаҡ. Ихтыярымдан тыш ишек яңағын һыйпағандай иткәс, дөбөр-шатыр түбәнгә атылдым. Кабинаға инер алдынан юғарыға ҡараным: "Тәҙрәләрҙә ут үтә тоноҡ күренә, теге саҡтағы Янаның һүнеп барған ҡарашы һымаҡ..."

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

Лариса АБДУЛЛИНА

# ЙЫРҘАР МЕНӘН БЕҘ ИМЛӘЙБЕҘ КЕҮЕК

## Аҡылынан шашҡан заманды...



### Илем

Ҡосағыма алып иркәләрлек,
Яратып та туймаҫ баламдай,
Юл сатында хәйер һорашыусы
Дәрүиш һынлы ярлы бабамдай,

Әллә кемдәр килеп киткәндә лә,
Тупраҡ һынлы, һатмаҫ анамдай,
Төшөндә лә яуға сыҡҡан шанлы,
Мең ҡоралды гәзиз ағамдай -

Хәсрәттәре ташийылғалар булып,
Шауҙырлап та аҡҡан ил - ошо.
Нисек кенә һине имләргә тип
Ҡиблаларға ҡарап торошом.

"Балам!" тиеп үҙең өндәшәһең,
Мегаполис минә һүҙ ҡуша.
Ҡалыптарға һыймаҫ был ҡәлебем
Һыҙланыуҙан ҡала шул бушап!..

Йәнбикәнән Урал тыуған кеүек,
Шүлгән дә бит - унын балаһы.
Затлы тоҡомдарҙы зарға һалған
Бар ҡаяла Һатлыҡ араһы.

Унан һин дә, мин дә үттек,
Шашып көлгәндәрем хәтерҙә.
Һыны ҡатҡан Һынташтарҙың һаман
Эсе боша микән хәҙер ҙә?..

Юҡ, тауҙарға ҡарап зарланмайым,
Тауҙар бөркөт яһай шиғырҙан.
Доға булырҙайын яҙа белһән,
Ишектәрен аса шығырҙап.

Илем, ниндәй сүрәттәрең булды,
Лотфуллиндың етмәҫ киндере.
Күмелһән дә, тамам ерләнмәнең, -

Балам төҫөндә лә һин тере!
Анам төҫөндә лә һин тере!
Ағам төҫөндә лә һин тере! -
Шулар бит ул бабам ғүмере!..

Арыҫланға атланғанды белгәс,
Белгәс шонҡарҙарың барлығын,
Күтәрҙем мин хатта бүреләрҙәй,
Бер-береһен сәйнәү ярлығын...

Батырҙарҙан батыр тыуmaһа ла,
Һаҡлай ул ҡан намыҫ кимәлен.
Эпкәләйҙәр, Шариковтар бөгөн
Тапҡан зауыҡ тылҡыр әмәлен...

О, был хурлыҡ!
Түбәнселек!
Ғәрлегемдән ятып үлмәнем!
Һарҡынтылар ерҙең һүлен эсер,
Меҫкенләнә күрмә, Ил-йәнем!

### Ҡояшлы ҡала

Өфөләрҙән ҡояш сығалыр ул -
Яҡтылығы алыҫ тарала.
Кешеләрҙәй, нурлы сырайлы,
Булалыр ул тик сал ҡалалар.

Бында башҡорт артҡан һайын, гүйә,
Көләсләнә йөҙө ҡаланың.
Ихласлыҡҡа биҙәк булам тиеп,
Шул ҡаланы мин дә һайланым.

Бында башҡорт артҡанғалыр шулай
Бик йыш килә төрлө ҡунаҡтар.
Улар беҙгә байрам гәме өҫтәп,
Ҡанатланып ҡайтҡан һымаҡтар.

Туған телдең моңо иркәләгәс,
Урамдарҙың йөҙө яҡтыраҡ.
Майҙандар киң һәм аяҙ булғанға
Ҡурай моңо аҡты бик йыраҡ.

Уйсан убаларҙа - көләс сырай,
Һағышы ла яҡты ҡаланың.
Бер яратҡан бәндәһеләй, Өфө -
Яратҡанылыр ул Алланың.

Төндәренең унын үҙ нуры бар!
Гел йондоҙло кеүек күндәре!
Хыялымды ысын иткән ҡалам,
Аяҙлана һиндә өндәрем.

### Замана ағайҙары

Быуат тотоп торған бағаналар
Ауған саҡта ергә гөрһөлдәп,
Йөҙөп йөрөй ауыл, ҡалаларҙа
Хәмер һаҙлығында мең һөлдә.

"Яу ҡомары" - затлы был тауарға
Ихтыяж да бөгөн ҡалмағас,
Һыҙар һиптегеҙме рухи утҡа?
Киптегеҙме, гүйә, ҡыу ағас?

Ә ҡандағы гәскәр гәййәрлеге
Оран әйтеп яуға саҡыра.
Ағайҙарым, һеҙҙе заман түгел,
Шешә эсендәге ыу ҡыра.

Батырҙарҙың вариҫтары бөгөн
Сығып баҫҡан ҡоллоҡ сатына.
Атын һатып, кемдер рухын һатҡан,
Мөһөр һалып ҡайтҡан затына.

Ә Салауат йыйынында берәү
Телмәр тотто (уға һүҙ әрәм),
Тирмә баластарға килеп төштө:
"Батыр өсөн рюмка күтәрәм!"

Ҡемдең рухы шул саҡ сатнағандыр,
Йәшен телде күкте урталай.
- Батыр өсөн эсеү ярайһы ни?
Атаһына баҡты бер малай.

Әй, боронғо ҡурай, был быуат та
Ҡан тамыҙа һинең асылдан.
Ҡырылғандар юҡҡа сыҡҡанмы ни?
Баҫтырылған ҡәүем баҫылған?

Сәсте төптән ҡырып алһаң әгәр,
Ул ҡуйырып сыға ҡабаттан.
Ҡыйратылған халыҡ, әйтерһең дә,
Ҡаршыларға сыҡҡан яңы таң.

Тик ағайҙар ғына, аһ, ағайҙар...
Офоҡтарға етмәй ауалар.
Тын тарыға ошо һыҙланыуҙан,
Етмәй китә һулар һауалар.

Офоҡтарға маяҡ элгәнем бар,
Йәшәйем тип шунда еткәнсе.
Сараһыҙҙан ошо һағыштарым,
Шәхси көсһеҙлектән йән әсей.

Быуат тотоп торған бағаналар
Һеҙ инегеҙ илле, алтмыштар.
Берәм-берәм китеп олаҡтығыҙ,
Йәрҙәрегеҙ инрәй яртышар.

Быуат тотоп торған бағаналар,
Һеҙ түгелме алтмыш, етмештәр?
Әле бында, әле унда ята
Һеҙҙән тороп ҡалған буш биштәр.

Сабыр, сабыр тиеп күнә-күнә,
Халҡым рухы, һинә табындым!
Күңел хәнйәрҙәре ялтлауынан
Асылдары һүнер дошмандың!

### Күңел инженерҙары

Беҙ бейейбеҙ,
Моңло йыр һуҙабыҙ,
Шиғырҙарҙан һәйкәл ҡоябыҙ.
Әллә шуға ҡитғаларҙы нурлай
Һандуғаслы Урал - оябыҙ.

Бер ҡараһаң, хатта ғәжәп кеүек
Ямағанда берәү ыштанды,
Унын бурысы юҡ,
Кредиты юҡ -
Ул йөкһеҙ тип әйттем ышанып.

Нинә әле алыҫтағы астың
Түрәләре асыу ҡабарта?
Бар мохтаждар Баймаҡ, Дәүләкәндә -
Улар ҙа бит кәнфит ярата.

Ил сигенә барып баҫып ҡара -
Миллионлаған ҡараш төбәлгән.
Улар көтә биктәр сайҡалыуын -
Буштың аты күптән егелгән.

Донъя картинаһы үҙгәргәндә,
Юғалтҡанда юлын караптар,
Әлдә генә беҙҙең йырҙар бар ҙа,
Әлдә генә беҙҙең Урал бар.

Йыйындарҙы гиҙеп йөрөһән дә,
Тартыу көсө ашҡас саманан,
Рухы менән бәндә бында ҡайтып,
Яралары ерҙә ямаған.

Йырҙар менән беҙ имләйбеҙ кеүек
Аҡылынан шашҡан заманды.
Инженеры кеүек күңелдәрҙең,
Моңланабыҙ таңдан һаман да.

Теткеләнгән ҡитға,
Йыртыҡ Ватан,
Үткел елдәр йолҡа әләмде.
Аһ, илгенәм минең,
Ғәзиз Урал -
Һинең хәлең - минең хәлемдәй.

Донецкиҙа,
Ростов Донда, ана,
Күмәртәләп йәндәр ҡыйыла.
Фанилыҡта хаҡтар осҡоҙораҡ,
Берәм-берәм үлеү тыйыла?..

Ут сыҡһа ла,
Һыу баҫһа ла хәҙер
Йөҙәрләгән бәндә хушлаша.
- Тыныслыҡ тип илде һаҡлағайныҡ! -
Өндәшкәндәй олатай ут аша.

Ут ашай ҙа заман, хут, йот ашай,
Хәсрәт ташый быуат утлыҡтан
Һәм төбәлеп ҡарай Уралтауға:
Юҡмы шунда берәү йыр отҡан?!.

Әллә түлен, әллә кейем ямай -
Таңдан ғына һыҙылып моң аҡты!
Йырлаһындар,
Йәнде имләһендәр,
Сәнгелдәктән дәүер бәпләһендәр,
Заман кәйефтәрен көйләһендәр,
тиеп, Аллам,
Ялрттыңмы ошо халыҡты?!.

### Был халыҡ...

Һуғыш тураһында һүҙ сыҡҡанда,
Хәтеренә төшә батшаның -
Кемдәр менән илен һаҡланы ла,
Кем уғынан дошман ҡаҡшаны.

Батыршалар батыр булған өсөн,
Алдан барған өсөн Алдарҙар,
Өс тин маҡтау менән һатып алып,
Ихласлығы өсөн алдарҙармы?
Ғәййәрлеген барыбер танырҙар.

Ватан тойғоһо һуң кемдә булмай?
Бер уйлаһаң, тотош ер - Ватан.
Әйтеп ҡара башҡа ҡитғаларҙы
Гизмәгән тип алыҫ олатаң!

Бабам ҡалҡан милләт булған өсөн
Ҡылыс яһағандар ирҙәрҙән.
Бөгөн ҡылыстарға ихтыяж юҡ,
Ерҙә талаптар ҙа иҙелгән.

Хәйлә яуҙарында аҡыл - ҡорал,
Тотош милләт ергә ҡаҙалған.
Ҡусмәндәргә бөгөн ер тарайған?..
Төптән уйланиһән - ул ялған.

Кино ҡарағандай ҡарап торам
Милләттәрҙең бөйөк көрәшен.
Илһам менән бергә ошо илгә
Күктәр, бәлки, ирек әләшер?

Юҡ, зарланған,
ана, аҙ һанлылар,
Үҙен һанламаған зарланһын.
Әле һаман бөркөт,
Шиғыр сөйөп,
Йәм табыуҙан ғына был аһым.

Урмандарға сығып бер йырланым,
"Уралым!" тип урман ҡабатлай!
Ҡаяларға ҡарап йыр һуҙғайным,
"Ҡәүемем!" тип улар һүҙ башлай!
Йылғаларға карауым да етте,
Бышылданы улар "Милләтем!"
Вариҫтарым моңло йыр һуҙmaһа,
Тороп ҡалыр ерем мең етем!..

Яуға сабыр алда
Атлы гәскәр
Һөйләгәндәр Салауатты.
"Урал" тыңлап
Зиһен сарлағандыр
Эшләүселәр самолетты?

Саҡматаштар тик Уралда микән,
Бында ғына микән батырҙар?
Беҙ янабыҙ Йыһан усағында,
Дөрләп яна беҙҙең йән-йырҙар!..

Быңа тағы кемдер иҫкә ала
Яугирҙарын ошо халыҡтың?
Үрт тығыла һөйәк тулы ергә,
Ут ағыла тауҙа ярыҡтан...

### Ожмах халҡы

Теге донъя әгәр ысын булһа,
Ысын булһа әгәр йәннәте,
Иң түрендә микән ожмахтарҙың
Шәһит киткән башҡорт милләте?

Улар унда ниҙәр ҡыла икән?
Ғәййәрлеккә бармы ихтыяж?
Башҡорт ирҙәренең башындамы
Саф намыҫлы тигән алтын таж?

Улар унда бары бергә микән
Ҡараһаҡал,
Алдар,
Салауат?
Бәлки, улар беҙгә доға ҡылып,
Уҡыйҙарҙыр унда мең аят?

Шайморатов генералдың, бәлки,
Сәсен тарағандыр хур ҡыҙы?
Уралды бит ожмах кеүек, тиҙәр,
Унда
Ата микән таңдар нур һыҙып?

Ожмахтамы икән Ғилман хәҙрәт?
Йәннәттәме шағир Эрәйес?
Бойоҡ кәйефтәрен күтәрергә
Таптылармы икән бер кәйеф?

Шәһит сүрәләрен белмәйем мин,
Әммә беләм һөйөү аятын!
Мин үҙемдә әле белмәгәндә
Күктәр йәнгә һалып ятлатты.

Хәтеремдән улар сыҡҡаны юҡ,
Йөрәгемә төшһә хәтерем,
Аҡ йәнемә баҫып доға ҡылам
Бир, тип, Хоҙай, ғазап әжерен!

Әллә нимәләр мин көтмәһәм дә,
Өмөт итергә бит хаҡым бар.
Күренерме минә Мәңгелектә
Батыр рухлы ғорур ағайҙар?

Теге донъя әгәр ысын булһа,
Хужалары бармы, Тәгәләм?
Был намыҫсан заттар гәмәленән
Сафланырмы был ер,
Был ғаләм?

✓ Көҙгө көндәрҙә һалҡын тейҙереп ауырыуҙан ҡурҡһағыҙ, иртәрәк йоҡларға ятығыҙ, ти Британия ғалимдары. Улар 22 меңдән ашыу кешене тикшереп, йоҡо туймай йөрөгән саҡта һалҡын тейҙереү мөмкинлеге лә артыуын асыҡлаған.



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺЫУЫҠ МИҘГЕЛДӘ...

## күберәк йоҡлағыҙ

■ Сәйҙе, ҡәһүәне күп эсһәгеҙ ҙә, ҡайнар итеп эсеү ғәҙәтен ташлағыҙ, сөнки ҡайнар эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә, ти белгестәр. Был ҡыҙыл үңәс яман шешенә килтереүе бар. Тикшеренеүҙәр бер юлы бер нисә илдә - Ҡытайҙа, Иранда, Төркиәлә, Көньяҡ Америкала барған. "Ҡайнар" тип Цельсий буйынса 65 градустан юғарыраҡ температура иҫәпләнә. Күпселек илдәрҙә ҡәһүә һәм мате кеүек эсемлектәрҙе ҡайнар көйөнсә эсәләр. Шул уҡ ваҡытта, ҡәһүә лә, мате ла канцероген эсемлектәргә инмәй. "Эсемлектәрҙең составы түгел, ә уларҙың температураһы хәүеф тыуҙыра", - ти белгестәр. Ҡыҙыл үңәс яман шеше онкологик ауырыуҙар араһында донъяла - һигеҙенсе һәм үлем осрағы менән тамамланыу йәһәтенән беренсе урында тора. Шуға ла яһалған сәй дүрт минут тирәһе торорға, тимәк, һыуынырға тейеш. Шулай уҡ һөт һалып эсеү ҙә яҡшы.

■ Көҙгө көндәрҙә һалҡын тейҙереп ауырыуҙан ҡурҡһағыҙ, иртәрәк йоҡларға ятығыҙ, ти Британия ғалимдары. Улар 22 меңдән ашыу кешене тикшереп, йоҡо туймай йөрөгән саҡта һалҡын тейҙереү мөмкинлеге лә артыуын асыҡлаған. Тәүлегенә 5 сәғәт кенә йоҡлаусылар юғары хәүеф төркөмөндә. Уларҙың иммунитеты инфекцияларға ҡаршы насар көрәшә. Был төркөмдәгеләрҙә тамаҡ-тын юлдары инфекциялары сирҙәре 50 процентҡа күберәк осрай. Етмәһә уларға ҡабаттан ауырыу эләктереү хәүефе лә янай. Бындай күңелһеҙлек булмаһын өсөн ете сәғәт йоҡларға кәрәк. Иммунитетты нығытыуҙа йоҡонон өлөшө ифрат ҙур.

■ "Көнөнә бер алма аша һәм һинә табип ярҙамы кәрәк булмаясаҡ", - тиҙәр. Ысынлап та, емеш-еләктә витаминдар, минералдар, антиоксиданттар, күҙәнәклек, һыу күп. Әммә емеш-еләктәге фруктоза сәләмәтлеккә насар тәьҫир итеүе бар. Фруктоза - ул емеш һәм еләктәр, шулай уҡ ҡайһы бер йәшелсә, мәҫәлән, татлы борос, томат составындағы шәкәр. Быға тиклем фруктоза кеше организмы тарафынан инсулин тәьҫиренән тыш үҙләштерелә, тигән фекер йәшәй ине. Бактиһәң, күпмелер ваҡыттан һуң ул глюкозаға әйләнә икән, ә глюкоза үҙләштерелһен өсөн инсулин кәрәк. Әгәр ҙә инсулин бүленеп сығыу менән тотҡарлыҡтар булһа, ул үҙләштерелмәй һәм шәкәр кимәле күтәрелә. Ҙур булмаған күләмдә фруктозаның, йәғни, емеш-еләктең зыяны юҡ. Етмәһә, ул кариес һәм ауыҙ ҡыуышлығының башҡа төрлө ялҡынһыныу процестарын булдырмай. Ябай шәкәрҙең кире яҡтары күп, ул юғары калориялы. Фруктозала иһә калориялар юғары түгел, ул глюкозаға ҡарағанда өс тапҡыр, сахарозаға ҡарағанда ике тапҡыр татлыраҡ. Бөгөн фруктозаны төрлө соустарға, джемдарға, газлы эсемлектәргә, ярымфабрикаттарға, икмәккә, тәм-томға өҫтәйҙәр. Ул яҡшы консервант, ризыҡтың тәҫен һаҡлай. Магазиндарҙа һатылған һутта ла ул күп, мәҫәлән, бер стакан һутта яҡынса биш ҡалаҡ фруктоза була. Шуға ла табиптар һутты көнөнә 150 мл ғына эсергә кәңәш итә. Фруктоза майға әйләнә. Ул бауырҙа эшкәртелә, әгәр ҙә ул күбәйеп китһә, бауыр уны майға әйләндереп, триглицерид итеп ҡанға ташлай, был матдә күҙәнәктәр өсөн төп энергия сығанағы булып тора. Тик ул саманан ашып китһә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефе арта. Көнөнә 50 грамм фруктоза ҡабул итергә мөмкин. Йөҙөм, финик, ҡарбуз, һары сейә, хөрмәлә ул күп. Ананас, грейпфрут, абрикос, мүк еләгендә фруктоза иң аҙы.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ



# ВАҠЫТТЫ ҠУЛДАН ЫСҠЫНДЫРМАҒЫҘ!

**Октябрь - Бөтә донъя күкрәк биҙе яман шешен профилактикалау айлығы. Сөнки донъя буйынса ғына түгел, Рәсәй, Башҡортостан буйынса ҡарағанда ла бөгөн был сир үпкә рагынан ҡала икенсе-өсөнсө урында тора. Былтыр, мәҫәлән, республикала 1574 ҡатын-ҡыҙ сирләгән. Иң аламаһы - уларҙың алтынан бер өлөшөндә сир 3-4-се стадияла асыҡланған. Ә бит ваҡытында үҙ сәләмәтлегенә иғтибарлы булғанда, был күренешкә юл ҡуймаҫҡа ла мөмкин булыр ине. Быңың өсөн нимәләрҙе белергә кәрәк? Бөгөн ошо һорауға баш ҡаланың 44-се поликлиникаһы маммолог-онкологы, юғары категориялы табиб-хирург Гөлнур НИГМАНОВА яуап бирә.**

**➔ Гөлнур Хәмзиевна, бөгөн күкрәк биҙе һау-сәләмәт ҡатын-ҡыҙ бармы икән?**

- Моғайын, юҡтыр, сөнки һәр кемдә тигәндәй мастопатия күҙәтелә. Һәм уның барлыҡҡа килеүенә көйәләнеүҙәр, стрестар, дөрөҫ туҡланмау, гормональ баланстың боҙолоуы ла йоғонто яһай. Ни өсөн, гормональ дисбаланс, тинем, сөнки һөт биҙҙәре туранан-тура түллек биҙенең эшмәкәрлегенә бәйләнгән. Ҡатын-ҡыҙ йөккә уҙһа, түллек биҙе һөт биҙҙәренә сигнал ебәрә һәм улар ҙурая. Әгәр күкрәкте ҡараһаҡ, ул 10-20 һөт юлынан, ваҡ ҡына өлөштәрҙән һәм альвеолаларҙан тора, ҡан тамырҙарына һәм лимфаларға бай. Шуға күрә, диагностика ваҡытында тап ошо лимфаларға иғтибар бирелә лә инде. Бында тағы шуны әйтеп китер инем: күкрәк - тотоп ҡарап билдәләп була торған ағза, уға ФГС та, башҡа эске ағзаларҙы тикшергән кеүек ҡатмарлы тикшереүҙәр ҙә талап ителмәй. Шуға ҡарамаҫтан, ҡатын-ҡыҙҙың үҙ сәләмәтлегенә битарафлығы аптырата.

**➔ Тимерҙе ҡыҙыуында һуғып, ошо урында нисек үҙ-үҙеңә диагностика үткәрергә икәнен дә аңлатып китһәгеҙ...**

- Һәр ҡатын-ҡыҙ үҙен ай һайын тикшереп торорға тейеш. Быңың өсөн көҙгө ҡаршыһына баҫып, ҡулдарҙы күтәрергә һәм лимфа төйөндәре зурайМағанмы икәнлеген ҡарарға кәрәк. Шулай уҡ башҡа үҙгәрештәр юҡмы, тирәнең төҫө үҙгәрмәгәнме, түш осоноң формаһы нисек, уны һығып ҡарағанда бүлендек сыҡмаймы икәнлеген дә белеү мөһим. Әгәр бүлендек бар һәм ул ҡанлы икән, был мотлаҡ табипҡа күренеү өсөн сәбәп булып тора. Шулай уҡ ҡулыҡ төйөн тойһа ла белгескә мөрәжәғәт итеүҙе һуҙырға ярамай. Тиренең төҫө үҙгәрһә, йәғни ул лимон тышы кеүек булып китһә лә, түш осо ғәҙәттәгенән тулыраҡ булһа йәки йыйырсыҡланып торһа ла хәүефләнергә урын бар.

**➔ Күкрәк-һөт биҙҙәрендә ниндәй шештәр була?**

- Ҡайһы берҙә ҡатын-ҡыҙҙар ҡабул итеүгә килә лә, миндә киста, тип белдерә. Әгәр ул күләме буйынса бер сантиметрҙан дә кәмерәк икән, был нормаль күренеш. Ҙур булһа, пункция эшләнә. 3-4 сантиметр ҙурлыҡтағы кисталарҙан бер шприц шыйыҡлыҡ һурҙырып алабыҙ. Әммә кистаны ла мотлаҡ дауаларға кәрәк. Фибро-кистоз мастопатия булһа, тоташтырыусы туҡымалар баҫып китә һәм тотоп ҡарағанда резина теннис тубы кеүек шеш һиҙелә. Фиброаденома булғанда тығыҙ туҡыма зыянлай. Шулай уҡ абцесс процесы ла осрай. Был ваҡытта инде түштең эсендә эрен йыйыла. Шуға күрә йәш әсәләргә баланы нисек имеҙә башлауҙы ла, имсәк ташлатыуҙы ла нығыш, ентекле өйрәнергә, белергә кәрәк. Ҡайһы бер ваҡытта киста ла эренләй, был осраҡта ла абцесс ваҡытындағы кеүек үк температура күтәрелә, тире төҫө үҙгәрә, түш шешә.

Түштә ҡаты шеш булһа - был инде яман шеш, тигән һүҙ. Структураһы буйынса ул өс төргә бүленә: түбән дифференциялы, урта һәм юғары. Мәғлүм булыуынса, организмдың нормаль күҙәнәге билдәле бер ваҡыттан һуң үрсей, бүленә. Ә яман шеш күҙәнәге туҡтауһыҙ бүленә. Әгәр башта уның нисек итеп бүленергә әҙерләнгәнен күрергә мөмкин булһа, был юғары дифференциялы осор һәм уңышлы осор тип һанала, сөнки процесты туҡтатырға мөмкин. Ә инде урта дифференциялы булғанда, процесты туҡтатыу мөмкин түгел, түбән ваҡытта инде цитологтар хатта микроскоп аҫтында күҙәнәктәрҙең ни тиклем тиҙ бүленеүен күреп өлгөрә алмай.

**➔ Метастазалар, ғәҙәттә, лимфа төйөндәре буйлап тарала, күкрәктәге яман шеш үҙен ниндәй урындарҙа һиҙҙереүе мөмкин?**

- Ысынлап та, күптәр лимфа төйөндәренә бигүк иғтибар бирмәй. Үкенескә күрә, ауырыуын аҙҙырып ебәргән осраҡ менән дә килеүселәр юҡ түгел. Ҡайһы бер пациенттарҙың лимфа төйөндәрен беҙ сатында ла, муйынында ла таптыҡ. Быны нимә өсөн әйтәм, лимфа төйөнө шеш сығанағынан алыҫта икән, тимәк, барыһы ла яҡшы, тип уйлау төптә хата: күкрәк биҙенән лимфа төйөндәре организм буйлап тарала. Әгәр күкрәкте квадранттарға бүлһәк, уның иң хәүефһеҙе булып эске аҫҡы квадрант тора, сөнки унда лимфалар икенсерәк. Өҫкө тышҡы квадрант иһә иң хәүефлеһе, сөнки унда яман шеш булһа, ул ҡултыҡ аҫтындағы лимфа төйөнөнә метастаза бирә.

**➔ Иң мөһиме, иң ҡәҙерлеһе - ғүмер, тиһәк тә, түшен алдырыу ҡатын-ҡыҙ өсөн ҙур фажиғә...**

- Ябай поликлиникала эшләһәм дә, ҡабул итеүгә килгән пациенттарым араһында операциянан һуң пластика эшләтеүселәр ҙә бар. Элек бындай операцияларҙы бары тик Германияла, Израилдә генә эшләһәләр, хәҙер инде беҙҙең Республика онкодиспансерында ла ошондай процедура үткәреү мөмкинлеге бар. Әлбиттә, пластиканан һуң ҡатын-ҡыҙ үҙен ниндәйҙер кимәлдә психологик яҡтан уңайлыраҡ тоя. Ә ҡайһы берәүҙәр бөтөнләй аҡылын юйыр сиккә етә: ғаиләлә лә, көндәлек тормошта ла агрессивҡа әйләнә, бөтөн бәләләрҙә башҡаларҙы, шул иҫәптән табиптарҙы ғәйепләй. Бәгзеләр, киреһенсә, ауырлыҡтарҙы, һынауҙарҙы ҙур сыҙамлыҡ менән үткәрә һәм үҙҙәренең ятраҡтан эше менән булыша. Бында, әлбиттә, ғаилә ағзаларының, туғандарының, яҡындарының ярҙамы, уны аңлауы ҙур әһәмиәткә эйә. Бөгөн ҡулланылған реабилитация ысулдары ла роль уйнай. Мөмкинлектән файҙаланып, шуны ла әйтеп китергә кәрәк, ҡайһы бер осраҡтарҙа операциянан һуң лимфостаз күҙәтелә. Лимфаның бер өлөшө алып ташланғас, уның юлы ҡаплана һәм кешенең һығып торған әйбер кейеүе, сумка аҫыуы, сәғәт йәки балдаҡ тағыуы ла лимфостаз барлыҡҡа килеүенә сәбәп булыры мөмкин. Дәрәжәһе буйынса ул төрлө, һәм хәҙер махсус программа буйынса беҙ шундай пациенттарға бушлай компрессион кейем бирәбеҙ. Ул ауырыуҙың хәлен яҡшыртырға ярҙам итә.

**➔ Күкрәк яман шеше ни сәбәпле барлыҡҡа килеүе ихтимал?**

- Урамда бик йыш ҡулына һыра тотҡан ҡыҙҙарҙы күрәһегеҙҙер. Һырала фитоэстрогендар бар һәм һыра эскән ҡыҙ хәүеф төркөмөнә инә. Шулай уҡ һимереү ҙә яҡшыға алып килмәй. Май күҙәнәктәре эстрогендарҙы тупларға ярата. Организмда тупланған эстрогендар хәүеф тыуҙыра ла инде. Шуға күрә, балаларҙы бәләкәй ваҡытта көсләп ашатырға ярамай, сөнки ашау ғәҙәте тап шул бала саҡта һалына. Шулай уҡ тәмәке тартыусы ҡыҙҙар ҙа үҙҙәренең хәүеф төркөмөнә инеүен уйламайҙыр ине. Онкосирҙәрҙең исемлегенә ингән барлыҡ сирҙәр ҙә тәмәке тартыуға бәйле, тиергә мөмкин.

Йәш ҡатын-ҡыҙ ҡояшта янған тирене матурлыҡ билдәһе итеп ҡабул итә. Онколог булараҡ, быға ҡырҡа ҡаршымын, сөнки ҡояш радиацияһы тире рағы барлыҡҡа килеү ихтималлығын арттыра. Ә инде топлес ҡояшта яныу - үҙ сәләмәтлегенә ҡарата иң ҙур енәйәт тиер инем. Ҡояш радиацияһы күкрәк яман шешен барлыҡҡа килтереүсе факторҙарҙың береһе. Тағы бер фактор - бала табыу мотлаҡ алдан ентекле уйланылған булырға тейеш. Әгәр был мәлде кисектерергә теләһәгеҙ, мотлаҡ гинекологҡа барып, үҙегеҙгә тап килгән һаҡланыу препаратын ҡулланыу яҡшыраҡ буласаҡ. Шулай уҡ, нәҫелегеҙҙә күкрәк яман шеше менән сирләгән туғандарығыҙ булһа, тикшерелеү зыян итмәҫ. Табиптар үҙ-ара ябайлаштырып Берсей1 (BRSA1), Берсей2 (BRSA2) тип атап йөрөткән тикшереүҙәрҙе хәҙер түләүле поликлиникаларҙа эшләтеп була. Профилактика өсөн 40 йәшкә тиклем УЗИ, артабан инде маммография үтеп торорға кәрәк.

**➔ Әгәр табипҡа ваҡытында мөрәжәғәт иткәндә, был яман сирҙе лә еңергә мөмкин, тигәндә күп ишетергә тура килә...**

- Бында баҫым тап "ваҡытында" тигән һүҙгә яһала ла инде. Иң мөһиме - ваҡытты ҡулдан ысҡындырмау. Әлбиттә, медицина ла ярҙам итә алмаҫтай дәрәжәгә тиклем һүҙып йөрөгәндә бары тик могжизаға генә ышанырға ҡала. Әле минең бер пациентым 4-се стадия менән өсөнсө йыл йөрөй. 21 көн һайын инъекция эшләп торабыҙ. Шундай хәлдә ҡалмаҫ өсөн даими рәүештә үҙегеҙгә диагностика үткәреп, табиптарға ваҡытында мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ә инде сирҙе алдан асыҡлай алмаһағыҙ, иң мөһиме, ҡул һелтәп ҡуймағыҙ һәм төшөнкөлөккә бирелмәгеҙ. Сөнки Әбүғәлисина әйтеүенсә, беҙ өсәү: сирегеҙ, һеҙ һәм табип. Ҡайһы яҡты һайлайһығыҙ, шул яҡ еңә. Барлыҡ мөмкинлектәрҙе ҡулланып ҡарамай тороп, еңелмәгеҙ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әңгәмәләште.**

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Кеше яҙмышы

Кеше яҙмышы алдан уҡ билдәле һәм тыуған ваҡытта уҡ уның маңлайына яҙыулы була, тиҙәр. Ысынлап та, үлгән кешенең баш һөйәген күргәндәр ундағы бик күп һырҙарҙы шәйләгәне барҙыр. Ул һырҙар бик боронғо, беҙгә билдәле булмаған хәрефтәр менән, беҙгә аңлашылмаған телдә кешенең яҙмышы тураһындағы яҙыуҙар ул, тиҙәр. Шуға күрә халыҡ телендә "яҙмыштан уҙмыш юҡ", "маңлайына шулай яҙылғандыр" тигән әйтемдәр ошо көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған.

Ысынлап та, кеше яҙмышы алдан уҡ билдәле булыуына башҡорт халҡы бик ышанған. Ҡайһы бер кешеләр бәлә-ҡазаға, бәхетһеҙлеккә осраһа, икенселәре бәхетле, мул тормошта йәшәһә, "уларҙың яҙмыштары шулайҙыр", "маңлайҙарына шулай яҙылғандыр", тип әйтә торған булғандар. Элегерәк башҡорт ғаиләләренең береһендә ир, икенсеһендә ҡыҙ бала бер үк мәлдә тыуһа, ул ғаилә хужалары үҙ-ара дуҫлашып, балалары үҫеп еткәс, уларҙы ҡауыштырып, ҡоҙа-ҡоҙағый буласаҡтарының билдәһе итеп, һырға һабағы биргәндәр. Күп осраҡта ул ғаиләләр биргән һүҙҙәренә тоғро булып, үҫеп еткән балаларын йәрәштергәндәр, ҡоҙа-ҡоҙағый булып, татыу ғына йәшәгәндәр.

Шул ваҡыттарҙа кеше яҙмышы алдан уҡ билдәле булыуына, маңлайына яҙыулы булыуына ышанмаусы бер кеше йәшәгән. Ул: "Кешенең яҙмышын үҙгәртеп була, уны кеше үҙе лә үҙгәртә ала, яҙмыштан башҡа ла йәшәп була", - тип, башҡаларға аңлатырға тырышҡан. Кешеләр уға ышанмаған, бушты һөйләй, тип, яратмаған. Кешеләрҙең үҙенән ситләшеүен ауыр кисергән теге әҙәм үҙ фекеренең дөрөҫлөгөн иҫбатларға уйлаған. Бер ваҡыт, бәләкәй саҡтарында уҡ һырға һабаҡтары бирешкән, әле үҫеп етеп кенә килгән йәштәрҙең яҙмышын боҙоу ниәте менән, кешеләргә һиҙҙермәй генә ҡыҙ баланы урлап китә. Уны ҡалын урмандағы ер ҡыуышлығына йәшерә. Ҡыуышлыҡты кеше йәшәрлек итеп ҡулайлаштыра. Ишеккә бик ҡатмарлы, еңел асылмаҫлыҡ бик ҡуя. Аҙыҡ-түлек ташыу өсөн урман төпкөлдәре аша йәшерен һуҡмаҡ һала. Шулай ҡыҙҙы йәшереп аҫырай, аҙыҡ-түлеген дә килтереп тора. Ҡыҙ бала юғалғас, бик ҡайғыралар: йә һыуға батҡандыр, йә аҙашып, ҡош-ҡортҡа аҙыҡ булғандыр, тип, төрлөсә фаразлайҙар. Йәлап ҡайғы һүрелә, кешеләр ҡыҙҙы онота башлай. Ҡыҙҙың йәрәшелгән егете генә уны эҙләүҙе дауам итә, башҡа ҡыҙҙарға күҙ ҙә һалмай.

Ул үҫеп етеп, һунарға йөрөй башлай, үҙенә йәрәшелгән ҡыҙҙың һөйәктәрен булһа ла табырға тип йөрөй торғас, ҡалын урман төпкөлөнә барып сыға. Урман таныш булмағанға күрә, ул бында тиҙ аҙаша. Юл тапмай, байтаҡ ерҙәр гиҙгәндән һуң, беленер-беленмәҫ кенә һуҡмаҡҡа килеп төшә. Һуҡмаҡ ҡасан булһа ла оло юлға сығарасағына өмөтләнеп, уның буйлап барыуын дауам итә. Шулай күп ер үткәс, тыштан бикле ер аҫты ҡыуышлығына килеп сыға. Бикте асып, эскә инһә, ни күҙе менән күрһен, үҙе эҙләгән һөйөклөһө ултыра. Ҡыҙ уға барыһын да һөйләп бирә. Улар йыйынып, ҡайтыу яғына сығалар, әммә һуҡмаҡ бер үк юл башына килә лә сыға, килә лә сыға. Ҡыҙҙың әйтеүе буйынса, уны урлаған кеше оҙаҡламай килергә тейеш була. Егет тышҡы бикте нәҡ элекке кеүек эләктереп, урман эсенә инеп йәшенә лә, күҙәтә башлай. Күп тә тормай, аҙыҡ-түлек артмаҡлап, теге кеше килеп етә. Аҙығын ҡалдырып, ишекте бикләй ҙә, ҡайтып китә. Егет ҡыҙҙы алып сыҡҡансы, теге кешене күҙҙән яҙҙыралар. Юл таба алмағас, ахыры, килтерелгән аҙыҡ менән тукланып, бергә йәшәй башлайҙар. Егет менән ҡыҙ ер аҫтында бер йыл тирәһе йәшәүгә, уларҙың ир балалары донъяға килә.

Берҙән-бер көндө ҡыуыштары янында кешеләр һөйләшкән тауыш ишетәләр. Егет уларға ишекте асырға өйрәтә. Мәшәҡәтләнә торғас, ишекте асалар һәм хайран ҡалалар: алдарында байтаҡ йыл элек юғалған ҡыҙ һәм бер йыл элек ғәйеп булған егет, ауылдаштары, баҫып тора. Йәштәр барыһын да һөйләп бирә. Һунарсылар йәштәр эргәһендә төн үткәреп, урман төпкөлөнән сығып, ауылға ҡайта алһалар, йәштәрҙе лә килеп алырға вәғәҙә биреп, юлға сығалар.

Байтаҡ ваҡыт урман ҡыҙырғандан һуң, көскә юл табып, өйҙәренә ҡайтып етә һунарсылар. Ауылға ҡайтҡас, урман төпкөлөндә ни күргәндәрен ҡыҙҙың һәм егеттең ата-әсәһенә һөйләп бирәләр. Шунан был ике һунарсы ҡыҙҙы урлаған теге кеше янына барып, яҙмышты үҙгәртеп булмауы тураһында юрый ғына һүҙ ҡуҙғаталар. Теге кеше үҙ һүҙен бирмәй, яҙмышты теләһә нисек үҙгәртә алыуы менән маҡтана. Һунарсылар: "Һин йәшергән ҡыҙ, бәлки, күптән инде йәрәшелгән егете менән ҡауышҡандыр?" - тип, һаман уны сәмләндерәләр. Бәхәстең ҡуләмен билдәләп, ҡул һуғышалар.

Иртәгәһенә өсәүләп юлға сығалар. Ҡыуыштан ир менән ҡатын һәм уларҙың улдары килеп сыҡҡас, уларҙың яҙмышын үҙгәртергә маташҡан ир телһеҙ ҡала... Һунарсылар ҙа, "яҙмыштан уҙмыш юҡ" тигән хәҡиҡәт тә бәхәстә еңә.

**Рауил АСЫҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# ЙӘШЛЕК СЕРҘӘРЕ

**Йылдар һалған һырҙар һәр ҡатын-ҡыҙҙы борсоуға ҡалдыра. Гүзәл заттар йәш өҫтәлеүенә ҡарамаҫтан, элекке һылыулығын һаҡлап ҡалырға теләй. Йәшлек эликсиры - ул бер генә тамсы шифалы һыу түгел, ә һәр ҡатын-ҡыҙҙың үҙенә көн дә иғтибар бүлеп, матурлығын һаҡлау һөҙөмтәһе. Йәш көйөнсә ҡалырға ярҙам иткән бер нисә ысул менән таныштырабыҙ.**



Бит тиреһенең торошон яҡшыртыу өсөн 100 мл лимон һуты, 200 г бал, 50 г зәйтүн майын ҡушып бутарға һәм ас ҡарынлай бер балғалаҡ эсергә. Был эликсир шулай уҡ йыйырсыҡтарҙы бөтөрә, ашҡаҙан эшен көйләргә һәм хатта хәтерҙе лә яҡшыртырға ярҙам итә. Тағы ла биттә йыйырсыҡтар барлыҡҡа килмәһен өсөн уны дымландырғыс, бөтә кәрәкле витаминдар менән тәьмин итеүсе битлек эшләргә мөмкин. Был битлекте яһарҙан алда битте скраб ярҙамында таҙартырға кәрәк. Шунан 1 ҡалаҡ аҡбалсыҡ, 1 балғалаҡ глицерин, 1 балғалаҡ һырғанаҡ майы һәм 1 балғалаҡ һыу ҡушып, яҡшылап бутарға. Килеп сыҡҡан ҡатышманы биткә тигеҙ итеп һөртөп, 15 минут торорға һәм йылы һыу менән сайып төшерергә. Һуңынан бит өсөн тәғәйенләнгән крем һөртөп ҡуйыу мөһим. Битлекте аҙнаһына бер-ике тапҡыр яһарға була. Ул бит тиреһе өсөн бик файҙалы һәм ҡушымталарын һәр дарыуханала һатып алырға мөмкин.

Һәр ҡатын-ҡыҙ оҙон, ҡалын сәс толомона эйә булырға теләй. Был хыялды тормошҡа ашырыу өсөн дарыуханан 1 процентлы никотин кислотаһы һатып алырға кәрәк. Һәр кис һайын бер-ике ампула кислотаны сәс төбөнә һөртөргә, ләкин сәстәр ҡоро булырға тейеш. Бер ай дауамында ошо рәүешле сәстәрҙе дауалағандан һуң, бер айға туҡтап торғас ҡына кире дауам итергә мөмкин. Никотин кислотаһы сәстәрҙе майландырмай, ул ҡан тамырҙарын киңәйтә һәм ҡан әйләнешен яҡшыртыу сәбәпле, сәс шәп үҫә, ҡойолмай башлай. Никотин кислотаһын бик һаҡ ҡына ҡулланырға кәрәк, сөнки ул бит тиреһенә эләкһә - тире ҡыҙарып сыға. Был ҡыҙыллыҡ 40 минуттан һуң ғына үтә. Шулай уҡ ҡан баҫымы юғары булған кешеләргә был рәүешле дауаланыу ҡәтғи тыйыла.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Тормошоғоҙға күҙ һалығыҙ! Нимә күрәһегеҙ? Мөмкинлектәр, мөхәббәт, бәхет, уңыш һәм уйлағандарҙың тормошҡа ашыуымы? Йәки уйығыҙҙа тирә-яғығыҙҙа сикләүсе кәртәләр ҡуяһығыҙмы? Шулай икән, үҙегеҙҙе сикләүҙәрегеҙҙең тотҡоно итеп иғлан итәһегеҙ һәм тотҡон яһайһығыҙ. Азат булырға ныҡлы ҡарар ҡабул итергә һәм "һәр саҡ арыған булыуҙан арыным" тип белдерергә генә кәрәк, азат булыу өсөн тәүге аҙымды яһарға стимул барлыҡҡа киләсәк. Тотҡонлоҡтан сыҡҡығыҙ килмәгәндә, әле булған урында оҙаҡ тотҡарланасаҡһығыҙ. Иң ҡыҙығы шунда - сикләүҙәрҙе бөтөрөү өсөн әллә ниндәй юғары һәләттәргә эйә булырға ла кәрәкмәй. Ысынбарлыҡта "бөйөк" кеше тигән билдәләмә юҡ. "Бөйөк" эштәр атҡарырға ҡарар иткән "ябай" кешеләр генә бар. Улар үҙҙәренең сикһеҙ ҡеүәтен иреккә сығарып, азат булырға теләүселәр. Һәр көн ауырлыҡтар һәм проблемалар менән күҙгә-күҙ осраша, үҙҙәренең изге хыялын тормошҡа ашырғанға тиклем уларҙы бер-бер артлы еңәләр, уңышһыҙлығында башҡаларҙы ғәйепләрҙән алда, хәл-торошто үҙгәртергә тырышалар. Шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: шәхси азатлыҡ һәм изге хыялдар һеҙҙе көтөп тора, әммә тәүҙә һеҙгә уларға хоҡуҡтарығыҙҙы белдерергә кәрәк!

### Уңышһыҙлыҡтар менән нисек дуҫлашырға?

Уңышһыҙлыҡ - үсештең айырылғыһыҙ өлөшө. Шуға ҡарамаҫтан, ул күпселек кешелә хәүеф тыуҙыра. Бала саҡта был беҙҙе ныҡ борсомай. Һырғалаҡта шыуып, нисә тапҡыр ҡолап, нисә тапҡыр тәнегеҙ күгәргәнен иҫләйһегеҙме? Ләкин һеҙ ҡабат тороп баҫып, бер ни булмағандай артабан шыуып китә инегеҙ. Һәр ҡолаған һайын үҙегеҙҙе йүнһеҙ тип әрләнегеҙме? Әлбиттә, юҡ! Бала саҡта өйрәнгән нәмәләрҙе эшләп ҡарау һәм хаталар аша үҙләштергәнһегеҙ. Ҡайһы бер осраҡта уңыш юлдаш булған, ниндәйҙер мәлдә - уңышһыҙлыҡ. Һуңғы осраҡта, һеҙ теләгән нәмә килеп сыҡҡансы тырышҡанһығыҙ. Ләкин бер ваҡытта ла үҙегеҙҙе ғәйепләмәгәнһегеҙ һәм әрләмәгәнһегеҙ бит. Уңышһыҙлыҡ тәбиғи үҫеш элементы тип ҡабул ителгән. Үкенескә күрә, ниндәйҙер ваҡытта башығыҙға сәйер идея килә: йәнәһе лә, уңышһыҙлыҡ ниндәйҙер дөрөҫ булмаған нәмә. Һөҙөмтәлә, уңышһыҙлыҡ кисерһәм, башҡалар нимә уйлар, тип бик йыш борсола башлағанһығыҙ. Хатта нимәләр эшләп ҡарамаған саҡта ла, һеҙгә һәр ваҡыт ғаилә, дуҫтар, туғандар алдында яҡшы күренергә тейеш кеүек тойола. Шуға күрә, иң яҡшы ысул - уңышҡа дусар булған нәмәне генә эшләү, тигән һығымта яһағанһығыҙ. Тормошта нимәләр 100 процентҡа ышанмаған өсөн үҙ мөмкинлектәребеҙҙе үҙебеҙ сикләйбеҙ. Күрәһең, бындай мөнәсәбәт үҫмерлек осорона барып тоташалыр, сөнки тап шул ваҡытта һәр кем тиҫтерҙәре тарафынан хуплау табырға, улар араһында үҙ кеше булырға тырыша. Күпселек үҫмер алйот һәм көлкөлө булып күренеүҙе үлем менән тиң күрә. Үҫмер саҡта үҙеңде башҡалар менән сағыштыраһың, тиҫтерҙәреңдә үҙеңдә булмаған әллә күпме өҫтөнлөктәрҙе күрәһең. Һөҙөмтәлә, уңышһыҙ булып күренмәү өсөн күләгәлә ҡалырға тырышаһың. Мөмкин ҡәҙәр уңышһыҙлыҡтарҙан ҡасып, хуплау көтәһең. Тәртиптең бындай схемаһы төпкә аңға һеңеп ҡалғанлыҡтан, беҙ үҙебеҙҙең сикләнгән фекерләүебеҙ тотҡоно әүереләбеҙ. Бының өсөн комфорт зонаһы булдырабыҙ, кире хәл-тороштан ҡасабыҙ, үҙебеҙҙе уңайлы һәм ышанысы тойор өсөн билдәле бер мәшәҡәтле режим булдырабыҙ. Үкенескә күрә, комфорт зонаһы үҙенән ситтә булған барлыҡ сикһеҙ мөмкинлектәргә юлды яба.

**Роберт ЭНТОНИ.**



## 3 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.20 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 03.25 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тонкий лед". 9- и 10-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.20, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Каменская". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.35 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Челночницы". 1-я и 2-я серии. Драматический сериал (12+).
23.00 "Специальный корреспондент". "Донбасс. Дети войны" (16+).
24.00 "Расследование Эдуарда Петрова" (16+).
01.00 "Каменская". Сериал (16+).
03.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учим башкирский язык".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Борсаҡ".**
**10.45 "Оставить след" (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Байыҡ-2016" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Книга сказок".**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Следопыт" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**17.30, 21.30 Новости.**
**18.00 "Бай" (12+).**
**18.55 Волейбол. Чемпионат России.**
**21.00 "Знакомьтесь, полицейский"(12+)**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Ворчун". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Интервью" (12+).**
**01.45 "Измена предкам" (12+).**

## 4 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.20 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 02.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 04.00 "Мужское/Женское" (16+)
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тонкий лед". 11-я и 12-я, заключительная, серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.35 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Челночницы". 3-я и 4-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.05 "Каменская". Детективный сериал (16+).
03.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**10.15 "День учителя физкультуры".**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Любовница дьявола". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 Дневник конкурса "Байыҡ-2016"**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Лит-ра. Зайнаб Биишева".**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.45 "Красная кнопка" (16+).**
**16.45 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (12+).**
**18.00 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**18.50 Хоккей. КХЛ.**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Новая полицейская история". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Интервью" (12+).**
**02.00 "Встреча с молодостью" (12+).**

## 5 ОКТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.20 "Про любовь". Ток-шоу (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 02.15, 03.05 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.45 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Забудь и вспомни". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 Ночные новости.
00.10 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.35 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Челночницы". 5-я и 6-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
23.50 "Команда" с Рамазаном Кадыровым (12+).
01.00 "Каменская". Сериал (16+).
02.55 "Семейный детектив". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Генрих VIII". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 18.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 Дневник "Байыҡ-2016" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Лит-ра".**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 20.15 "Кинзя". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**22.00 "Власть отвечает" (12+).**
**23.00 "Первый учитель". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 С. Лобозеров. "Кавардак" (12+).**

## 6 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.20 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 03.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Забудь и вспомни". 3-я и 4-я серии (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 Ночные новости.
00.10 "На ночь глядя" (16+).
01.10, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.35 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Челночницы". 7-я и 8-я серии (16+).
23.00 "Поединок". Общественно-политическое шоу (12+).
01.00 "Каменская". Детективный сериал (16+).
03.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Квадратный метр"". "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Генрих VIII". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 18.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 Дневник "Байыҡ-2016" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященный Дню Республики.**
**16.45 "Мечты" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.15 "Кинзя". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Замандаш" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Валландер". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т.Миннуллин. "Любовница" (12+).**

## 7 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.20 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет"
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу.
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Дэвид Гилмор: Широкие горизонты". Док. фильм (16+).
01.40 "Большой Лебовски". Криминальная комедия (18+).
03.50 "Похищенный сын: История Тиффани Рубин". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00, 01.10 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.35 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести РФО".
17.45 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина". Юмористическое шоу (12+).
23.15 "Некрасивая любовь". Мелодрама (16+).
03.00 "Жизнь взаймы". Худ. фильм (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Генрих VIII". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 18.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Автограф". "Олег Ханов" (12+).**
**12.45 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 Дневник конкурса "Байыҡ-2016"**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.45 "Народный праздник Сабантуй" (6+).**
**16.45 Док фильм "Властелин мира. Никола Тесла".**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00, 20.15 "Кинзя". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 "Большой взрыв". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.300 Х.Иргалин. "Вой волчицы" (12+).**

## 8 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Живет такой парень". Худ. фильм.
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.40 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Это я удачно зашел". К 80-летию Леонида Куравлева (12+).
11.25 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Голос". Спецвыпуск (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
22.40 "МаксимМаксим" (16+).
23.45 "Подмосковные вечера" (16+).
00.40 "На паузе". Комедия (16+).
02.15 "Привет семье!" Худ. фильм (12+).
04.10 "Модный приговор".
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.55 "Афоня". Худ. фильм.
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Сто к одному". Телеигра.
10.05 "Эдмонд Кеосаян. Не только "Неуловимые". Док. фильм к 80-летию со дня рождения режиссера (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Это смешно" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Подмена в один миг". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.05 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Злая судьба". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Красавица и чудовище". Мелодрама (12+).
03.00 "Марш Турецкого-3". Детективный сериал (16+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Агент Краш" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**10.15 "7 чудес Башкортостана" (12+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.00 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык".**
**13.00 Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 Всемирная Фольклориада-2016**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан"**
**22.30, 02.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+)**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**01.45 "Родительский контроль" (12+).**

## 9 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Старики-разбойники". Худ. фильм.
08.05 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 К 90-летию актера. "Евгений Евстигнеев. Я понял, что я вам еще нужен" (12+).
13.20 "Теория заговора" (16+).
14.10 Праздничный концерт к Дню работника сельского хозяйства.
16.00 "Точь-в-точь". Новый сезон (16+).
19.00 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Коста-Рики.
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?"
23.40 "Прогулка среди могил". Детектив (16+).
01.45 "Королевский блеск". Худ. фильм (16+).
03.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00 "Королева льда". Худ. фильм (12+).
07.00 МУЛЬТ утро. "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается!"
14.00 "Вести".
14.20 "Исцеление". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Удивительные люди".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Станция "Восток". На пороге жизни". Док. фильм (12+).
02.30 "Без следа". Детективный сериал (12+).
03.535 "Смехопанорама".
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Мечты" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.)**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Баллада о доблестном рыцаре Айвенго". Худ. фильм (12+).**
**18.45 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**19.00 "Москва-Васюки" (12+).**
**20.15 "Всемирная Фольклориада-2016" (6+).**
**21.15 "Хочу жилье!" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Мумия: Принц Египта". Худ. фильм (16+).**

✓ *Иң ҡыҙыҡлы тамаша - ул "Йәш актер курсы" квесты булды. Ҡатнашыусылар бер ыңғайҙа актер тормошо менән танышты, грим һалырға, реквизиттар һәм костюмдар бүлмәһен табырға, физик күнекмәләр эшләргә тейеш булды.*



*ИҒТИБАР: "СЕЛТӘР" БӘЙГЕҺЕ!*

# УНЫ СЕЛТӘР ҘӘ, ҺАҠАЛ ДА, АЛМИҘЕҮ ҘӘ, ХӘСИТӘ ЛӘ ТИҘӘР...




Быйылғы йыл башында Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы "Сәсәндәр үҙәге", Башҡортостан Республикаһы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Агинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, Сибай "Агинәй" йәмәғәт ойошмаһы инициативаһы менән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" (**һаҡал, алмиҙеү, хәситә, тушелдерек**) традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһе иғлан ителгәйне. Ойоштороу комитеты хәбәр итеүенсә, ноябрҙең 20-нә тиклем бәйгелә ҡатнашыусылар ғаризаларын һәм фото-, видеоматериалдарын "Селтәр" тигән билдә менән ошо адрес буйынса ебәрергә тейеш: **450103, Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Бишева урамы, 17/2, Республика халыҡ ижады үҙәге; 8-(347) 289-62-00 (тел.- факс), 289-65-50, e-mail: gukrcnt@mail.ru. Яуаплы: Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы Баймырҙина.**

Фото һәм видеоматериалдарҙы шулай уҡ бәйгенең мәғлүмәти бағыусыһы -"Бәйләнештә" социаль селтәренең "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" һәм "Селтәр", "Агинәй" төркөмдәренә һалырға мөмкин. Ҡатнашыусылар өсөн мотлаҡ шарт: селтәрҙәр автор эше булырға тейеш. Һуңғы ике йылда эшләнгән эштәр ҡабул ителә.

Бәйгенең икенсе этабы Өфө ҡалаһында 26 ноябрҙә (урыны аныҡлана) "Башҡорт милли кейеме көнө" байрамы (кисәгә милли кейемдә килеү мотлаҡ) булараҡ үтә һәм ул түбәндәге сараларҙан тора: селтәрҙәр күргәҙмәһе (мәҙәниәт йорто фойеһында); башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме ҡашмау буйынса оҫталыҡ дәресе; ҡатнашыусылар һәм ойоштороусылар менән конкурс һөҙөмтәләре буйынса түңәрәк ҡор; сәхнәнән селтәрҙәрҙе демонстрациялау; бәйгелә ҡатнашыусыларҙы бүләкләү.

**Номинациялар:**

1. "Ырыу-төбәктең селтәр өлгөһө" (аныҡ тарихи осорҙағы селтәрҙең реставрацияланған варианты).
2. Традицион селтәр.
3. "Үҫмер ҡыҙ бала өсөн селтәр".
4. "Йәш-еленсәк өсөн селтәр".
5. "Заманса стилләштерелгән селтәр".

**Бәйгенең мәғлүмәти бағыусылары:**
Башҡортостан юлдаш телевидение каналы.
Башҡортостан юлдаш радиоһы.
-"Киске Өфө" гәзите редакцияһы;
-"Шоңҡар" йәштәр журналы;
- "Аманат" балалар журналы.

ОЙОШТОРОУ КОМИТЕТЫ.

*АФАРИН!*

# "ТЕАТР ТӨНӨ"




**Театр - тормошто һүрәтләй, тиеүҙәре дөрөҫ булһа, кеше бер ваҡытта ла спектаклдәргә йөрөүҙән туктамаясаҡ. Сөнки һәр кем үҙен, йәмғиәтте ситтән, тамашасы залында ултырып күҙәткеһе, йәшәйеш айышына төшөнгөһө килә. Дүртенсе тапҡыр үткәрелгән "Театр төнө" акцияһында ҡатнашыусыларҙың һаны йылдан-йыл арта барыуы ла ошо хаҡта һөйләй.**

Быйыл Өфөләге "Театр төнө"ндә егермегә яҡын майҙанда тамашасылар йыйылды. БР Дәүләт академия рус драма театрында улар актерҙарҙы ҡыҙыл келәм буйлап үтеүен күҙәтте һәм артабан театр йондоҙҙары менән әңгәмә барышында яҡындан танышыу, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарына яуап ишетеү мөмкинлеге алды. Әйткәндәй, театрҙың 155-се ижад миҙгеле "Аҡбуҙат" башҡорт халыҡ эпосы буйынса ҡуйылған рок-операның премьераһынан башлана. Ә бына М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында тамашасылар төрлө оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашты, классик музыка тыңлап ял итте, спектаклдәрҙән өҙөктәр һәм йәш актерҙарҙың бенефисын ҡараны.

- "Театр төнө" тамашасылар йәлеп итеү өсөн үткәрелгән сара. Ҡала халҡы йылына бер тапҡыр театр тормошо менән яҡындан таныша ала, ә актерҙар йылына бер тапҡыр үҙе теләгәнсә тамаша ҡора, - тине М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры директоры Азат Йыһаншин бер төркөм журналистар менән театрҙың ижад бүлмәләре буйлап сәйәхәт иткән мәлдә.

М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры йыл да был акцияға маҙыҡтырғыс яңы проекттар уйлап сығарып ҡына тора. Быйыл театр һөйөүселәр төрлө спектакль геройҙары менән бергә "Мин Башдрамды яратам" бейеү флешмобында, "Кино йылы"на арналған клип төшөрөүҙә ҡатнашты һәм фото төштө. Шулай уҡ, уларға театрҙың икенсе ҡатындағы күргәҙмә залында "Мөбәрәковтарҙың театраль династияһы" тигән күргәҙмә тәҡдим ителде. Әммә актерҙар әҙерләгән иң ҡыҙыҡлы, мажаралы тамаша - ул театр бинаһы буйлап ойошторолған "Йәш актер курсы" квесты, йәғни төрлө һынауҙарҙы үтеү булды. Ҡатнашыусылар бер ыңғайҙа актер тормошо менән танышты, грим һалырға, реквизиттар һәм костюмдар бүлмәһен табырға, физик күнекмәләр эшләргә тейеш булды. Ун команда араһынан утыҙ һигеҙ минут эсендә бөтә ҡушылғандарҙы үтәй алған иң етеҙҙәргә театрҙың көҙгө репертуарына билеттар тапшырылды. Бында "Театр төнө" А. Әхмәтвәлиеваның "Ул бит кисә ине" лирик комедияһы һәм О. Жайдаровың "Джут" драмаһы спектаклдәре менән тамамланды. Ваҡыт һуң булыуға ҡарамаҫтан, атаәсәләре менән бергә килгән кескәй тамашасылар ҙа спектаклдәрҙе бик ҡыҙыҡһынып ҡараны. "Театр төнө" йәш быуынды сәнғәткә ылыҡтырып, матурлыҡты күрә белергә өйрәтеп тәрбиәләү йәһәтенән дә бик уңышлы проект булыуын тағы бер ҡат иҫбат итте.

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.

*БАҠСА*



# ҠАРАҒАТ

**Ғәҙәттә, баҡса емештәре артыҡ иғтибар талап итмәй, әммә даими иғтибар талап иткән ике төр бар - баҡса еләге һәм ҡарағат. Еләкте баҡсасылар өф итеп кенә тора, күсереп ултырта, ерен йомшарта, һыу һибә. Ә ҡарағатты унар йыллап бер урында үҫтерәләр, һуңынан уның яҡшы уңыш бирмәүенә аптырайҙар. Ҡара ҡарағат мул уңышы менән ҡыуандырһын өсөн ҡыуаҡлыҡты яңыртып торорға кәрәк.**

Ҡарағат емеше ҡыуаҡтың уртаһындағы ботаҡтарҙа өлгөрә. Был зонала уңыш биреүсе ботаҡтарҙың төп өлөшө урынлашҡан, әммә улар 2-3 йылдан һуң уңыш биреүҙән туҡтай. Шуға ла ҡарағатты йыл һайын йәшәртеп торалар. Иҫке ботаҡтарҙы ҡырҡыу ҙа мотлаҡ. 2-3 йәш ботаҡ ҡалһа, еткән. 5 йылдан олораҡ ботаҡтарҙы ергә тигеҙләп ҡырҡалар. Ошолай эшләгәндә ҡыуаҡта төрлө йәштәге 10-15 ботаҡ ҡына буласаҡ.

Ун йыл үҫкәндән һуң ҡыуаҡты бөтөнләй тамыры менән аҡтарып алырға кәңәш ителә. Ҡыуаҡҡа 7-8 йыл тулғас, уның урынына яңыһын әҙерләй башлайҙар. Быны өсөн яҡшыһы - бер ботаҡты эйҙереп, 5 см тирәһендә ҡаҙылған соҡорға тимер сым менән ныҒытып ҡуйыу. Ботаҡ көслө, һау булырға тейеш. Быны, ғәҙәттә, яҙ эшләйҙәр. Йәш үсентеләр сығып, 15 см бейеклеккә еткәс, тупраҡ менән өҫтәмә рәүештә күмергә. Көҙгөләккә йәш үсентенең тамыры нығынасаҡ. Шул саҡта уларҙы ҡырҡып, тупрағы менән бергә ҡаҙып алаһың да, үҫә торған урынына күсерәһең.

Йәш үсентеләрҙе көҙ ултыртыу иң дөрөҫө. Яңы ҡыуаҡ яҡшы уңыш бирһен тиһәгеҙ, ҡыуаҡты бер яҡҡа ауыштырып ултыртығыҙ, был саҡта өҫтәмә тамырҙар һәм тағы ла йәш үсентеләр барлыҡҡа киләсәк.

Ҡарағат ҡыуағын ҡояш нурҙары тура төшкән урынға ултыртмайҙар, улар күләгәле урынды ярата. Шул саҡта ҡарағат та эре була.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4-5 октябрь Премьера "Антигона"** (Ж. Ануй) драма

**6 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**7 октябрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6-7 октябрь Премьера "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**2 октябрь "Башкортостан - золотая моя колыбель"**, театр танца, солисты филармонии. Начало 12.00

**6 октябрь "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миңнуллин), драма

## Салауат дәүләт башҡорт театры

**1 октябрь "Велопрогулка-2016".** 12.00 - Ленин исемендәге майҙанда йыйылыу; 13.00 - театр алдындағы майҙанда театрлаштырылған тамаша

**6 октябрь** 84-се ижад миҙгелен асыу **"Шулай булды шул"** (Т. Миңнуллин), комедия

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (2) дүшәмбе | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:14 | 18:44 | 20:14 |
| 4 (3) шишәмбе | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:12 | 18:42 | 20:12 |
| 5 (4) шаршамбы | 5:58 | 7:28 | 13:30 | 17:09 | 18:39 | 20:09 |
| 6 (5) кесе йома | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:07 | 18:37 | 20:07 |
| 7 (6) йома | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 17:04 | 18:34 | 20:04 |
| 8 (7) шәмбе | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 17:02 | 18:32 | 20:02 |
| 9 (8) йәкшәмбе | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 16:59 | 18:29 | 19:59 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒЛАН*

Өфө ҡалаһының 3-сө Балалар стоматология поликлиникаһы (Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 16/1) ошонда теркәлгән 0 йәштән алып 18-ҙе тулмаған балалар һәм үҫмерҙәрҙе ҡабул итә.

Поликлиникала медицина хеҙмәте учреждениеның эш режимына һәм белгестәрҙең эш графигына ярашлы күрһәтелә. Эш ваҡыты: дүшәмбе - йома 8.00 - 20.00. Шәмбе - 8.00 - 16.00.

1 йәшкә тиклемге пациенттар мөрәжәғәт иткән көндә сиратһыҙ ҡабул ителә. Алдан яҙылырға кәрәкмәй.

1 йәштән өлкән балалар медицина тикшереңеүе үткәндә шулай уҡ алдан яҙылмайынса көнөндә үтә.

Тиҙ ярҙам мөрәжәғәт иткән көндә күрһәтелә.

**Табипҡа яҙылыу өсөн:**

- www.gosuslugi.ru йәки rb.k-vrachu.ru электрон адресы аша интернет порталы;
- (347) 246-32-18 телефоны аша поликлиника регистратураһы;
- Кеҫә телефондары аша 09383 номеры, стационар телефондар өсөн 246-93-83 номеры аша (поликлиниканың коды - 173) контакт үҙәге;
- Поликлиникала урынлашҡан Инфомат аша.

Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса медицина ярҙамы алыу өсөн 14 йәшкә тиклем балаларға тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ, 14 йәштән өлкәндәргә РФ гражданины паспорты менән мотлаҡ медицина страховкаһы полисы кәрәк.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "ЙӨҘӨМДӘН ЙЫЛМАЙЫУ КИТМӘЙ..."



**Алтын көҙ - концерт-тамашаларға ла бай мәл. Ғөмүмән, һәр ижадсы үҙенең эшенең һөҙөмтәләрен башҡаларға ла күрһәткеһе, уңыштары менән уртаҡлашҡыһы ла киләләр, моғайын. Башҡорт эстрадаһында күптән үҙенең лайыҡлы урынын тапҡан йырсы - Дияна ИШНИЯЗОВА менән 6 октябрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтәсәк ҙур тамашаһы алдынан әңгәмә ҡороп алдыҡ.**

➔ **Дияна, эстраданың үҙенең ҡанундары бар, уның "мәрхәмәтенә" лайыҡ булыу өсөн йырсы ниндәй булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

- Эстрадала үҙеңдең урыныңды табыу, йәш йырсылар араһында юғалып, тәңһеҙләнеп ҡалмау өсөн иң тәүҙә ҙур теләк, үҙ өҫтөңдә ныҡлап эшләү, камиллашыуға теләк тә, ихтыяр ҙа кәрәк. Әгәр ҙә йыр менән эшем генә түгел, ә минең йәшәү мәғәнәм, минең тормошом икән, әлбиттә, былдай ихтыярға эйә булырға ынтылаһың инде. Мин үҙемде тағы ла ниндәй өлкәлә таба алыр инем икән, был һорауға яуап биреп тә булмай.

Минең ҙур сәхнәгә сығыуыма ун һигеҙ йыллап барҙыр. Профессиональ йырсымын, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының эстрада бүлеген тамамлағайным. Ҡала мәҙәниәт һарайында оҙаҡ йылдар солист-вокалист булып эшләйем. Эштә төрлө телдә йырҙарға тура килә. Ғөмүмән, төрлө телдәге йырҙарҙы башҡарыу - ул йырсыны үҫтерә, уны төрлө яҡлап аса, тигән фекерҙәмен. Буласаҡ концертымда ла төрлө йырҙар яңғыраясаҡ.

➔ **Шулай ҙа тамашасы Дияна Ишниязованы күберәк башҡорт телендә патриотик йырҙар башҡарыусы тип белә түгелме икән?**

- Мин Калининградта тыуып-үҫһәм дә, Башҡортостанға гел ҡайтып йөрөй инек. Өләсәйем үҙе лә килеп етә ине беҙгә, башҡортса уҡый, яҙа ла белеүем уның тырышлығы һөҙөмтәһе. Атайым Учалы районынан, әсәйем Силәбе башҡорто. Ғөмүмән, башҡорт мөхите, башҡорт тормошо ныҡ яҡын миңә. Башҡорт ҡыҙы булыуымды бер минутҡа ла онотҡаным юҡ. Шуға ла минең башҡортса йырлап, сәхнәгә сығыуыма аптырарға ла түгел. Элек аңлап етмәһәм дә, хәҙер милли кейемгә, тарихыбыҙға ныҡ иғтибар итәм, өйрәнергә тырышам. Сәхнә кейемдәрен дә башҡорт милли костюмы элементтары менән биҙәп кейәм. Кемдер быға ыңғай ҡарай, әрләүселәр ҙә бар. Үҙемдең рәссам-модельерым, стилистарым бар, шуға ла мин милли кейемебеҙгә тап төшөрәм, тип уйламайым, киреһенсә, уны таратыуға булышлыҡ итәм. Тыуған еремде, милләтемде данлап йырлау оҡшай миңә, шуға ла патриотик йырҙар ҙа барлыҡҡа килде репертуарымда. Хисле кешемен, йырлағанда ҙур кинәнес алам, көлһәм, ҡысҡырып көләм, холҡом менән шундаймын. Республикама һоҡланып йырлайым икән, мин ихлас һоҡланам, ошо тойғолар йырға ла күсә. Ошо хистәремде тыңлаусылар ҙа тоя.

➔ **Артыҡ хисле булыу тормошта ҡамасауламаймы?**

-Ҡайһы саҡта ҡамасаулай ҙа. Мәҫәлән, мин ныҡ кәрәк саҡта ла йөҙөмә етдилек сығара алмайым. Йөҙөмдән йылмайыу китмәй. Кешеләр етди эштәрҙе етди йөҙ менән эшләргә кәрәк тип яңылыша ул барыбер. Былай күңелемдән мин бит етди кеше, киләсәккә пландарым да бик етди һәм ҙур.

➔ **Башҡорт шоу-бизнесы үҙе йәшәйешебеҙгә әллә ни береген китә алмаһа ла, ул терминды беҙ йыш ҡулланабыҙ. Ошо "шоу-бизнес" тигән төшөнсә йырсыға үҙенең ҡанундарын, әйтәйек, ниндәй йыр йырларға кәрәклеген көсләп тағамы?**

- Шоу-бизнес тигән нәмә беҙҙә юҡ кимәлендә. Хатта кемдер миҫал итеп килтереп тә булмай шикелле. Икенсе яҡтан, әйтәйек, эстрада былдай мөнәсәбәттәр хөкөм һөргән булһа, бөтөн нәмә тик аҡсаға, алыш-бирешкә генә ҡоролор ине. Европаға, Америкаға ҡарағыҙ, унда шоу-бизнеста тик бай кешеләр генә урала. Йырсы бер йыр, клип, бер диск сығарып, миллионерға әйләнеп китә ала, сөнки унда йыр - тауар. Беҙ бөтөнләй икенсе мөхиттә йәшәйбеҙ. Башҡорт бит ул гел йырлаған, уның боронғо йырҙары ғына ни тора! Беҙҙә йырҙы байыу өсөн түгел, күберәк күңел өсөн йырлайҙар. Унан һуң, башҡорт йырсыларының тыңлаусылары ла һан яғынан күп түгел бит, был да шоу-бизнестың үҫешенә булышлыҡ итмәй.

➔ **Әсәй булғас, ижадҡа ҡарашығыҙ үҙгәрҙеме?**

- Әлбиттә. Кеше һәр ваҡыт үҫешергә тейеш. Ыңғаймы ул, киреме, тәжрибә туплана һәм ошо тәжрибә һинең ижадыңа ла йоғонто яһай. Ғаилә ҡороу, балалар тәрбиәләү, уларҙың һөйөүен тойоу, уларға ла күңелеңдә бөткөһөҙ наҙ йөрөтөү йырҙарҙа ла сағыла. Шулай уҡ эргә-тирәмдәге кешеләр менән мөнәсәбәт тә йоғонто яһай ижадҡа, ул тәрәнәйә, мәғәнәлерәк була бара. Элек миҙалдың ике яғын ғына күрһәм, хәҙер мин уны 360 градустан ҡарап, төрлө ҡырҙарын асам...

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАШҠОРТ ТЕАТРЫНЫҢ...

## үҙ Антигонаһы буласаҡ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының 97-се ижад миҙгелендәге тәүге премьераһы - Жан Ануй пьесаһы буйынса "Антигона" спектакле буласаҡ. Уның премьераһы 4-5 октябргә тәғәйенләнгән.**

- Башҡорт сәхнәһендә "Антигона"ны сәхнәләштереү идеяһы күптән барлыҡҡа килгәйне, - ти театрҙың художество етәксеһе Олег Ханов. Әйткәндәй, ул милли сәхнәлә беренсе тапҡыр ҡуйыла. Режиссеры - Ғ. Камал исемендәге Татар дәүләт академия театрының баш режиссеры Фәрит Бикчәнтәев. Ул спектаклде музыкаль яҡтан да биҙәйәсәк. Башҡорт теленә әҫәрҙе Факил Мырҙаҡаев тәржемә иткән. Спектаклдә йәш актерҙар ҙа ҡатнаша, төп ролде Лилиә Ғәлина уйнаясаҡ.

- Йәш коллегаларым өсөн "Антигона" - оло тәжрибә һәм ижади баҫҡыс. Спектаклгә килгән тамашасылар уның ниндәй зауыҡ менән эшләнгәнлегенә мөкиббән китәсәк, - ти Олег Закир улы. - "Антигона"ның сюжеты бөгөн дә әһәмиәтле - әхлаҡи ҡиммәттәргә тоғро ҡалыу. Эргә-тирәһендә барған кире ваҡиғаларҙа ла ошо көсһөҙ генә ҡыҙ бала уларға ҡаршы тора һәм үҙенең кешелек намыҫын һаҡлап ҡала ала...

Ғөмүмән, был ижади миҙгел яңы спектаклдәргә бай булмаҡсы. Әлеге мәлдә режиссер Айрат Абушахманов Гүзәл Яхинаның "Зөләйха күҙҙәрен аса" романы буйынса сценарий өҫтөндә эшләй. Ул 2017 йылдың тәүге яртыһында ҡуйыласаҡ. Тағы ла бер премьера Флорид Бүләковтың әҫәре буйынса буласаҡ. Билдәле драматургтың "Һибелә сәсең, тарала" пьесаһы Ғ. Камал исемендәге Татар театрында һәм "Go, Баламинкин" исеме аҫтында Милли йәштәр театрында ҡуйылғайны. Был спектаклде йәш режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев әҙерләсәйәк. "Флорид Бүләковтың исеме, уның хаҡындағы хәтер беҙҙең театрҙа йәшәргә тейеш", - ти Олег Ханов. Мәскәүҙә Бахрушин музейында уның "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?" спектакле рус телендә ҡуйылған, ноябрҙә был әҫәрҙе мәскәүҙәр театрҙың бәләкәй залында Өфө тамашасыһына тәҡдим итмәксе.

Билдәләнеүенсә, 97-се ижад миҙгелендә төрлө тамашаларҙан тыш, театрҙа күп тамашасыларҙың яратҡан актерҙары - Гөлли Мөбәрәкова, Илһөйәр Ғизетдинова, Шәүрә Дилмөхәмәтова, Әхәт Хөсәйенов, Миңзәлә Хәйруллина матур юбилейҙарын да билдәләйәсәк.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АРЗАН ТАУАР...

## ярлы кешенең малын бөтөрә

Кеше аҡылы менән бай булғансы, үҙ аҡылың менән ярлы бул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алға ҡарамағандар... артта ҡала.

**(Мексика халыҡ мәҡәле).**

Бәләләр тимерсенең сүкешенә оҡшаш: тәүҙә емереп ташлай, шунан яңынан сүкеп барлыҡҡа килтерә.

**(Карлина Бови).**

Идеялар үҙе түгел, ә тойғоға әйләнгәс кенә донъяны үҙгәртә ала.

**(Густав ле Бон).**

Барыһы ла уйҙарыбыҙҙан тора: ул тормошобоҙҙо йә тамуҡҡа, йә ожмахҡа әйләндерә ала.

**(Марк Аврелий).**

Шәмендә өрөп һүндергән ел мейесеңдә ҙур ут тоҡандырыуы ла бар.

**(Пьер Бомарше).**

Һүҙҙе иҫәпләргә түгел, ә үлсәргә кәрәк.

**(Йәһүд халыҡ мәҡәле).**

Һәр ҡатын-ҡыҙ өс өлөштән тора: йәндән, тәндән һәм... күлдәктән.

**(Урри).**

Бәхет эҙләп донъя ҡыҙырмағыҙ, ул һеҙҙең эргәлә, ҡул һуҙымы арала ғына.

**(Гораций).**

Ҡыҙыҡ был кеше тигәнең: ул байлығын юғалтһа, ҡайғыра, кире ҡайтмаҫ ғүмере үтә - быныһына битараф.

**(Абуль-Фарадж).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡояш байығанын күҙәтеп, тирә-йүн менән һоҡланып ултырған бер мәлдә Уҡытыусыға бер кеше килә һәм үҙ яҙмышына зарлана башлай. "Минең яҙмышым тормош мәшәҡәттәре диңгеҙендә батып барған тишек кәмәгә оҡшаған", - ти ул. Уҡытыусы ҡарашын диңгеҙ киңлегенә төбәп, былай ти:**

**- Ошо диңгеҙҙә күпме кеше батып һәләк булған, ә һин тере. Ошондағы балыҡтарға ем булған кешеләр һинең яҙмышыңа көнләшер генә ине...**

**Ҡояштың һуңғы нурҙары байығас, Уҡытыусы урынынан тороп, ҡалаға табан атлай. Теге кеше лә һүҙһүҙ генә уның артынан эйәрә. Уның уйлана биргәнен һәм һүҙҙе йомғаҡлап ҡуйырға кәрәк икәнен аңлап, Уҡытыусы дауам итә:**

**- Һыуға сумған кеше түгел, ә йөҙә алмаған кеше батып үлә. Ҡайһы бер һыуға сумған кешеләр хатта алтын балыҡ тешләп алып та йөҙөп сығалар..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1830/09